Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы
Башҡортостан мәғариф үҫтереү институты

Нафиҡова З.Ғ.

# Уйнай-уйнай үҫәбеҙ

БМКИ нәшриәте
Өфө 2010

УДК 372
ББК
Башк
Н 34

**Башҡортостан Республикаһы**
**Мәғариф министрлығы**
**тарафынан тәҡдим ителде**

Нафиҡова З. Ғ. Уйнай-уйнай үҫәбеҙ. Методик ҡулланма. - Өфө: БМКИ нәшриәте, 2010, -105 бит.

Методик ҡулланма "Башҡорт балалар баҡсаһында уҡытыу-тәрбиә программаһы"ның (авторҙар Ғ.Ғ.Ғәлиева, З.Ғ.Нафиҡова, Өфө, 1999 йыл) "Уйын эшмәкәрлеге" бүлеге эстәлегенең методикаһына, уйын төрҙәренә, кескәйҙәрҙең шәхес буларaҡ үҫешендә уйындың тотҡан урынын асыуға бағышлана.

Һәр йәш төркөмө өсөн яҡынса йыллыҡ тематик план һәм балаларҙың уйнай белеү дәрәжәһен тикшереү өсөн күрһәткестәр бирелә.

Методик ҡулланма тәрбиәселәргә, ата-әсәләргә тәҡдим ителә.

Рецензенттар:

Сынбулатова Ф.Ш., Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтының доценты, педагогия фәндәре кандидаты.
Усманова Л. А., Өфө ҡалаһы 221-се һанлы «Шатлыҡ» башҡорт балалар баҡсаһы мөдире.

© Нафиҡова З.Ғ., 2010

© БИРО, 2010

# Аңлатма һүҙ

Балалыҡ уйындан, уйын балалыҡтан айырылғыһыҙ. Күп ваҡыт ололар уйынды бары тик күңел асыу сараһы тип кенә баһалаусан, ә балалар өсөн иһә ул – тотош бер донъя.

Уйындың мәктәпкәсә йәштәге баланың тормошонда төп эшмәкәрлек булараҡ урын биләүе рус ғалимдары Л.С.Выготский, Л.А.Леонтьев, Д.Б.Эльконин, Л.А.Венгер, В.С.Мухина, Л.Ф.Обухова хеҙмәттәрендә сағыла.

Л.С.Выготский билдәләүенсә, уйын - шәхес үҫеше сығанағы булып тора һәм уның яҡын аралыҡта үҫешенә шарттар тыуҙыра: «Бала уйын эшмәкәрлеге аша үҫә. Тик ошо мәғәнәлә генә уйын баланың төп эшмәкәрлеге тип һанала ала, йәғни уйын - баланың үҫеш кимәлен билдәләүсе ролде үтәй».

А.Н.Леонтьев төп эшмәкәрлекте түбәндәгесә аңлата: «Төп эшмәкәрлек тип, ошо эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә баланың психик үҫешендә ғәйәт ҙур үҙгәрештәрҙең барлыҡҡа килеүе һәм уның яңы үҫеш кимәленә күтәрелә алыуына булышлыҡ итеүсе эшмәкәрлек атала».

Һеҙҙең иғтибарға тәҡдим ителгән был методик ҡулланма «Башҡорт балалар баҡсалары өсөн уҡытыу-тәрбиә программаһы»ның (Ғ.Ғ.Ғәлиева, З.Ғ.Нафиҡова, Өфө, 1999 йыл) эстәлегенә ярашлы балалар баҡсаһында балаларҙың уйын эшмәкәрлеген әҙерләү һәм ойоштороу эшенә бағышлана. Әсбапта уйын төрҙәренә ҡыҫҡаса мәғлүмәт бирелә һәм балаларҙың йәш һәм психофизиологик яҡтан үҫешенә ҡарап, уларҙы нисек итеп үткәреү методикаһы ҡарала: тәрбиәсенең уйын алдынан балаларҙы уның эстәлеге, уйын кәрәк-яраҡтары менән таныштырыу алымдары, уйнау хәрәкәттәрен аңлатыу, күрһәтеү ысулдары, балалар менән бергәләп уйын хәрәкәттәрен үтәп ҡарау кәрәкме, юҡмы һ.б асылып бирелә.

Шулай уҡ тәрбиәсенең уйында ҡатнашыу дәрәжәһе ниндәй кимәлдә булырға тейеш, уйындың һөҙөмтәһен баһалауға ниндәй урын бирелә – былар бөтәһе лә әсбапта һәр йәш төркөмө өсөн айырым күрһәтелә.

Методик ҡулланмала шулай уҡ һәр төркөм балаларының йәш һәм үҫеш үҙенсәлектәре лә ҡыҫҡаса ҡаралған.

Балалар баҡсаһында эшләүсе тәрбиәселәргә ярҙамға уйындарҙы бер йылға тематик яҡтан яҡынса планлаштырыу өлгөләре бирелә. Планда һәр уйындың маҡсаты, уны йыһазландырыу өсөн алынған кәрәк-яраҡтар, уйын барышы күрһәтелә. Йыллыҡ планлаштырыу беренсе кескәйҙәр төркөмөнән башланып, һәр биш йәш төркөмө өсөн бирелә.

Балаларҙың уйнай белеү һәләте үҫешен билдәләү өсөн яҡынса күрһәткестәр бирелә.

Методик ҡулланмала бирелгән уйындар менән ата-әсәләрҙе лә таныштырыу мөмкин, был уйындарҙы балалар ата-әсәләр етәкселегендә өй шарттарында ла ихлас уйнай алалар.

# Балалар баҡсаһында уйын эшмәкәрлеге

Бала-саға уйындары шартлыса ике ҙур төркөмгә бүленә: *сюжетлы-ролле уйындар һәм ҡағиҙәле уйындар.*

*Сюжетлы-ролле уйындар* башлыса көндәлек көнкүреш һәм йәмғиәттәге күренештәренә, төҙөлөш һәм төрлө ҡоролмалар менән эш итеүгә бәйле булалар, тәбиғи материалдар менән уйын ҡороуға, күңел асыу һәм театрлаштырылған уйындар уйнауҙы үҙ эсенә алалар.

*Ҡағиҙәле уйындарға* дидактик уйындар (предметтар һәм уйынсыҡтар менән уйнау, һүҙле дидактик уйындар, баҫма-өҫтәл уйындары, йырлы-көйлө музыкаль уйындар) һәм хәрәкәтле (сюжетлы, сюжетһыҙ, спорт элементтары менән башҡарылған) уйындар инә.

Сюжетлы-ролле уйындарҙы балалар үҙҙәре уйлап сығаралар. Уларҙың эстәлегендә балаларҙың тирә-йүн тураһындағы белеме, тәъҫораттары, төшөнсәләре сағылыш таба. Кескәйҙәр уйын барышында үҙ-ара һәм тирә-яҡтағы кешеләр менән аралашыу ҡағиҙәләрен өйрәнәләр, улар араһында барлыҡҡа килгән төрлө мөнәсәбәттәрҙе ҡороу ысулдарын үҙләштерәләр.

Һәр бер уйындың *темаһы, уйнау маҡсаты, сюжеты, йөкмәткеһе һәм ролдәре* була. Был уйындарҙа балаларҙың алдан күрә белеү, күҙаллау һәләте үҫешә. Улар уйынсыҡтар, төрлө предметтар ярҙамында тирә-йүндәге күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы үҙе уйнаған роль аша һүрәтләй һәм күрһәтә белергә өйрәнәләр, үҙҙәрен ололар тормошонда әүҙем ҡатнашыусы итеп хис итә алалар.

Бала уйын аша тормоштағы күренештәрҙе асып биреп кенә ҡалмай, хатта уны үҙе теләгәнсә үҙгәртә, сюжеттың артабан ниндәй йүнәлештә үҫешен күҙаллай.

Ҡағиҙәле уйындарҙың йөкмәткеһе һәм уйын ҡағиҙәләре ололар тарафынан алдан уйланылған була. Уларҙың һәр береһендә уйындың маҡсаты, маҡсатҡа ярашлы башҡарыласаҡ хәрәкәттәр тәртибе бирелә.

Ҡайһы бер ҡағиҙәле уйындар сюжетлы булып, һәм сюжет буйынса башҡарырға кәрәкле ролдәр талап итә.

Ҡағиҙәле уйындар араһында халыҡ уйындары ҙур урын алып тора. Улар балаларҙың аң-белемен, зиһенен үҫтереү менән бер рәттән ҡыҙыҡлылығы, көләмәслелеге, мәрәкәлелеге менән айырылып торалар. Был уйындар кескәйҙәрҙең хәрәкәтләнеүен үҫтерә, сос, зирәк, ҡыйыу, йылғыр, батыр булырға өйрәтә.

Ҡағиҙәле уйындар үҙҙәре ҙур ике төркөмгә бүленә. Беренсе төркөмгә *дидактик уйындар* инә. Уларҙың төп маҡсаты булып – баланың аҡыл-зиһенен, донъяны танып-белеү һәләтен үҫтереү тора. Икенсе төркөмдө *хәрәкәтле уйындар* үҙ эсенә ала. Был уйындар төрлө хәрәкәттәрҙең башҡарылыу тәртибен нығытыуға һәм кескәйҙәрҙең хәрәкәтләнеү әүҙемлеген үҫтереүгә бәйле.

Бөтә был уйындар ҙа баланың фекерләү ҡеүәһен, телмәрен, хәтерен, күҙаллау һәләтен, ихтыяр көсөн үҫтереүгә йүнәлтелгән. Уйындар аша бала шәхес булараҡ формалаша һәм донъяуи әхлаҡи ҡағиҙәләр менән таныша һәм уларҙы үҙләштерә.

## Сюжетлы-ролле уйын

Уйын аша баланың аң-белем кимәлен үҫтереү һәм уның әхлаҡи ҡағиҙәләрҙе үҙләштереүен тәьмин итеү өсөн кәрәкле шарттар булыуы мөһим: беренсенән, баланың тирә-йүндәге әйберҙәр, күренештәр һәм ваҡиғалар тураһында ниндәйҙер *белеме* булыуы кәрәк. Икенсенән, уларҙың ололарға оҡшатып төрлө уйынсыҡтар, йәки ысынбарлыҡтағы эш ҡоралдары урынында ҡулланылған предметтар (ҡурсаҡ йәнлектәр, уйынсыҡ машиналар, һауыт-һаба, ҡумталар, төҙөлөш ҡоролмалары һ.б.) ярҙамында *уйын хәрәкәттәре башҡара* белеүе мөһим. Өсөнсөнән, уйын шарттарына яраҡлы рәүештә балалар *үҙ-ара аралаша алырға* тейештәр, йәғни балаларҙың ниндәйҙер кимәлдә һүҙ байлығы үҫешкән булыуы мөһим.

Ошо шарттарҙы тыуҙырып, уйынды күңелле һәм фәһемле итеп ойоштороуҙа тәрбиәсенең роле бигерәк тә ҙур. Уйын барышында үтәлгән хәрәкәттәр һәм уларҙың балалар тарафынан ниндәй кимәлдә алдан үҙләштерелеүе - уйындың яҡшы һөҙөмтәле булыуына сәбәп була.

Балалар уйынсыҡтар менән уйнай, уларҙы алмаштырған икенсе предметтарҙы ҡуллана белергә, төрлө төҙөлөш ҡоролмалар ярҙамында йорт-ҡура, һ.б. яһап, улар менән уйнау һәләтенә эйә булырға өйрәтелгән булырға тейештәр. Был йүнәлештә тәрбиәсе һәм ата-әсәләр кескәйҙәр менән тейешле күнекмәләр үткәреп, уларҙы уйнарға өйрәтергә көс һалырға бурыслылар.

Уйнағанда бала *үҙ эшмәкәрлеген ойоштора* ла белергә тейеш. Уйнар алдынан ул ниндәй уйын уйнаясағын, уйында үҙенең кем ролен башҡарасағын, уйын барышында ниндәй уйынсыҡтар һәм төҙөлөш ҡоролмалары кәрәк буласағын алдан күҙаллай. Бала ни тиклем оҙаҡ һәм бирелеп уйнаһа, уйын уға шул тиклем күберәк шатлыҡ, ҡыуаныс сығанағы булып тора һәм кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең эстәлегенә төшөнөргә ярҙам итә. Уйнаған һайын баланың ололар булып ҡыланыуы, улар һымаҡ төрлө хәрәкәттәр башҡарыуы һ.б. уға шәхес булараҡ үҫешергә, социаль яҡтан әүҙем булырға өйрәтә.

Тирә-йүндәге күренештәрҙе, ваҡиғаларҙы бала уйын аша һүрәтләп, үҙен ошо ваҡиғаларҙың шаһиты итеп күҙ алдына килтерә һәм күңелендәге хис-тойғоларҙы һүҙ ярҙамында асып бирә. Шулай итеп, үҙ-ара аралашыу мөмкинселеген тормошҡа ашыра.

Бала тәүҙә үҙенә уйнау өсөн иптәш һайлай. Үҙе уйында төп ролде башҡарырға тырыша. Тимәк, унығ менән уйнаған икенсе бала ул ҡуйған шарттар менән килешергә тейеш: уйын ойоштороусыға буйһона, уйын барышындағы ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәй белергә тейеш. Ошо рәүештә уйын ваҡытындағы аралашыу – эш ойоштора белеү һәләтенә лә нигеҙ һала.

Баланың йәше артыу менән бергә уйнау процессында аралашыуҙың төрҙәре лә, унығ мәғәнәүи яҡтан йөкмәткеһе лә үҙгәрә. Уйында ҡатнашыусыларҙан маҡсатҡа ирешеү өсөн кәрәкле кимәлдә белем һәм күнекмәләрҙе башҡарыу оҫталығы талап ителә.

Яйлап, педагог тарафынан тәрбиәүи эш үткәрелеү һөҙөмтәһендә, һәр баланың теге йәки был уйынға булған ҡыҙыҡһыныуы, төрлө ролдәрҙе башҡарып ҡарау теләге арта һәм кескәйҙәрҙә ролдәрҙе үҙ-ара

бүлешә белеү һәләте формалаша башлай. Уйнар өсөн төркөмсәгә бүленгән балалар тәүҙә аҙ һанлы булалар (4-5 кеше). Бер аҙ ваҡыт үтеүгә улар бергә татыу итеп оҙаҡ ҡына уйнай башлайҙар.

Уйын балаларҙың тормошонда бер-береһенә ҡарата яҡшы мөнәсәбәттәр тәрбиәләүҙә ифрат ҙур урын биләй. Педагог төркөмсәләргә бүленеп уйнаған балаларҙы бер-береһенә ҡарата иғтибарлы, хөрмәтле, ярҙамсыл булырға өйрәтә.

Өлкән төркөм балалары уйын барышында үҙ теләктәре менән бер нисә төркөмсәгә бүленәләр. Улар бер маҡсат менән берләшеп, үҙҙәренең эш-хәрәкәттәрен коллектив күҙлектән сығып баһалайҙар. Уйын ҡағиҙәләрен боҙмаҫҡа, һәр эште еренә еткереп башҡарырға, уйын барышында бер-береһе менән төрлө мөнәсәбәттәргә инеп, үҙ-ара аралашырға өйрәнәләр. Шул уҡ ваҡытта бындай төркөмсәлә һәр бала үҙенең әүҙемлеген, ижади һәләтлелеген күрһәтә ала: балалар бер-береһе менән кәңәшләшә, ролдәрҙе үҙ-аллы бүлешә, ҡатмарлы һәм бәхәсле уйын осраҡтарын үҙ-аллы сисә, уйынсыҡтарҙы һәм уларҙы алмаштырған төрлө предметтарҙы ижади рәүештә ҡуллана белергә өйрәнәләр.

Балалар уйыны маҡсатлы була. Уның маҡсатына ирешеү өсөн балаларға үҙаллылыҡ биреү кәрәк. Улар төрлөсә фараз итеп, уйын сюжетын күҙ алдына килтереп, уйын барышы талап иткән бурыстарҙы үтәргә тейештәр. Тик шул ваҡытта ғына талапсанлыҡ, ныҡышмалылыҡ, әүҙемлек, тапҡырлыҡ, сослоҡ, зирәклек тәрбиәләнә.

Сюжетлы-ролле уйындар менән етәкселек иткәндә, уйын оҫталығын үҫтереүҙе баланың аң-белеменең киңәйеүенә һәм уның тәрбиәле булып үҫеүенә лә бәйләп тормошҡа ашырыу мотлаҡ бурыс булып тора. Ошо талапҡа ярашлы өс төркөм алымдар ҡулланыла:

- беренсе төркөм алымдар баланың тирә-йүн тураһындағы белемен, төшөнсәләрен һәм тәьҫораттарын киңәйтеү маҡсатында күҙәтеүҙәр, экскурсиялар үткәреү; төрлө һөнәр кешеләре менән осрашыуҙар ойоштороу; нәфис әҙәбиәт әҫәрҙәрен уҡып ишеттереү; күргәҙмәлелек ҡулланып, әңгәмәләр үткәреү; һәр бала менән айырым рәүештә уның

көндәлек тормоштағы күренештәр, ваҡиғалар, кешеләр араһында булған мөнәсәбәттәр тураһындағы белемдәрен барлап ҡарау маҡсатында һөйләшеүҙәр үткәреү; ҡурсаҡ театры ярҙамында төрлө тамашалар ҡуйыу, уйнап күрһәтеү һ.б. менән бәйле;

- икенсе төркөм алымдар уйын эшмәкәрлегенең барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше менән бәйле. Иң беренсе сиратта тәрбиәсенең үҙенең уйында ижади ҡатнашыуы бик мөһим: бала менән икәүләп уйнау йәки төп ролде башҡарыу, йәки икенсе пландағы ролде уйнау һ.б. Тәрбиәсе балаларға дәрестә алған белемдәрен уйын ваҡытында ҡулланырға ярҙам итә: теге йәки был мәғлүмәтте иҫкә төшөрә, кәрәкле кәңәш бирә, уйынсыҡтар һайлаша йәки уларҙы уйын сюжеты буйынса уйлап сығарып, эшләргә ярҙам итә.

Уйын ваҡытында кескәйҙәрҙе маҡтап, дәртләндереп тороу, уйындың әүҙем үҫешенә йүнәлеш биреү кеүек алымдар ҙа балаларҙың үҙ-аллы уйнап китеүенә ярҙам итә.

Ролде дөрөҫ итеп уйнай һәм уны уйын аҙағына тиклем сюжетҡа яраҡлы башҡара алһын өсөн, бала менән алдан әңгәмәләшеү һәм роль башҡарыу өсөн кәрәк-яраҡтар әҙерләшеү үтә файҙалы була. Тәрбиәсе һәр баланың холоҡ, ҡылыҡ үҙенсәлеген, үҙ-үҙен тота белеү һәләтен уйын ойоштторғанда иҫтә тота. Кәрәкле ваҡытта уларҙың насар сифаттарын үҙгәртеү өсөн уйын ваҡытында тейешле сараларҙы ҡуллана ала. Һәр осраҡта баланың иң яҡшы холоҡ үҙенсәлектәрен беренсе урынға ҡуйып, уны башҡалар алдында һәйбәт яҡтан күтәреп, балаға үҙенең ҡыланыштарына, үҙ-үҙен тотоуына икенсе күҙлектән сығып ҡарау мөмкинселеген бирә. Был алымдар кескәйҙәрҙең шәхес булараҡ формалашыуына ярҙам итә.

- өсөнсө төркөм ысулдары булып балаларҙы төҙөлөш материалдары менән төрлө ҡоролмалар төҙөргә, уйынсыҡтар эшләргә һәм улар менән уйнарға өйрәтеү тора. Бигерәк тә фотоһүрәттәр, төрлө схемалар, һыҙмалар, пландар ҡулланыу баланың фекерләүен, күҙаллауын, хәтерен, иғтибарлылығын һ.б. үҫтереүгә ярҙам итә.

## Беренсе һәм икенсе кескәйҙәр төркөмдәре

(ике йәштән дүрт йәшкә тиклемге балалар)

Был йәштәге балаларҙың уйыны ябай сюжетлы була һәм бер-береһенә бәйле башҡарылған хәрәкәттәрҙән тора.

Бала үҙенә ниндәйҙер ролде билдәләп, күпмелер ваҡыт мауығып уйнап та ала. Ләкин баланың уйынға булған ҡыҙыҡһыныуы тиҙ үҙгәреүсән. Ул бер ролде икенсеһе менән йыш алмаштыра, күп ваҡыт уйын сюжетын да нисек теләй, шулай үҙгәртеп ебәрә.

Был йәштәге балаларға күберәк башҡаларға оҡшатып эш итеү хас. Уларҙың хис-тойғолары, күңел күтәренкелеге тиҙ үҙгәреүсән була, сағыу һәм ғәҙәти булмаған предметтарға ныҡыраҡ иғтибар итәләр. Шуға ла был төркөм балаларын аң-белемгә өйрәткәндә ҡыҙыҡлы һәм ололарға оҡшатып ҡабатлау теләге тыуҙырған хәрәкәттәр башҡарыу кәрәк. Мәҫәлән, «Ҡурсаҡ Айгөлдө кейендерәйек», «Ҡурсаҡ Гүзәлдең тыуған көнө» кеүек дидактик уйындарҙы уйнарға өйрәткән ваҡытта кейенеү, өҫтәл артында ашағанда үҙ-үҙеңде тота белеү кеүек эш-хәрәкәттәрҙе башҡарғанда, балаларға отоп алырға еңел булған һамаҡтар, һөйҙөрткөстәр, һикерткестәр, бишек йырҙары ла башҡарыу мөһим.

Ололар хеҙмәтен күҙәткәндә, балаларға эш барышында ниндәй хәрәкәттәр башҡарылыуын, уларҙың ниндәй тәртиптә үтәлеүен аңлатыу кәрәк: Гөлсөм апай табаҡҡа һыу ҡойҙо, шунан сынаяҡтарҙы бер-бер артлы һыуҙа йыуҙы. Уларҙы батмусҡа киптерергә теҙеп ҡуйҙы.

Балаларҙың аң-белем кимәле үҫеше артыуына ҡарап, уйынсыҡтарҙы һәм уйын кәрәк-яраҡтарын йыш ҡына өҫтәп тороу кәрәк. Тәрбиәсенең бала менән бергәләп уйнауы һәм уйын барышында уйынсыҡтар һәм улар урынында ҡулланылған башҡа предметтар менән эш-хәрәкәттәр башҡарыуы – балаға уйнарға өйрәнгәндә үтә лә мөһим алым булып тора. Мәҫәлән, тәрбиәсе ҡурсаҡ Айгөл ярҙамында яңы уйынсыҡтар менән балаларҙы таныштыра. Ҡурсаҡ Айгөл кескәйҙәрҙе сәй эсергә саҡыра, поезда, машинала сәйәхәт итергә саҡыра, башҡа

ҡурсаҡ йәнлектәр менән (ҡуян, айыу, бесәй, төлкө һ.б.) төрлө күңелле тамашалар башҡара.

Ике-дүрт йәшлек кескәйҙәрҙең уйынсыҡҡа һәм уның аша тиҫтерҙәренең уйынына ҡыҙыҡһыныуы көсәйә төшә. Мәҫәлән, бер үк ҡурсаҡтың ике әсәһе, бер машинаның ике шоферы барлыҡҡа килеүе мөмкин. Әсәй йәки шофер ролендәге һәр бала үҙе теләгәнсә уйнарға тырыша, бер-береһенең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү һәләтенә балалар әле эйә түгел. Әсәйҙең береһе ҡурсаҡты тышҡа сығырға кейендерә башлай, икенсеһе – йоҡларға һалырға маташа. Үҙенең теләгенә ирешеү маҡсатында һәр кем уйынсыҡты үҙенә тарта. Күп ваҡыт уйынсыҡты тартып алған бала, үҙе лә уның менән оҙаҡ уйнамай: ҡурсаҡты ташлап, икенсе уйынға әүерәп китә.

Йыш ҡына уйында балаларҙың күпселеге үҙ һүҙле һәм үҙҙәрен әүҙем тотҡан балалар иркенә буйһоноп китәләр. Мәҫәлән, Гүзәл ҡурсаҡты йырлай-йырлай бәүетеп йоҡларға һала. Уның уйнағанына ҡыҙығып ҡарап торған һәм үҙ һүҙен һүҙ итергә яратҡан Алһыу Гүзәлдең ҡурсағын тартып алырға тырыша: «Йоҡоһо туйҙы, хәҙер тышҡа уйнарға сыға!». Гүзәл өндәшмәй генә ҡурсаҡты Алһыуға бирә. Былдай осраҡта тәрбиәсе балаларҙы ҡурсаҡ менән бергәләп уйнарға өйрәтеү маҡсатында, уйынды икенсе йүнәлешкә бороп ебәрә ала: «Ҡурсаҡтың әсәһе икәү булғас, уға нисек һәйбәт. Алһыу, һин сумка алып, магазинға барып кил. Ҡурсаҡ уянғас, уны ашатырға кәрәк. Гүзәл, һин ҡурсаҡтың бүлмәһен йыйыштыр! Былдай ваҡытта ҡыҙҙарҙың берәүһенең иғтибарын икенсе ҡурсаҡҡа йәлеп итеү ҙә файҙалы була: «Алһыу, ә ҡурсаҡ Азаттың әсәһе ҡайҙа? Ул ниңә яңғыҙ ғына ултыра? Бар әле, уны уйнат!».

Бала ҙурая биргәс, үҙенең тиҫтере башҡарған уйын - хәрәкәттәргә оҡшатып уйнайһы һәм шул уҡ ролде башҡараһы килә. Был ваҡытта балалар араһында төрлө бәхәсле осраҡтар тыуа, үпкәләшеү, илашыу, тартҡылашыу күренештәре осрай. Шуға ла тәрбиәсенең балалар менән бергә уйнауы ошондай күңелһеҙ осраҡтарҙы алдан иҫкәртергә ярҙам итә һәм уйын аша балаларҙа бергәләп эш итә белеү, аралашыу, бер-береһе

тураһында хәстәрлек күрһәтеү, ярҙамлашыу кеүек сифаттар тәрбиәләүгә мөмкинселек бирә.

Шулай итеп, был йәштәге балаларҙы *бергәләп уйнарға өйрәтеү* күнекмәләрен формалаштырыу – иң төп бурыстарҙың береһе булып тора.

Кескәй йәштәге балаларға төрлө ҡоролмалар ҡороп уйнау ҙур ләззәт һәм шатлыҡ бирә. Баланы төҙөлмә материалдар менән уйнарға өйрәтеү кәрәк: уның уйнар өсөн кәрәкле күнекмәләре формалашҡан һәм уйынға ҡыҙыҡһыныуы булырға тейешле. Тик шул саҡта ғына бала матур итеп уйнай ала.

Тәрбиәсе балалар араһында ролдәрҙе бүлешергә, кәрәкле төҙөлөш материалдары һайларға ярҙамлаша. Әлбиттә, тәүге осоро балалар менән бергә ҡоролмалар ҡора. Һәр саҡ башҡарылған эшкә күмәкләп баһа бирәләр. Шулай итеп, был йәш балалары менән уйын ойошторғанда тәрбиәсенең *улар эргәһендә бергә булыуы* мотлаҡ тип һанала: айырым бер бала менән уйнарға, уйын барышында уйынсыҡтар, йәки уларҙы алмаштырған башҡа предметтар менән нисек эш итергә кәрәклеген күрһәтергә, башҡарылған хәрәкәттәрҙе тасуирлап һүҙ ярҙамында һүрәтләп аңлатырға тейеш. Уйындарҙа педагог үҙе төп ролде башҡара һәм ошо роль аша бөтә балаларҙы бергәләп уйнарға ылыҡтыра һәм өйрәтә.

Уйын йөкмәткеһенең үҫешенә балалар менән бергәләп төрлө уйынсыҡтар һәм уйын кәрәк-яраҡтары эшләү ярҙам итә. Балаларҙа был эштең башҡарылыу барышына ҡыҙыҡһыныу уятып, уларҙа ла шулай эшләп ҡарау теләге тыуҙырыу кәрәк. Мәҫәлән, театрға барыр өсөн билет, уны һатып алыр өсөн аҡса һ.б. эшләү. Йәки әүәләү дәрестәрендә «Магазин» уйыны өсөн төрлө йәшелсәләр, емеш-еләк, тәмле-татлы һ.б. эшләтеү – балаларға уйынды бирелеп һәм аңлы рәүештә уйнарға ярҙам итәсәк.

Сюжетлы-ролле уйындар балалар өсөн уңышлы һәм фәһемле булһын өсөн тейешле уйын кәрәк-яраҡтарын дөрөҫ һайлау мөһим, һәр төрлө уйын ораҡтары ҡороп, кескәйҙәрҙе яңы уйынсыҡтар менән

театрлаштырылған тамаша аша таныштырыу ҙа артабан уйын ойоштороу өсөн бик файҙалы була. Уйын барышында төрлө кәңәштәр, һорауҙар, иҫкәртмәләр биреү ҙә балаларға уйындың сюжетын ҡыҙыҡлы итеп төҙөргә ярҙам итә.

Балалар менән бергәләп уйын персонаждарына кейем-һалым элементтарын һайлау, уйында теге йәки был ролде башҡарыусы тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр биреү, уйындың темаһына ҡағылышлы һүрәттәр йәки иллюстрациялар буйынса айырым балалар менән әңгәмәләшеү, уйын барышында башҡарыла торған эш-хәрәкәттәрҙе үтәп күрһәтеү – быларҙың бөтәһе лә балаларҙың бергәләп, татыу һәм уйындың эстәлегенә төшөнөп уйнауына шарт булып тора.

Уйын барышында тәрбиәсе балаларҙың уйын шарттарынан тыш үҙаллылыҡ һәм төрлөсә ижадилыҡ күрһәтеп уйнауҙарына ҡаршы килергә тейеш түгел. Киреһенсә, балаларҙың тапҡырлыҡ, уйлап табыусанлыҡ күрһәтеүен, уйын сюжетына яңы персонаждар, төрлө эш-хәрәкәттәр өҫтәүҙәрен, уйын барышын икенсе йүнәлешкә бороп ебәреүҙәрен хупларға тейеш. Сөнки уйын ҡыҙыҡлы, фәһемле бала эшмәкәрлеге булараҡ, һәр бер кескәйҙең шәхси үҙенсәлектәрен, холоҡ-ҡылығын асырға һәм уны үҫтерергә, балаларҙы үҙ-ара күңелле һәм файҙалы итеп аралашырға өйрәтә.

Кескәй балалар ҡар, һыу, ҡом менән уйнарға яраталар. Уларҙың был үҙенсәлектәрен тәрбиәсе оҫта ҡуллана белергә тейеш. Бүлмәлә ҙур полиэтилен һауытҡа (табаҡҡа йәки тасҡа) һыу ҡойоп, йөҙөүсе уйынсыҡ ҡоштарҙы (өйрәк, ҡаҙ, аҡҡош) ебәреп, улар менән уйнарға өйрәтергә мөмкин: аҡҡош-әсәй балаларын йөҙөргә өйрәтә, нисек сума, ярға яҡын килмәй, төлкөнән ҡурҡа һ.б. Йәки ҡағыҙ кәмәләр эшләп, балалар араһында ярыш үткәрергә була: кемдең кәмәһе икенсе ярға беренсе булып йөҙөп етер.

Еүеш ҡом менән балалар бирелеп уйнайҙар. Тәрбиәсе төрлө ҡоролмалар төҙөү (ҡурсаҡ өйө, күпер, машинаға гараж һ.б.) алымдарын күрһәтә, аҙаҡ – төрлө уйынсыҡтар биреп (кеше, йәнлектәр фигуралары,

уйынсыҡ машиналар һ.б.), балаларҙың үҙҙәренә ошондай уҡ ҡоролмалар төҙөргә тәҡдим итә. Балалар төҙөп бөткәс, тәрбиәсе менән бергәләп уйнай башлайҙар.

Ҡар менән уйнау алдынан тәрбиәсе кескәйҙәрҙе уның үҙенсәлектәре менән таныштыра: ҡарҙы балалар бәләкәй көрәктәр менән бер урынға йыйып өйәләр, санаға тейәп тау эшләргә ҡар ташыйҙар. Тәрбиәсе үҙе балаларға ҡарҙан тау, машина, эскәмйә эшләп күрһәтә. Аҙаҡ уйынсыҡтар бирә (ҡышҡы кейемдәге ҡурсаҡтар һәм хайуандар, уйынсыҡ саналар, бәләкәй көрәктәр) һәм балаларға тағы ла ошондай тау эшләргә ҡуша – ҡурсаҡтар һәм йәнлектәр тауҙан санала шыуырға теләйҙәр бит. Бергәләп тау эшләп, уйынсыҡтарҙы уйнаталар. Һуңынан бергәләп тәрбиәсе һәм балалар «Ғаилә» уйынын уйнау өсөн ҡарҙан бүлмәләр һәм төрлө бүлмә йыһаздары эшләйҙәр.

## Уртансы төркөм

Дүрт-биш йәшлек кескәйҙәрҙең ижади рәүештә уйнауы уҡылған китаптар, телетапшырыуҙар һәм ололар һөйләүе нигеҙендә төрлө яңы темалар менән байый төшә: сәйәхәтселәр, диңгеҙ гиҙеүселәр, төҙөүселәр, почта хеҙмәткәрҙәре һәм хәрби һөнәр эйәләре эшмәкәрлегенә бағышланған уйындар балалар тормошонда күберәк урын ала. Уйындар эстәлеге лә тәрәнерәк, ҡыҙыҡлыраҡ була башлай. Балалар бергәләп эшләгәндә бер-береңә ярҙамлашыу кәрәклеген аңлай башлайҙар һәм уйын барышында ошо рәүештә эш итәләр.

Тәрбиәсенән был йәш балалары менән уйын эшмәкәрлеген ойошторғанда яңы йөкмәткеле уйындарға балаларҙың ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү һәм уларҙың үҙ-ара аралашыуында әхлаҡи ҡанундарҙы дөрөҫ үҙләштереүен күҙ уңында тотоу талап ителә.

Уртансы төркөмгә йөрөгән балалар үҙҙәренең бер-береһенә ҡарата булған ыңғай мөнәсәбәттәре нигеҙендә бәләкәй генә, алты-ете кешенән торған уйын төркөмсәләренә бүленәләр. Ләкин күп ваҡыт уйын ойошторғанда төрлө ҡаршылыҡтар килеп тыуа. Сөнки балаларҙың аң-белеменең киңәйеүе һәм уларҙы уйын барышында ҡулланыу өсөн

иптәштәренә еткереү теләге уйында төрлө мауыҡтырғыс ҡыҙыҡлы осраҡтар барлыҡҡа килтерә. Әммә уйнаусыларҙың бергәләп, бер-береһен тыңлап, уйын йөкмәткеһенә ярашлы тейешле эш-хәрәкәт башҡарыу һәләте кәрәкле кимәлдә үҫешмәгәнлектән, уйын ваҡытында йыш ҡына балалар араһында аңлашмаусанлыҡ, үпкәләү, асыуланыу, үсегеү кеүек күренештәр осрай. Кемдер берәү уйынды ойоштороу буйынса үҙенең уй-фекере һәм планы иң отошло тип һанай. Икенсе бала үҙенең ҡарашын тауыш йәки йоҙроҡ ярҙамында яҡларға тырыша. Үҙ-ара килешеп, бер-береһенең уй-фекеренә, кәңәшенә, теләгенә ҡолаҡ һалып уйнау – был йәш балалары өсөн үтә ауыр эш. Шуға ла күп осраҡта уйын һүнеп ҡала һәм балалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙең боҙолоуына килтерә.

Тәрбиәсегә бындай осраҡтар һирәк осраһын өсөн балаларҙы бер-береһенең тәҡдимдәренә иғтибарлы булырға һәм хөрмәт менән ҡарарға өйрәтеү кәрәк. Һәр тәҡдимдең һәм кәңәштең иң ҡыҙыҡлы өлөшөн һайлап алырға һәм уйында ҡуллана белергә өйрәтеү – балаларҙың холҡон үҙгәртеүҙә, башҡалар араһында үҙ-үҙен тота белеү ҡағиҙәләрен үҙләштереүҙә ярҙам итәсәк.

Ҡайһы ваҡыт бер үк ролде бер нисә бала уйнарға теләй. Был осраҡта ярҙамға тәрбиәсе килә. Ул һәр баланың теләген мөмкин тиклем тормошҡа ашырырға тырышыу юлын эҙләй. Мәҫәлән, «Дауахана» уйынын уйнайҙар икән. Тәүҙә бер генә табип булһа, уйын йөкмәткеһенең үҫеше һәм балаларҙың уйынға булған ҡыҙыҡһыныуы артыу арҡаһында, тәрбиәсе уйында ролдәр башҡарыусылар һанын арттыра: бер бала – балалар табибы, икенсеһе – теш табибы, өсөнсөһө – йәнлектәр дауалаусы табип ролен башҡара.

Тәрбиәсе уйын эстәлегенең үҫешенә, ҡатмарланыуына, уйында ҡатнашыусылар башҡарған образдарҙың тәрән фекерле, тормошсан, йор һүҙле булыуына ла иғтибар итә. Ошо маҡсатта ул темаға бәйле фәһемле хикәйәләр уҡый йәки сюжетлы һүрәттәр күрһәтеп һөйләй. Был алым балаларға уйынды ҡатмарландырып, уны мәғәнәле һәм йөкмәткеле итеп ойоштороу мөмкинлеген бирә. Мәҫәлән, тәрбиәсе дауаханала төрлө

кабинеттар булыуы, унда төрлө табиптар эшләүе тураһында һөйләй. Һәр табип тик үҙ һөнәренә генә хас булған һауыҡтырыуы һәм дауалау эш төрҙәрен башҡара һәм ҡоралдар ҡуллана. Тәрбиәсе ошоларҙы аңлатып, һүрәттәр йәки йәнһүрәт аша табиптар (рентген табибы, күҙ табибы, теш табибы, һ.б.) башҡарған эш-хәрәкәттәрҙе күрһәтеп, аңлатһа – уйын бөтөнләй икенсе төҫ аласаҡ.

Бишенсе йәшкә сыҡҡан балаларҙың яратҡан ролдәре була. Уйын ваҡытында теге йәки был үҙе яратҡан ролде башҡарып, бала уның тураһындағы белемдәрен барлай, киңәйтә. Геройҙың уй-фекере, үҙ-үҙен тотоуы, башҡарған эш-хәрәкәте аша бала үҙенең шәхси холоҡ сифаттарын, башҡаларға булған мөнәсәбәттәрен яҡшы яҡҡа үҫтерә, үҙ-ара аралаша белеү һәләтен күрһәтә.

Уйын эшмәкәрлегенең үҫешенә һәм артабан ниндәй йүнәлештә дауам итә алыуына, балаларҙың тағы ла ниндәй эш-хәрәкәт башҡарып уйнауына тәрбиәсенең балалар менән үткәргән әңгәмәләре, персонаждар образын тулыраҡ итеп асыҡлауы ла этәргес көс булып тора. Тәрбиәсе һәр балаға айырым йомоштар ҡуша ала: өйҙә теге йәки был һөнәр эйәһе тураһында ата-әсәләр менән берлектә һүрәттәр, шиғырҙар, хикәйәләр эҙләү, йомаҡтар, мәҡәлдәр табыу, әҙәби әҫәр өлгөләре уҡыу, әңгәмәләшеү һ.б. – балаларҙы уйынды матур итеп ҡорорға һәм уйнарға өйрәтә.

Уйын ваҡытында *тәрбиәсе үҙе һәр саҡ төп ролде башҡара*, йәки балалар уйнағанды күҙәтә һәм кәрәкле ваҡытта ярҙамға килә. Кескәйҙәрҙең уйын барышында төрлө уйлап-табыуҙарын хупларға, зирәклекте, отҡорлоҡто, үҙаллыҡты, бер-береһенә ярҙам итә белеүҙе, тиҫтерҙәренең күңелен күрә белеү һәләтен маҡтап, телгә алып тора.

Балалар күп ваҡыт әҙер уйынсыҡтар менән уйнап ҡәнәғәтләнмәйҙәр. Йыш ҡына уларҙың үҙ-аллы уйын кәрәк-яраҡтары эшләү теләге тыуа. Үҙ ҡулдары менән эшләнгән уйынсыҡ бала өсөн ҡыҙыҡлыраҡ була һәм уйын барышына ыңғай тәъҫир итә.

## Өлкән һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәре

Был йәш төркөмдәрендәге балаларҙың ололар хеҙмәтенә һәм уның һөҙөмтәһенә ҡыҙыҡһыныуы арта төшә. Балаларҙы ололарҙың хеҙмәттәге тырышлығы, күрһәткән батырлығы, ҡыйыулығы һоҡландыра, уларға оҡшау, улар кеүек булыу теләге уята. Шуға ла балалар батырлыҡ, ҡыйыулыҡ талап ителгән сюжетлы уйындар менән мауығалар, ролдәрҙе ҙур теләк менән, отҡорлоҡ, зирәклек күрһәтеп башҡаралар. Матур, сағыу материалдар менән уйнарға, төрлө семәрле ҡоролмалар төҙөргә, уларҙы ғәҙәти булмаған биҙәктәр менән биҙәргә тырышалар. Уйын йөкмәткеһен тәрәнәйтеп һәм ҡыҙыҡлы итеп уйнар өсөн улар үҙҙәренең белемдәрен, хеҙмәт оҫталығын ҡуллана башлайҙар. Дәррәү һәм элекке кеүек ыҙғышмай ғына уйындың темаһын һайлай алалар, ролдәрҙе һәр кемдең үҙенсәлекле һәләтлелегенә ҡарап бүлешәләр.

Был йәш осоронда йөкмәткеһе, ысынбарлыҡты һүрәтләү саралары һәм ойоштороу ысулдары буйынса уйындар күпкә ҡатмарлана төшәләр. Уйындар оҙаҡ ваҡыт эсендә, йөкмәткенең эстәлеге әкренләп асыла һәм уйын барышында күпкә ҡатмарлана барған шарттарҙа уйналалар. Балалар уйында үҙҙәренең тәрән хис-тойғоларын, кисерештәрен күрһәтергә һәләтле булалар.

Уйындар темаһы көндәлек тормоштан сығып билдәләнә: «Космонавтар», «Цирк», «Ҡотҡарыусылар», «Сәйәхәтселәр» һәм башҡа әкиәт һәм телетапшырыуҙар эстәлегенә бәйле була. Шулай итеп, оҙаҡ ваҡыт эсендә уйналған һәм балаларҙың күңеленә хуш килгән сюжетлы уйындар уларҙы төрлө яҡлап тәрбиәләү мөмкинселеген бирә һәм коллектив тормошта йәшәй, аралаша белеү күнекмәләрен формалаштыра.

Бала ҡайһы ваҡыт шул тиклем бирелеп, онотолоп уйнай, хатта үҙенең роленән уйын бөткәс тә сыға алмай. Уның был торошон әхлаҡи ҡағиҙәләр үҙләштерергә һәм кешеләр менән аралашырға өйрәткәндә, үҙаллылыҡ, ныҡышмалыҡ, һәр эшкә ижади ҡараш тәрбиәләгәндә уңышлы ҡулланырға мөмкин.

Ижади уйналған сюжетлы-ролле уйындар баланың аң-белем кимәлен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә, тормоштағы ваҡиға-күренештәр араһындағы бәйләнештәргә төшөнөргә ярҙам итә. Балала үҙаллылыҡ, зирәклек, уйлап табыусанлыҡ, тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ, үҙ фекерен эше менән дәлилләү, башҡалар һүҙенә лә ҡолаҡ һала белеү кеүек үтә мөһим сифаттар тәрбиәләнә.

Балаларҙың уйынын күҙәткәндә, ололарға уларға нисек уйнау юлын күрһәтергә тырышыу кәрәкмәй. Дәрестәр ваҡытында кескәйҙәргә уйын барышында кәрәк булған мәғлүмәттәр биреү файҙалы була, бигерәк тә тирә-йүн менән таныштырыу дәрестәрендә. Балалар менән бергәләп һүрәттәр йыйыу, баҫма-өҫтәл уйындары уйнау, телетапшырыуҙар ҡарау һәм улар тураһында әңгәмәләшеү, балсыҡ, ҡағыҙ, пластилин, елем ҡулланып, ҡулдан яһалған төрлө уйын кәрәк-яраҡтары эшләп уйнау балаларҙың уйынын йәнләндерә һәм ҡыҙыҡлы итә.

Был йәштәге балаларҙың сюжетлы-ролле *уйындар уйнағанда күмәкләп, бергәләп уйнай белеүе* – төп шарттарҙың береһе булып тора. Уйын барышында кәңәшләшеп, бер-береһенә ярҙамлашып, төп маҡсатҡа ирешеү юлдарын бергәләп сисеү тора.

Шулай уҡ балалар бергәләп уйындың темаһын билдәләргә, уйын эстәлеген асыу өсөн тейешле уйын кәрәк-яраҡтары һайларға, һәр кемдең теләгенән һәм мөмкинселегенән сығып ролдәр бүлешергә, уйын ҡағиҙәләрен билдәләп, уларҙы теүәл үтәргә өйрәнгән булырға тейештәр.

Тәрбиәсенең оҙаҡ ваҡыт уйналынған сюжетлы-ролле уйындарҙа роле үҙгәрә. Тәүҙә ул үҙенә төп ролде алһа, аҙаҡ әкренләп ярҙамсы ролдәрҙе башҡара башлай. Сөнки балалар үҙаллы уйынды ойоштора ала башлайҙар, ыҙғышһыҙ ролдәрҙе бүлә, кәрәкле предметтарҙы ҡулланып, уйын сюжетына ярашлы эш-хәрәкәттәр үтәй алалар. Тәрбиәсегә улар уйынын күҙәтеп, кәрәкле урында дәрестә алған мәғлүмәттәрҙе иҫтәренә төшөрөп, кәңәш биреп, ҡыйыуһыҙ балаларҙы дәртләндереп тороу ҙа етә. Уйында *тәрбиәсе балаларға партнер, яҡын дуҫ* булып ҡала.

Уҡыу йылы эсендә балалар алты-ете сюжетлы-ролле уйындарҙы оҙаҡ ваҡыт уйнай алалар: «Төҙөүселәр», «Китапхана», «Антарктида», «Сәйәхәт», «Сүллектә авторалли» һ.б.

Балаларҙың оҙаҡ итеп уйынға бирелеп уйнауҙарына, уйын ваҡытындағы әүҙемлегенә, үҙаллығына уйын алдынан үткәрелгән әңгәмәләр ярҙам итә. Унда уйындың эстәлеген нисек асырға, маҡсатына нисек ирешергә, уйын аҙағынан һуң уның һөҙөмтәһенә нисек баһа бирергә, ниндәй ҡоролмалар, уйын кәрәк-яраҡтары ҡулланыу тураһында һүҙ алып барыла.

Был төркөм балалары менән уйын ваҡытында төрлө тәбиғи материалдар ҡулланыла: ағас ботаҡтары, тубырсыҡтар, ҡом, балсыҡ, төрлө ватылмай торған һауыт-һаба һ.б. Ҙур ҡоролмалар өсөн йәшник, таҡта, фанера, картон һ.б. кәрәк була.

Ҡарҙан кирбестәр эшләп, ҙур ҡоролмалар төҙөргә мөмкин. Балалар сана менән йәки аяҡ өҫтө тороп шыуыр өсөн ҡарҙан тау, һырғалаҡ эшләйҙәр, уға һыу һибеп, боҙ юл яһайҙар. Шулай уҡ ҡарҙан төрлө әкиәт персонаждары һындарын эшләп уйнау – балаларҙың фантазияһын, ижади һәләтен үҫтерә. Ҡыш көнө уйын майҙансығында әкиәттәр йәки телетапшырыуҙар эстәлегенә бағышлап эшләнгән ҡар ҡоролмалар төҙөп уйнау - балаларға бигерәк тә ҡыҙыҡлы һәм күңелле була.

## Дидактик уйын

Ҡағиҙәле уйындар уйын аша берәй нәмәгә уҡытыу, өйрәтеү маҡсатын ҡуя. Улар дидактик уйындарға һәм хәрәкәтле уйындарға бүленәләр.

Дидактик уйындар – *өйрәтеүсе уйындар* булып һаналалар. Уларҙың төп маҡсаты булып өйрәнелгән күнекмәләрҙе, эш-хәрәкәттәрҙе нығытыу, зиһен, хәтер үҫтереү тора.

Һәр дидактик уйындың *маҡсаты, уйын хәрәкәте һәм уйын ҡағиҙәләре була.*

Дидактик уйын – уҡытыу ысулы һәм шулай уҡ үҙ-аллы уйын эшмәкәрлеге лә тип һанала ала. Уҡытыу ысулы булараҡ, улар бөтә төр дәрестәрҙә лә ҡулланылалар. Тирә-йүн менән таныштырыу, ябай математик төшөнсәләр формалаштырыу, телмәр үҫтереү, музыкаль тәрбиә биреү дәрестәрендә дөйөмләштереү, сағыштырыу, баланың белем кимәлен билдәләү һәм өйрәнелгән материалдарҙы нығытыу маҡсатында улар әүҙем ҡулланылалар. Был осраҡта уйындың йөкмәткеһе һәм ҡағиҙәләре, уҡытыу һәм тәрбиәләү маҡсаттарынан сығып, тәрбиәсе тарафынан билдәләнә.

Үҙ-аллы уйын эшмәкәрлеге булараҡ дидактик уйындар дәрестән тыш ваҡытта ҡулланыла.

Тәрбиәсе дидактик уйындарҙы төрлөсә ойоштора ала: дәрестәрҙә дидактик уйынды нисек уйнарға, уйын ҡағиҙәләре һәм уйын барышында башҡарыласаҡ эш-хәрәкәттәр менән таныштырһа, дәрестән тыш ваҡытта ул үҙе уйында ҡатнашыусы булып йәки уйын ҡағиҙәләренең үтәлешен баһалаусы ролен башҡара. Шул уҡ ваҡытта кескәйҙәрҙең үҙ-ара мөнәсәббәттәрен ҡулайлай.

Ҡағиҙәле уйындарҙы ойоштороу эше өс этаптан тора: *уйынды алдан әҙерләү, уны ойоштороп балаларҙы уйнатыу, уйындың һөҙөмтәһен баһалау.*

Әҙерлек этабына түбәндәгеләр инә: баланың йәш кимәленә һәм уйынды уйнатыу ваҡытына ҡарап, (дәрестәме, әллә көн тәртибенең башҡа мәлендәме) уйынды һайлау; уйынды уйнатыу урынын билдәләү (төркөм бүлмәһендә, тышта төркөм майҙансығында, урамда саф һауала йөрөгәндә); уйнаусылар һанын билдәләү (бөтә төркөм балалары менән, өс-дүрт баланан торған төркөмсә менән, айырым бер бала менән); уйынды үткәреү өсөн кәрәкле дидактик материалдар (уйынсыҡтар, уйын кәрәк-яраҡтары, тәбиғи материалдар) һайлау.

Тәрбиәсе алдан уйындың эстәлеген, үткәрелеү тәртибен, уйын ҡағиҙәләрен өйрәнергә һәм уйын менән етәкселек итеүҙә үҙенең ролен билдәләргә тейеш. Уйындың ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булып үтеүенә

ололарҙың әҙерлеге генә түгел, шулай уҡ балаларҙың да уйнау өсөн кәрәкле кимәлдә белемдәре, теге йәки был күренештәр, тормоштағы хәл-ваҡиғалар тураһында төшөнсәләре формалашҡан булырға тейешле.

Тәрбиәсе һәр ваҡыт уйын алдынан балаларҙы уның эстәлеге, уйын кәрәк-яраҡтары менән таныштыра. Шунан уйын ҡағиҙәләрен һәм уйнау хәрәкәттәрен асыҡ һәм аңлайышлы итеп аңлатып, күрһәтеп бирә. Дидактик уйында мотлаҡ рәүештә уйын ҡағиҙәләре һәм уйнау хәрәкәттәре бирелә. Әгәр ҙә был шарттарҙың берәрһе үтәлмәһә, был осраҡта дидактик уйын дидактик күнекмәгә әүерелә. Шуға ла уйын күнекмәләрен аңлатҡас, уларҙың үтәлеш тәртибен, башҡарылыу хәрәкәтен күрһәтеп, балалар менән бергәләп яңынан ҡабатлап үтәп ҡарау мөһим булып тора.

Тәрбиәсенең уйында ҡатнашыу дәрәжәһе балаларҙың йәш кимәленә, уларҙың уйнау әҙерлегенә һәм һәләтлелегенә, дидактик уйын маҡсаттарының һәм ҡағиҙәләрҙең ҡатмарлылығына бәйле. Педагог уйында ҡатнашып, балаларҙың башҡарған эш-хәрәкәттәрен күҙәтә, кәрәк ваҡытта төҙәтмәләр индерә, аңлата, төшөндөрә, күрһәтә һәм бергәләп башҡара.

Уйындың һөҙөмтәһен баһалау – уйын ойошторғанда иң мөһим саралаҙың береһе. Тәрбиәсе кем ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ үтәп уйнаған, әүҙемлек һәм зирәклек күрһәткән, тиҫтерҙәре менән матур мөнәсәбәттәр һаҡлап уйнаған – шул балаларҙы маҡтап телгә ала. Уйынға баһа биреү – уны тағы ла йәнлерәк, ҡыҙыҡлыраҡ, күңеллерәк, бөтә балаларҙы ла йәлеп итеп ойоштороу юлдарын табыу маҡсатында үткәрелә: уйын барышында ҡуйылған маҡсаттарҙың ҡайһыныһы үтәлде, ниндәй етешһеҙлектәр һәм ҡаҙаныштар булды, ни өсөн шулай килеп сыҡты һ. б. - тәрбиәсе ошоларҙың бөтәһен дә балалар менән ентекләп тикшерергә тейеш. Быңдай сара уйынды алдан ныҡлап әҙерләүгә ярҙам итә, кескәйҙәрҙең үҙ-үҙен тота белеүен нығыта һәм уларҙың шәхси үҙенсәлектәрен яҡшы яҡтан үҫтерергә һәм киләсәктә уйын барышында быларҙың бөтәһен дә дөрөҫ ҡулланырға өйрәтә.

## Беренсе һәм икенсе кескәйҙәр төркөмө

## (2 йәштән 4 –кә тиклем)

Был йәштәге кескәйҙәр менән дидактик уйындар ойошторғанда, тәрбиәсе уларҙың үҙаллылыҡҡа (Мин үҙем!) ынтылыу үҙенсәлектәрен иҫтә тотоп эш итергә тейеш. Ләкин балаларҙың иғтибары тиҙ тарҡалыусан булыу сәбәпле, дидактик уйындар ойошторғанда, уларҙың иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында күберәк ҡыҙыҡлы уйын алымдары, сағыу уйынсыҡтар һәм уйын кәрәк-яраҡтары ҡулланыу тәҡдим ителә. Шуға тәрбиәсе өсөн төп бурыс булып баланың аң-белем кимәлен үҫтереүҙе әүҙем эш-хәрәкәт башҡарыу аша ойоштора белеү тора. Бала уйын ваҡытында күңелен биреп уйнап һәм төрлө хәрәкәттәр башҡарып үҙенең донъяны танып-белеү, төшөнөү даирәһен киңәйтә алырға тейеш.

Уйын алдынан төрлө мөғжизәле осраҡтар ойоштороп, уйынға балаларҙың иғтибарын йәлеп итергә кәрәк: улар күрмәгән уйынсыҡты серле ҡумтанан сығарыу, кемдеңдер ишек ҡағыуы, өҫтәл артынан ниндәйҙер ят тауыш килеүе һ. б. ошоноң кеүек алымдар баланы уйынға йәлеп итергә ярҙам итә. Шулай итеп, был алымдар балаларға таныш уйындарҙы ҡыҙыҡлыраҡ итеп уйнарға дәртләндерә.

Уйындарҙы төрлөсә ҡабатлап уйнатыу һәм һәр саҡ уның эстәлегенә ниндәйҙер яңылыҡ, мөғжизәлек индереп уны ҡатмарландырыу – балаларҙың зирәклеген, сослоғон, үҙаллығын, ҡыҙыҡһыныуын үҫтерә.

Дүртенсе йәшкә сыҡҡан балалар тирә-йүнде үҙҙәренең һиҙеп-тойоуы аша өйрәнәләр. Тәрбиәсе дидактик уйын өсөн кәрәкле предметтарҙы балалар һәрмәп, һыйпап, йомарлап, тәгәрәтеп, һикертеп, туҡылдатып һ.б. ҡарарлыҡ һәм уйнарлыҡ итеп һайларға тейеш.

Уйын уңышлы үтһен өсөн, педагог балаларҙы уйында ҡулланылған предметтар һәм уларҙың сифаттары менән алдан таныштыра. Уйын барышында шиғыр ҡулланыла икән, тәрбиәсе уны алдан ятлай. Уйнап бөткәс, уйынға баһа биргәндә, тик яҡшы һүҙҙәр әйтелергә тейеш: «Бергәләп күңелле итеп уйнаныҡ, шуны йәки быны дөрөҫ һәм тиҙ башҡарырға өйрәндек, уйынсыҡтарҙы урынына йыйҙыҡ,

матур итеп теҙеп ҡуйҙыҡ. Бигерәк тә Алһыу менән Ғаяз тырыш булдылар бөгөн. Иртәгә теге йәки был (уйындың атамаһын әйтеп) уйынды уйнарбыҙ, уйын өсөн нимәләр кәрәк була, күрһәтеп, әйтеп сығайыҡ әле».

Был алым балаларҙа уйынға ҡыҙыҡһыныу уята һәм унда ҡатнашыу теләге тыуҙыра.

## Уртансы төркөм

Дүрт-биш йәшлек балаларҙың иғтибары нығына төшә, уларҙың ҡарап, ишетеп, һиҙеп-тойоп хәтерҙә ҡалдырыу һәләте үҫешә. Балалар ҡатмарлы формалағы предметтарҙы айыра ала башлайҙар. Уларҙың һүҙ байлығы арта, фекерләү ҡеүәһе үҫешә. Предметтарҙы тышҡы үҙенсәлектәре аша ғына түгел, ә сифаты, тәғәйенләнеше буйынса төркөмләй белә башлайҙар. Ябай ғына күренештәрҙең бер-береһе менән бәйле икәнлегенә төшөнә башлайҙар.

Балаларҙың ошондай йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, тәрбиәсе предметтарҙың үҙенсәлектәре һәм уларҙың ҡулланышы тураһындағы белемдәрен нығытыуға бәйле булған дидактик уйындар һайлай.

Кескәйҙәр төркөмөндәге кеүек үк бер-береһенең эсенә һыйған ҡатлы ағас уйынсыҡтар, пирамидалар, манаралар һәм шулай уҡ шарҙар, лотолар, ишле һәм өлөштәргә бүленеп ҡырҡылған һүрәттәр, туҡыма ҡорамалар һәм башҡа һүҙлек үҫтереүгә бәйле дидактик материалдар ҡулланыла.

Дидактик уйын менән етәкселек итеү уртансы төркөмдә үҙгәрә төшә: тәрбиәсе үҙе уйында әүҙем ҡатнашһа ла, йыш ҡына уйынды алып барыусы балалар араһынан тәғәйенләнә. Уйын ҡағиҙәләре уйын алдынан аңлатыла. Мәҫәлән, «Ошондай уҡ материалдан эшләнгән предметты тап!» дидактик уйынында тәрбиәсе балалар менән ағастан, металдан, пластмассанан, резинанан эшләнгән предметтарҙы ҡарап сыға, уйын алдынан ҡағиҙәләрҙе аңлата: предметтарҙы бөтә бүлмә эсенән, йәки йоҡо бүлмәһенән эҙләргә. Һәр бала табылған предметты кәрәкле һауытҡа һалырға тейеш: пластмассанан эшләнгән предметты – пластмасса табаҡҡа, ағас предметты – ағас йәшниккә, резина предметтарҙы – резина

тәгәрмәс эсенә, металдан эшләнгән предметтарҙы – тимер ҡумтаға. Аҙаҡ тәрбиәсе предметтарҙы алып, балаларға күрһәтеп, уларға һорау биреп, белешә: «Был нимә?». Балалар: «Был кубик». Тәрбиәсе: «Ул нимәнән эшләнгән? Уны ҡайҙа һалабыҙ?». Балалар: «Кубик ағастан эшләнгән, уны ағас йәшниккә һалабыҙ», - тип яуапларға тейештәр. Ошо рәүешле һәр төр предметтың ниндәй материалдан эшләнгәнлеген һәм уны ниндәй һауытҡа һалырға кәрәклеген билдәләп сығалар. Шулай итеп, тәрбиәсе тәүҙә балаларҙың уйын ҡағиҙәһен нисек үҙләштереүен асыҡлай. Уйынды артабан үткәргәндә, балалар араһынан кемдер берәү ҡағиҙәләр үтәлешен күҙәтә ала. Әгәр бала предметтың нимәнән эшләнгәнен билдәләүҙә яңылыша икән, уны күмәкләп төҙәтәләр һәм дөрөҫ башҡарырға ярҙам итәләр.

Уйын аҙағында балаларҙың ҡаҙанған уңыштарына ыңғай баһа биреү кәрәк. Уйын барышында һәр баланың ниндәйҙер үҙенә генә хас уңышы була: кемдер уйын хәрәкәттәрен тиҙерәк башҡара йәки теүәл, сифатлы итеп үтәй, икенсе бала башҡалар менән уртаҡ тел таба, килешә белә, кемгәлер кәрәкле ваҡытта ярҙам ҡулы һуҙған һ.б.

Уйынды баһалау тәрбиәсегә уны ҡатмарлаштырырға, йәки уйын ҡағиҙәләрен үҙгәртергә ярҙам итә. Мәҫәлән, билдәле ваҡыт эсендә кем күберәк предметтар йыйыр. Йәки - икенсе төр материалдар ҡулланып, уйнауҙы ойоштороу.

Уртансы төркөмдә йыш ҡына һүҙле дидактик уйындар үткәрелә. Улар телмәр үҫтереү маҡсатында ғына ҡулланылмай, күберәк баланың аң-белем кимәлен киңәйтеүгә, уның зиһенен, фекерләүен үҫтереүгә йүнәлтелгән була. Мәҫәлән, «Азатҡа аяҡ кейеме магазинында нимә һатып алдылар?» (ботинка, итек, бейма, сандали һ.б.)

Бишенсе йәшкә сыҡҡан балалар менән иғтибарлылыҡ үҫтереүгә бағышланған уйындар үткәреү файҙалы була: «Осто-осто», «Был ҡайһы ваҡыт?», «Иртәнме-кисме?» һ.б.

## Өлкән һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәре

Был төркөм балалары менән уйындар ойошторғанда тәрбиәсе уларҙың ҡыҙыҡһыныусанлығын, күҙәтеүсәнлеген, һәр яңы, сағыу әйбергә иғтибарлыҡ күрһәтеүсәнлеген иҫтә тоторға тейеш. Бала йомаҡты үҙе сисергә тырыша, теге йәки был ваҡиғаға үҙ ҡарашын белдерергә, уйын маҡсатын үҙенсә хәл итергә көс һала. Белем кимәле артыу менән аҡыл-зиһен талап ителгән эштең эстәлеге, башҡарылыу ысулдары ла үҙгәрә, үҫешә төшә. Шуның өсөн дә, уйын һайлағанда уның ҡағиҙәләренә һәм башҡарыу ысулдарына ҙур иғтибар бирелә. Балалар зирәклек, отҡорлоҡ, ныҡышмалылыҡ, түҙемлек, сабырлыҡ күрһәтә алырлыҡ һәм уйындан шатлыҡ, күңел ҡыуанысы табырлыҡ дидактик уйындар тәҡдим итеү – балалар үҫеше өсөн үтә файҙалы була.

Уйын кәрәк-яраҡтарының тышҡы яҡтан бер-береһенә оҡшаш булһалар ҙа, ҡулланышы һәм икенсе башҡа сифаттары менән бер-береһенән айырылып тороуы балаларҙың уйланыуын, төрлө сағыштырыуҙар, дөйөмләштереүҙәр ҡулланыуын, абстракт фекерләүен талап итә.

Уйында балаларҙың бер-береһе менән ярышып уйнауы ҙур урын ала. Шуға ла балаларға уйын һайлағанда һәм уның маҡсатына ирешеү юлдарын эҙләгәндә кескәйҙәргә үҙаллылыҡ һәм тапҡырлыҡ күрһәтеү мөмкинселеген биреү кәрәк.

Уйын ойоштороуҙа тәрбиәсенең роле үҙгәрә: ул балаларға аңлайышлы һәм тәьҫоратлы итеп уйындың йөкмәткеһен, ҡағиҙәләрен һәм башҡарыласаҡ эш-хәрәкәттәрҙе аңлата. Уларҙы балалар нисек төшөнгәнен асыҡлай һәм улар менән бергә уйнай. Балалар ныҡлап уйнай башлағас, уларға үҙаллы уйнарға тәҡдим итә. Үҙе уйындың барышын ситтән күҙәтә, кәрәк саҡта һүҙ ярҙамы менән уйын барышын төҙәтеп тора, бәхәсле осраҡтарҙа судья ролен үтәй.

Күп осраҡта тәрбиәсенең уйында ошондай әүҙем ҡатнашыуы талап ителмәй. Өҫтәл-баҫма уйындарында балаларға уйын ҡағиҙәләрен аңлатып төшөндөрөү ҙә етә. Өлкән төркөмдәрҙә уйын ҡағиҙәләре

ҡатмарлы була башлай, шуға тәрбиәсе уларҙы тәүҙә үҙе өйрәнеп, үтәп ҡарарға бурыслы.

Уйынды бергәләп, ойошҡан рәүештә тамамлау – уны икенсе көндә лә әүҙем дауам итеүҙең нигеҙе булып тора. Әгәр тәрбиәсе еңеүселәрҙе ниндәйҙер ысул менән дәртләндерһә, йәки фантиктар аша уйынды икенсе көн кем беренсе булып башлаясағын билдәләһә, йәки уйындың икенсерәк тәртиптә уйналасағы тураһында алдан хәбәр итһә – балаларҙа уйынға ҡарата ҡыҙыҡһыныу һүнмәйәсәк, уны тағы ла уйнау теләге һаҡланасаҡ.

Уйын аҙағында бөтә балаларға ла яҡшы баһа биреү кәрәк: ул кемгәлер етеҙерәк, ҡыйыуыраҡ булырға, кемгәлер үҙ-үҙен тота белеүҙә сама һәм әҙәп һаҡларға, кемгәлер теге йәки был эште аныҡ һәм дөрөҫ үтәргә ҡеүәт бирәсәк.

*Тәрбиәсе үҙе өсөн түбәндәгеләрҙе билдәләй:*

- уйын дөрөҫ һайланғанмы, юҡмы;
- уйнар өсөн балаларҙың белем кимәле етерлек булдымы, юҡмы;
- уйынды ойоштороғанда етешһеҙлектәр булдымы, юҡмы;
- балаларҙың бөтәһе лә әүҙемлек, үҙаллылыҡ күрһәтә алдымы, юҡмы;
- уйын ваҡытында ниндәй әхлаҡи сифаттар үҫтереү өсөн шарттар булды, улар ҡулланылдымы, юҡмы;
- балалар бер-береһенә ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә булдылар, аралашыу өсөн яҡшы шарттар булдымы, юҡмы;
- балаларҙа яҡшы сифаттар тәрбиәләү өсөн ниндәй алымдар, ысулдар ҡулланылды? Уларҙың һөҙөмтәһе булдымы, юҡмы.

Шулай итеп, өлкән төркөмдәрҙә дидактик уйындар менән етәкселек итеү тәрбиәсенән ҙур әҙерлек эшен үткәреүҙе һәм методик яҡтан оҫталыҡты талап итә.

Етенсе йәшкә сыҡҡан бала предметтарҙың һәм хәл-ваҡиғаларҙың дөйөм сифаттарын, шулай уҡ уларҙың айырым үҙенсәлектәрен билдәләй һәм айыра, улар тураһында үҙенең уй-фекерен һөйләп бирә ала. Шуға ла был төркөм балалары менән бәйләнешле һәм эҙмә-эҙлекле аңлатыу талап

ителгән дидактик уйындар ойоштторола. Был уйындар һандар тураһындағы төшөнсәләрҙе нығытырға, балаларҙы өндәрҙе ишетә, айыра белергә, иғтибарлы, һиҙгер, ныҡышмалы булырға өйрәтә.

Уйынды күп осраҡта балаларҙың берәрһенә алып барырға тәҡдим ителә. Уйынды һайлауҙа, ойоштороуҙа, үткәреү урынын һәм уйнаусыларҙы билдәләүҙә балаларға үҙаллылыҡ бирелә. Тәрбиәсе кәңәшсе һәм судья ролен үтәй.

Уйынға баһа биргәндә, тәрбиәсе иң беренсенән уйын барышында балаларҙың үҙ-үҙен тота белеүҙәренә, бер-береһенә ярҙам ҡулы һуҙа һәм иптәштәрен тыңлай белеүҙәренә, үҙ уңышы менән артыҡ маһайып, башҡаларҙы ситләтмәүҙәренә иғтибар итә. Сөнки киләсәктә мәктәптә был сифаттар иң мөһим тип һаналалар.

Өҫтәл уйындарының байтағын тәрбиәсе балалар менән бергәләп әҙерләй. Был алым балаларҙа эшкә һөйөү, башлаған эште аҙағына еткерә белеү, үҙ эшенә ҡарата яуапсанлыҡ тәрбиәләй. Һәр уйын ҡыҙыҡлы, бала күңеленә ятышлы булырға тейеш. Шуға мәрәкә һәм шаян һүҙ, уйын-көлкө ҡулланып эш итеү - балаларҙа күңел күтәренкелеге, бер-береһенә ҡарата яҡшы ҡараш, хөрмәт тәрбиәләргә ярҙам итә.

Дидактик уйындар балаларҙа үҙ-ара аралашыу ҡоралы һәм яҡшы мөнәсәбәттәр тәрбиәләү, шулай уҡ әхлаҡи һәм әҙәп ҡанундарына төшөндөрөү һәм улар менән бәйле булған ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ үтәү, нығытыу ысулы булараҡ та ҙур урын алып тора.

## Театрлаштырылған уйын

### Беренсе кескәйҙәр төркөмө (2 йәштән 3 –кә тиклем)

Был йәштәге кескәйҙәрҙе ғәҙәти булмаған бөтә нимә ҡыҙыҡһындыра: ҙур, сағыу, хәрәкәтләнеүсән уйынсыҡтар; тәбиғәттә осраған төрлө тауыштар (ямғыр, ел, буран тауышы, ҡоштар, йәнлектәр ҡысҡырыуы һ.б.). Баланың үҙ ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндереүгә булған ынтылышын тәрбиәсе файҙалы итеп ҡуллана ала: ул тирә-йүн тураһында төшөнсәләр биреп кенә ҡалмай, уларҙың сифаттарына, үҙенсәлектәренә

һ.б. төшөнөргә ярҙам итә. Ошо маҡсатта балаларҙы ауыҙ-тел ижады, нәфис әҙәбиәт үрнәктәре менән уйын аша таныштыра.

Билдәле рус психологы А.Н.Леонтьев әйтеүенсә, уйын баланың аралашыуҙағы, тирә-йүнде төшөнөүҙәге һәм танып-белеүҙәге, башҡалар араһында үҙ-үҙен иҫбатлауҙағы һәм үҙенең практик эшмәкәрлегендәге ихтыяждарын тормошҡа ашырыу асҡысы булып тора. Был йүнәлештә драматизациялы уйын үтә мөһим урын биләй.

Уйынсыҡтарҙы йәнле предметтарға хас булған сифаттар биреп уйнатыу балаларҙың күҙ алдына килтереү һәләтен үҫтерә, уларға ҡарата ыңғай мөнәсәбәт һәм улар тураһында ҡайғыртыу хистәре тәрбиәләй. Өҫтәл йәки ҡурсаҡ театры ярҙамында сәхнәләштереп уйналған диалогтар балаларҙың был образдарҙы ысынбарлыҡҡа тап килтереп күҙаллай белеүен үҫтерә.

Өс йәшлек баланың күҙ алдында бер-икенән артыҡ предмет булырға тейеш түгел. Шуның өсөн спектаклдә ҡатнашҡан ҡурсаҡтар бер-береһе менән оҙаҡ аралашмайҙар, улар киреһенсә, бер генә персонаж менән күберәк төрлө мөнәсәбәткә инәләр.

Ҡыҫҡа күләмле һәм ҡыҙыҡлы инсценировкалар балаларҙың хис-тойғоларын үҫтерергә, диалог ярҙамында уларҙың телмәрен байытырға ярҙам итә. Төп геройҙы бейетеү, йырлатыу тамашаны тағы ла йәнләндерә төшә.

*Балаларҙың театрлаштырылған уйынын ойошторғанда тәрбиәсе түбәндәгеләрҙе иҫтә тота:*

- тауыш ярҙамында теге йәки был осраҡта кәйеф торошон һәм хис-тойғоларҙы һүрәтләгәндә балалар һәм уйын персонаждары бер үк кисерештәрҙе күрһәтергә тейеш. Мәҫәлән, ҡуян көлә. Бала ла көлөп һөйләй. Ҡуян илай икән – ролде башҡарыусы бала ла илап күрһәтә;

- кескәйҙәрҙе сәхнәләштерелгән уйын ҡарағанда йәки уйын персонаждары ролен башҡарғанда үҙҙәренең хис-тойғоларын һүҙ ярҙамында аңлата белергә өйрәтеү кәрәк. Мәҫәлән, Асия – бесәй балаһы. Уға һыуыҡ. Ул нисек өшөй? Өшөгәс, ул нисек мыяулай? Күрһәтегеҙ!

- уйынды бергәләп уйнағанда тәрбиәсе әүҙем булырға, шул уҡ ваҡытта балаларҙың үҙаллылыҡ, әүҙемлек, тапҡырлыҡ, отҡорлоҡ күрһәтергә тырышыуын хупларға тейеш.

## Икенсе кескәйҙәр төркөмө

Был төркөм балалары әкренләп ролдәрҙең эстәлегенә төшөнөп уйнай башлайҙар: уйынсыҡтарҙы бер сюжет буйынса ҡуллана алалар, бергәләп үҙҙәренә оҡшаған сюжетлы-ролле уйындарҙы әүҙем генә уйнайҙар. Уйнау балалар өсөн шатлыҡ һәм ҡыуаныс сығанағы булып тора.

Уйын барышында тәрбиәсе сюжетты әкренләп ҡатмарландыра һәм балаларҙы ролдәр башҡарыу үҙенсәлектәренә өйрәтә. Бала үҙе башҡарған персонажды күҙ алдына килтереп, уға хас булған холоҡ сифаттарын асып уйнап күрһәтергә тырыша, төрлө хәрәкәттәр, һүҙҙәр уйлап таба. Был йәш балаларына театрлаштырылған уйындарҙа ҡулланыу өсөн башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады өлгөләре ҙур ярҙам итә. Бармаҡ уйындары, һикерткестәр, һөйҙөрткөстәр, һамаҡтар, әкиәттән өҙөктәр һ.б. уйындарҙы йәнләндерә һәм балаларҙың уйынға булған ҡыҙыҡһыныуын арттыра.

Кескәйҙәр менән бергәләп уйнауға өлкән төркөм балаларын йәлеп итеү отошло була. Өлкән балалар кескәйҙәргә ярҙам итәләр, һөнәрҙәрен күрһәтеп, үҙҙәренең оҫталыҡтарына баһа алалар. Бәләкәстәрҙә уларға оҡшатып уйнау теләге тыуа, бер-береһенә ярҙамлашып, татыу һәм күңелле итеп уйнау һәм аралашыу һәләте үҫешә.

Балаларҙың театрға булған ҡыҙыҡһыныуына һәм уларҙың төрлө тамашаларҙа ҡатнашыу теләген уятыуға ололарҙың сәхнәлә театрлаштырылған сығыш яһауҙары ыңғай тәьҫир итә. Был сығыштар кескәйҙәр өсөн өлгө булып торалар: улар сихри театр донъяһы менән яҡындан танышалар, сәхнәлә үҙ-үҙҙеңде тота белеү ҡағиҙәләрен үҙләштерәләр, ролдәрҙең башҡарылыу үҙенсәлектәренә төшөнәләр. Театр ҡарағанда үҙеңде башҡалар араһында нисек тоторға, ә театрҙан һуң тамашанан алған тәьҫораттар тураһында нисек әңгәмәләшә белергә өйрәнәләр. Был тәрбиәүи маҡсатта үткәрелгән әңгәмәләр балаларҙың

телмәрен үҫтереүгә, уларға үҙҙәренең хис-тойғоларын (шатланыу, ҡайғырыу, тулҡынланыу, үпкәләү, яратыу һ.б.) һүҙ ярҙамында һүрәтләргә өйрәтеү ҙә булып тора.

Ҡаралған тамаша күренештәрен, персонаж ҡыланыштарын һәм геройҙар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе балалар үҙҙәренең уйындарында ҡабатлайҙар: таныш персонаждар булып кейенәләр, улар кеүек һөйләшәләр, ҡыланалар. Балаларҙың был һәләтен байрамдарҙа, дәрестәрҙә йышыраҡ ҡулланыу кәрәк.

*Тәрбиәсегә театр уйынын ойошторғанда тәҡдим ителгән кәңәштәр:*

- шәхси өлгө аша йәки ниндәйҙер методик алым ярҙамында баланы уйындың сюжетын киңәйтеүгә, үҫтереүгә өндәү;

- тәрбиәсенән ролдәрҙе уйнаған саҡта уларҙы зауыҡлы, ҡыҙыҡлы, хәтерҙә ҡалырлыҡ итеп башҡарыу талап ителә;

- баланың тамаша персонаждарын һүрәтләгәндә тауыш, йөҙ хәрәкәттәре, төрлөсә ҡыланыу ярҙамында үҙаллылыҡ, зирәклек күрһәтеүен хуплау;

- кескәйҙәргә ижади рәүештә уйнау мөмкинлеген биреү.

## Уртансы төркөм

Дүрт-биш йәшлек бала тулыһынса ролгә инеп, уның аша персонаждың уй-фекерҙәрен, хис-тойғоларын, эш-хәрәкәттәрен күрһәтеп бирә ала. Бала уйын аша ололар донъяһы менән таныша. Шулай ҙа ул уйында үҙенсә йәшәй, үҙенсә ижад итә, төрлө тәжрибәләр үткәрә. Уйын барышында баланың аҡыл-зиһене менән бер рәттән уның хис-тойғоларының да үҫеше күҙәтелә.

Балалар үҙ уйындарында мөмкин тиклем күберәк ролдәрҙе уйнап ҡарарға тырышалар. Был күренеш бигерәк тә режиссер уйындарында асыҡ сағыла. Балалар уйында төрлө һөнәр эйәләре булып ысынбарлыҡтағы йәки үҙҙәре уйлап сығарған хәл-ваҡиғаларҙағы осраҡтарҙы төрлөсә үҙгәртеп уйнай башлайҙар. Уйын персонаждары ҡыйыу һәм батыр булалар, уларҙың башҡарған эштәре һоҡланғыс. Төрлө ҡурҡыныс хәл-ваҡиғаларҙы һәм ауырлыҡтарҙы еңеп сығыуға

балалар күп ваҡыт ҡатмарлы һәм ғәҙәти булмаған юлдар тәҡдим итәләр һәм уларҙы уңышлы ғына тормошҡа ашыралар. Тәрбиәсе балаларҙың уйындарға булған бындай ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында әкиәттәр, ҡыҙыҡлы һәм фәһемле әҙәби әҫәрҙәр уҡырға, йәнһүрәттәр күрһәтергә, теле-, радиотапшырыуҙар яҙмаһын тыңлатырға, күрһәтергә, йырлы-бейеүле уйындар өйрәтергә һәм улар ярҙамында балаларҙы уйынға ылыҡтырырға тейеш. Тәрбиәсе кескәйҙәрҙең аң-белем даирәһен киңәйтеү маҡсатында улар менән экскурсиялар ойоштора, төрлө һөнәр эйәләре менән осраштыра, уларҙың эштәрен күҙәтеү өсөн шарттар булдыра. Күп ваҡыт әҙәби әҫәрҙәр уҡығанда, ундағы айырым күренештәрҙе балалар менән бергә уйнап ҡарау бигерәк тә отошло була. Аҙаҡ балалар был уйын өлөштәрен үҙ-ара уйнағанда ҡабатлап башҡара алалар.

Уйын-драматизация процессында һәр баланың үҙенә генә хас булған холоҡ үҙенсәлектәре ныҒыраҡ асыла. Балалар уйын барышында күберәк ролдәрҙең башҡарылыу сифатына иғтибар итә башлайҙар. Шуға ла тәрбиәсе балаларға үҙ теләктәре менән ролдәрҙе һайлау мөмкинселеген бирә. Балалар бер-береһенең ролдәрен алмаштырып, йәки уйындың сюжетын үҙ теләктәре менән үҙгәртеп, уны артабан икенсе төрлө итеп уйнай алалар. Уйын кәрәк-яраҡтарын үҙҙәренең теләгенсә уйлап сығарырға һәм эшләргә бик теләп ҡатнашалар.

Был йәш балалары өсөн өлкәндәр сәхнәләштереп күрһәткән театр, йәки улар менән бергәләп сәхнәлә уйнау бик мөһим була. Үҙҙәренең тәрбиәсеһен, йәки ата-әсәһен артист ролендә күреү - улар өсөн ҙур шатлыҡлы һәм ҡыуаныслы ваҡиға булып тора. Балалар тамаша тураһындағы фекерҙәрен туплап, алған тәъҫораттарын һүҙ ярҙамында башҡаларға еткерә алалар.

*Тәрбиәсе балаларҙың театрлаштырылған уйыны менән етәкселек иткәндә түбәндәге ҡағиҙәләрҙе иҫтә тоторға тейеш:*

- ролдәрҙе башҡарыуға балаларҙы уларҙың теләге буйынса ғына тәғәйенләү;

- әҙәби әҫәрҙең бәләкәй генә өҙөктәрен сәхнәләштереп уйнарға балаларҙа теләк уятыу;

- һәр бер бала ролдәрҙең бөтәһен дә башҡарып ҡаранымы, уларҙы уйнауҙа уның уңыштары ниндәй булды – шуны һәр саҡ иҫтә тотоу;

- әкиәттәрҙе, әҫәр өҙөктәрен ҡат-ҡат уйнағанда театрҙың төрлө төрҙәрен ҡулланыу баланың ижади һәләтен үҫтерә. Быны онотмаҫҡа кәрәк.

## Өлкән төркөм

Биш-алты йәшлек балалар театрлаштырылған уйындар уйнағанда ролдәр бүлешеүҙә, уйын һайлауҙа һәм уның сюжетын сисеүҙә ҙур әүҙемлек, ижади үҙаллылыҡ күрһәтәләр. Тәрбиәсе уларҙың һәр яҡлы ижади уйындарын ҡеүәтләп, дәртләндереп, хуплап тора.

Балалар уйында ижади төркөмсәләргә тупланып уйнайҙар. Педагогтан балаларҙың уйыны менән маҡсатлы рәүештә етәкселек итеү талап ителә. Ул балаларҙы геройҙың теге йәки был осраҡта нисек үҙ-үҙен тотоуын һүрәтләргә, геройға шәхси характеристика бирергә, уның төрлө осраҡтарҙан сығып башҡарған эш-хәрәкәттәренә баһа бирергә йәлеп итә. Был алым балаларҙың ижади һәләттәрен аса һәм үҫтерә. Улар көндәлек тормоштағы күренештәргә икенсе күҙлектән сығып ҡарарға, теге йәки был күренештең үҫешен икенсе йүнәлештә бороп ебәреүҙә отҡорлоҡ күрһәтергә, үҙҙәренең аң-белем байлығын персонаждар образын һүрәтләгәндә кәрәкле урында һәм оҫта итеп ҡулланырға өйрәнәләр. Балаларҙың бергәләп эш итеүҙәрен, кәңәш ҡороп, сюжеттың йөкмәткеһен сисеүҙәрен, бер-береһе менән ихтирамлы рәүештә аралашыуҙарын хупларға, балаларҙы дәртләндереп, маҡтап торорға кәрәк.

Балаларҙың ролдәрҙе башҡарыуы улар тарафынан үҙаллы, үҙҙәре теләгәнсә атҡарылырға тейешле: улар әҫәрҙе сәхнәләштереүгә өҫтәлмәләр, төрлө үҙгәрештәр индереп уйнай алалар.

Балалар геройҙың холоҡ-ҡиәфәтенә, башҡарған эш-хәрәкәтенә, әйткән һүҙҙәренә генә түгел, ә күренеш уйналған урындың биҙәлешенә лә иғтибар итеп, уны сюжетҡа ярашлы итеп йыһазландыра башлайҙар.

Ролде кәрәкле кимәлдә матур итеп уйнар өсөн, балаларға персонаж кейеменең, уның тышҡы ҡиәфәтенең һәм башҡа сәхнә кәрәк-яраҡтарының герой йәшәгән дәүергә тура киләме, юҡмы – шуны билдәләй белеү ҙә ярҙам итә. Мәҫәлән, етем ҡыҙ Гөлбикә ролен ул йәшәгән замандағы кейем-һалымға, көнкүреш әйберҙәренә, кешеләрҙең бер-береһе менән ниндәй һүҙҙәр менән аралашыуҙарына, ниндәй йырҙар, бейеү хәрәкәттәре башҡарылыуына тап килтереү өсөн балалар тәрбиәсе етәкселегендә ҙур эш башҡарырға тейештәр. Күп кенә тарихи мәғлүмәттәр менән танышыу, һүрәттәр һәм әкиәт иллюстрацияларын өйрәнеү, музейға барып, боронғо ҡомартҡылар менән танышыу, ата-әсәләр һәм тәрбиәсе етәкселегендә күргәндәр тураһында фекер алышыу – балаларға әҫәрҙе элекке заман талабына тап килтереп сәхнәләштереүгә ярҙам итәсәк.

Уйын өсөн кейем-һалым һәм башҡа кәрәк-яраҡтар әҙерләгәндә балалар бергәләп, үҙ-ара кәңәшләшеп эшләһәләр, тамашаға ҡыҙыҡһыныу тағы ла арта төшәсәк. Төрлө әңгәмәләргә балаларҙың бөтәһе лә йәлеп ителһә, оялсан, ҡыйыуһыҙ балалар ҙа үҙҙәрен әүҙем һәм дөйөм эш өсөн кәрәкле итеп тоясаҡтар. Күп ваҡыт уларҙың тәҡдимдәре лә бик файҙалы була. Ғәҙәттә театрлаштырылған уйын әҙерләгәндә балалар бәләкәй генә ижади төркөмсәләргә тупланалар: «Костюм тегеүселәр», «Сәхнә биҙәүселәр», «Артистар», «Рәссамдар», «Сәхнә эшен тәьмин итеүселәр» һ.б. Ләкин был төркөмсәләр тотараҡ түгелдәр, улар тиҙ генә ойоша, шулай уҡ тиҙ генә тарҡала торған булалар. Был саҡта тәрбиәсенең төп бурысы булып, ошо төркөмсәләрҙең эшен һүндермәй, дауам иттереү тора. Һәр балаға илһам өҫтәп, ижади эшкә әйләп, башланған эшмәкәрлектең аҙағына сығырға өйрәтеү тора. Әҙерлек ваҡытында шиғырҙар, әйтемдәр, мәҡәлдәр, йомаҡтар отоп алыу һәм уларҙы сюжет буйынса ҡулланырға өйрәтеү ҙә тамашаны ҡыҙыҡлы һәм зауыҡлы итә.

Өлкән төркөм балалары кескәйҙәр алдында үҙҙәренең һөнәрҙәрен күрһәтеп сәхнәлә уйнауы – бәләкәстәр өсөн бигерәк тә файҙалы һәм абруйлы була.

*Тәрбиәсегә кәңәштәр:*

- уйын-драматизация әҙерләүгә балаларҙың мөмкин тиклем бөтәһен дә йәлеп итергә тырышыу;

- сәхнәләштерелгән уйындарҙа ролдәр башҡарыуға балаларҙың теге йәки был ролде башҡарыу һәләтен һәм мөмкинселеген иҫәпкә алып билдәләү;

- һәр бер бәләкәй генә уңышты ла, баланың шәхси ҡаҙанышын да билдәләп, баһалап, кескәйҙәрҙе дәртләндереп, хуплап, уларҙы ижади юғарылыҡтарға өндәү;

- тәрбиәсе был эштә һәр яҡтан үҙе өлгө булырға тейеш.

## Мәктәпкә әҙерлек төркөмө

Мәктәпкә әҙерлек төркөмөнә йөрөгән балаларҙың театрлаштырылған уйынында уларҙың яңылыҡҡа, донъяны танып-белеүенә булған көслө теләге төп урынды биләй. Педагог был уйын менән етәкселек иткәндә балаларҙың ижади эшмәкәрлегенә кәрәкле шарттар тыуҙырырға зарур. Был йәш балаларын геройҙың холҡо, ҡылығы, һәр осраҡта үҙен тейешле рәүештә тотоуы, уның эске кисерештәренең тышҡы ҡиәфәтендә нисек сағылыуы – былар барыһы ла ҡыҙыҡһындыра һәм улар үҙ уйындарында персонаждарҙың ошо сифаттарын асып бирергә тырышалар.

Тәрбиәсегә йышыраҡ уйын геройҙарының тормошо, теге йәки был осраҡтағы яҡшы эше, ҡыланышы, уның эске кисерештәре тураһындағы әңгәмәләр үткәреү файҙалы була. Улар балаларға әкиәт персонаждарының образын аңларға һәм уйында уны тәрәнерәк асырға, уйнап күрһәтергә ярҙам итә. Ошо рәүештә педагог баланың үҙенә лә шәхес булараҡ үҫешергә ярҙам итә.

Алты йәшлек бала үҙенең тиҫтерҙәренең һәм ололарҙың сәхнәләге сығышын яратып ҡарай һәм лайыҡлы баһалай ала. Уның ғөмүмән театр һәм ҡаралған тамашалар эстәлеге, образдарҙың асылышы тураһындағы фекерләүе тәрән һәм ысынбарлыҡҡа тап килә. Баланың театрҙа эшләүсе

һөнәр эйәләренең эше, театр бинаһының эске төҙөлөшө, театрҙа үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре тураһында күп кенә мәғлүмәттәре бар. Сәхнә сараларының – яҡтыртыу, музыкаль яҡтан биҙәү, грим, интерьер, кәрәкле кейем-һалым һ.б. – һәр береһенең тәғәйенләнешен аңлай һәм аңлата белә.

Балалар ҡыҙыҡлы һәм көлкөлө тамашалар ғына ҡарап ҡәнәғәтләнмәйҙәр, уларҙы төрлө тулҡынландырғыс көрәш менән бәйле драматик әҫәрҙәр ҙә ҡыҙыҡһындыра. Спектакль алдынан тәрбиәсе мотлаҡ рәүештә уның тураһында әҙерлек әңгәмәһен, ә һуңынан – алған тәъҫораттар тураһында һөйләшеү үткәрә.

*Тәрбиәсегә кәңәштәр:*

- бала ҡатмарлы сюжетлы тамашаны ла бик яҡшы ҡабул итә;
- балаға үҙенең театрҙан алған хис-тойғоларын, уй-фекерҙәрен ниндәй генә уйҙырма кеүек булһа ла, уны әйттереп, башҡалар менән бүлешеү мөмкинселеген биреү;
- тәрбиәсегә үҙенең ижади һәләте менән балаларға тәъҫир итеп, уларҙы шатландырыуҙан, аптыратыуҙан, ҡыуандырыуҙан туҡтамау;
- һәр балаға сәхнәләштерелгән тамашала ҡатнашыу мөмкинселеге биреү;
- баланың ижади һәләтен асыу өсөн сәхнәләштерелгән уйындарға ата-әсәләрҙе йәлеп итеү, балаларға үҙ-аллы ролдәрҙең эстәлеген асып биреү мөмкинлеген ойоштороу.

# «Башҡорт балалар баҡсалары өсөн уҡытыу-тәрбиә программаһы»на ярашлы тәҡдим ителгән уйындар

## Беренсе кескәйҙәр төркөмө (2 йәштән 3 –кә тиклем)

## Хәрәкәтле уйындар

2 –3 йәштә балаларҙың хәрәкәтле уйынға булған ҡыҙыҡһыныуы арта бара. Был йәштә улар бәләкәй-бәләкәй төркөм менән, унан һуң бөтә төркөм менән уйнағанда ла уйындың ябай ҡағиҙәләрен үтәй алалар. Яйлап балалар сослоҡ, йылдамлыҡ, таҫыллыҡ талап иткән уйындарҙа ла әүҙем ҡатнаша башлайҙар.

Хәрәкәтле уйындар балаларҙа оялсанлыҡты, үҙ – үҙенә ышанмаусанлыҡты еңеп сығарға ярҙам итә. Уларҙың күңелендә дуҫлыҡ, иптәшлек, кешелеклелек, ярҙамсылыҡ тойғолары уята. Балаларҙа сигнал буйынса уйынды башлай һәм туҡтата, ололарҙы тыңлай белеү һәләтлелеге үҫешә.

Хәрәкәтле уйындар баланың физик үҫешенә ҙур йоғонто яһай, сөнки был уйындарҙы уйнағанда баланың барлыҡ ағзалары ла хәрәкәтләнеп үҫешә һәм нығына.

### Бесәйҙе тотоғоҙ

**Маҡсат:** балаларҙың кәрәкле йүнәлештә атлай һәм югерә белеү һәләтен нығытыу һәм үҫтереү.

**Йыһаз:** уйынсыҡ бесәй.

**Уйын барышы:** балалар ултырғыста, йә эскәмйәлә ултыралар. Бесәй мыяулаған тауыш ишетелә. Тәрбиәсе бесәйҙе икенсе бүлмәнән алып сыға. Ул бесәй булып, балалар менән һаулыҡ һораша. Тәрбиәсе балалар менән бергәләп бесәйҙең ҡолаҡтарын, күҙҙәрен, аяҡтарын, ҡойроғон ҡарайҙар. Бесәйҙең йомшаҡ, матур, бәләкәй генә икәнлеген әйтәләр. Бесәй тағы ла "Мяу - мяу " - ти.

Тәрбиәсе: "Балалар, бесәйҙең һеҙҙең менән уйнағыһы килә", - ти. Бесәй ҡаса (тәрбиәсе ҡулында), ә балалар бесәйҙе баҫтырып тоталар, уны ипләп кенә һыйпап яраталар.

Уйын 1 – 2 тапҡыр ҡабатланғас, бесәй балаларҙы тота, балалар ултырғыстарға ултыралар.

## Ҡояш һәм ямғыр

**Маҡсат:** балаларҙы югергәндә бер – береһе менән бәрелешмәй төрлө йүнәлештә атлай һәм югерә белергә өйрәтеү; хәрәкәтте сигнал буйынса башлай һәм туҡтата белеү күнекмәләрен нығытыу; уйындың ябай ғына ҡағиҙәләре менән таныштырып, уларҙы башҡара белергә өйрәтеү һәм уларҙы үтәүҙе нығытыу; балаларҙа иғтибарлылыҡ, йылдамлыҡ, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ тәрбиәләү.

**Уйынды үткәреү урыны:** төркөм бүлмәһе, зал, уйын майҙансығы.

**Йыһаз:** ҡояш, ямғыр макеттары.

**Уйын барышы:** балалар "өйҙәрендә" (ултырғыста, йә эскәмйәлә) ултыралар. Уйын алдынан "Ҡояш апайҙы" саҡырып, һамаҡларға мөмкин:

Ҡояш апай сыҡ – сыҡ,
Ҡояш апай сыҡ – сыҡ.
Тәтәй ҡалаҡ бирермен,
Тәтәй һауыт бирермен.

"Ҡояш апай" күренә (макет – һүрәт). Тәрбиәсе: "Ҡояш яҡтырта, уйнарға мөмкин", - тип балаларҙы өйҙән урамға саҡыра. Балалар уйнайҙар, югерәләр, һикерәләр. "Ямғыр килә", - тип тәрбиәсе ямғырҙы (макет – һүрәтте) күрһәтһә, балалар өйҙәренә (ултырғыстарына) югереп барып ултыралар.

Уйын шул рәүешле бер нисә тапҡыр ҡабатлана.

## Тупты тот

**Маҡсат:** балаларҙы атлаған һәм югергән ваҡытта йүнәлеште үҙгәртә, югергәндә бер – береһенә бәрелмәй югерә белергә, тупты тоторға өйрәтеү һәм был күнекмәләр аша баланың һаулығын нығытыу; балаларҙа иғтибарлылыҡ, уяулыҡ, йылдамлыҡ, ихтыяр көсө тәрбиәләү.

**Йыһаз:** кәрзинкә һәм балалар һаны буйынса туптар.

**Уйын барышы:** балалар ултырғыста, йә эскәмйәлә ултыралар. Тәрбиәсе туптар ятҡан кәрзинде күрһәтә һәм балаларға үҙенең эргәһенә килергә һорай.

Тәрбиәсе "Тупты тотоғоҙ!", - тип кәрзиндәге туптарҙы төрлө яҡҡа таратып тәгәрәтеп ебәрә. Балалар тупты ҡыуып етеп (һәр бала бер генә тупты тотоп алырға тейеш), кире кәрзингә алып килеп һалалар.

Шул рәүешле уйын бер нисә тапҡыр ҡабатлана.

## "Айыу – бүре юҡ икән"

**Маҡсат:** балаларҙың төрлө йүнәлештә атлай һәм югерә белеү һәләтлелеген үҫтереү. Сослоҡ, иғтибарлылыҡ, йылдамлыҡ тәрбиәләү.

**Уйын барышы:** балалар араһынан берәй баланы һанашмаҡ аша айыу итеп билдәләргә. Айыуға бүлмәнең берәй мөйөшөндә "өң" билдәләнә, ә балаларға бүлмәнең икенсе яғында "өйҙәре" - ултырғыстар күрһәтелә. Балалар өйҙән сығып, айыу йөрөгән яҡҡа күмәкләп йырлай – йырлай, еләк йыйырға китәләр:

Еләк йыям, ҡаҡ ҡоям,
Әсәйемә бүләккә.
Бында еләк күп икән,
Айыу – бүре юҡ икән.

Балалар йырлап бөткәс, "айыу" өңөнән югереп сығып, балаларҙы баҫтыра, балалар өйҙәренә ҡасалар. Тотолған бала, йә башҡа бала үҙ теләге менән "айыу" була һәм уйын яңынан башлана.

## Аҡ ҡуянҡай

**Маҡсат:** балаларҙы уйын һүҙҙәрен тыңларға һәм һүҙҙәргә ярашлы хәрәкәттәр башҡарырға, ике аяҡлап алға табан һикерергә өйрәтеү. Балаларҙа иғтибарлылыҡ, таҙалыҡ, бөхтәлек, ихтыяр көсө тәрбиәләү.

**Йыһаз:** балалар һаны буйынса "ҡуян" битлектәре.

**Уйын барышы:** балалар ултырғыста, йә эскәмйәлә бүлмәнең бер яғында ултыралар. Улар "ҡуяндар". Тәрбиәсе: "Ҡуяндар, әйҙәгеҙ, ҡунаҡҡа барайыҡ", - тип әйтһә, балалар торалар һәм:

"Аҡ ҡуянҡай йыуына,

Ул ҡунаҡҡа йыйына.

Танауын йыуҙы,

Ҡойроғон йыуҙы,

Ҡолағын йыуҙы", - тип әйтәләр.

Тексты әйткән ваҡытта, йыуыныу хәрәкәттәрен башҡаралар. Шунан һуң "ҡуяндар" ике аяҡлап алға табан һикереп, "ҡунаҡҡа" баралар (бүлмәнең икенсе яғына). Һуңынан улар үҙҙәренең өйөнә кире әйләнеп ҡайталар. Уйын яңынан башлана.

## Көн һәм төн

**Маҡсат:** балаларҙы сигнал буйынса хәрәкәтте башларға һәм туҡтарға, атлағанда, югергәндә бер – береһенә бәрелмәй йөрөргә өйрәтеү. Балаларҙа иғтибарлылыҡ, уяулыҡ, йылдамлыҡ, ихтыяр көсө тәрбиәләү.

**Уйын барышы:** балалар ултырғыста, йә эскәмйәлә ултыралар. Тәрбиәсе уйын алдынан ҡыҫҡаса ғына әңгәмә үткәрә:

- Балалар, көндөҙ һеҙ нимә эшләйһегеҙ? (уйнайбыҙ, бейебеҙ, югерәбеҙ, һикерәбеҙ һ.б.)
- Ә төнөн нимә эшләйһегеҙ? (йоҡлайбыҙ)

- Әйе, дөрөҫ. Хәҙер беҙ һеҙҙең менән "Көн һәм төн" тигән уйын уйнаясаҡбыҙ. Мин "көн" тип әйтһәм, һеҙ уйнағыҙ, югерегеҙ, һикерегеҙ, атлап йөрөһәгеҙ ҙә була. Мин "төн" тип әйтһәм, һеҙ ултырғыстарға, йәки сүкәйеп ултырырға тейешһегеҙ.

Уйын бер нисә тапҡыр ҡабатлана.

## Ҡуңыҙҙар

**Маҡсат:** балаларҙың ирекле рәүештә төрлө йүнәлештә бер – береһенә бәрелмәй, бер – береһен эткеләмәй югерә белеүҙәрен нығытыу. Сигнал буйынса хәрәкәт юнәлешен үҙгәртергә өйрәтеү. Балаларҙа иғтибарлылыҡ, уяулыҡ, йылдамлыҡ, ихтыяр көсө тәрбиәләү.

**Уйын барышы:** балалар ултырғыста, йә эскәмйәлә ултыралар. Тәрбиәсе уйын алдынан ҡуңыҙ һүрәтен күрһәтә һәм уның нисек осҡанын, ергә төшкәнен, ҡолаһа, нисек итеп торғанын аңлата, иң беренсе тапҡыр уйнағанда был хәрәкәттәрҙе күрһәтеп тә сыға.

Тәрбиәсе: "Ҡуңыҙҙар осалар", - тиһә, балалар бүлмә буйлап төрлө юнәлештә югерәләр. Балалар югергәндә тәрбиәсе ритмлы рәүештә дөңгөргә йәки бубенға һуға. "Ҡуңыҙҙар ҡоланылар", - тип әйтелә һәм дөңгөрҙе йәки бубенды һелкетеп сигнал бирелә, ә балалар арҡалары менән иҙәндәге келәмгә яталар. Ҡулдары һәм аяҡтары менән ҡуңыҙҙарҙың арҡала ятып, тора алмау хәрәкәттәрен күрһәтәләр. Тәрбиәсе: "Ҡуңыҙҙар осалар", - тигән сигналға балалар торалар һәм бүлмә буйлап төрлө юнәлештә тағы югерәләр.

Уйын шул рәүешле дауам ителә. Балалар уйындың ҡағиҙәләрен үҙләштереп, бөтәһе лә уны дөрөҫ башҡара башлағас, бубен ритмын, йәки музыка тауышын үҙгәртеп, уйын хәрәкәттәрен төрлөсә үткәрергә була.

## Себештәр һәм бесәй

**Маҡсат:** балаларҙа иғтибарлылыҡ, етеҙлек, сослоҡ тәрбиәләү. Сигнал буйынса хәрәкәт итә белеү күнекмәләрен нығытыу.

**Йыһаз:** "бесәй, ҡуян" битлеге.

**Уйын барышы:** балалар ултырғыста, йә эскәмйәлә бүлмәнең бер яғында ултыралар. Улар "себештәр". Тәрбиәсе - "тауыҡ". Һанашмаҡ әйтеп, берәй баланы "бесәй" итеп һайлайҙар. Бүлмәнең икенсе яғында "бесәй" йоҡлап ята. Тәрбиәсе балалар менән бергәләп, бүлмә буйлап йөрөйҙәр һәм "бесәй" янына килеп:

Бесәй, бесәй, бесәй шул,
Бесәй әле кескәй шул.
Үҙе мырлай ҙа мырлай,

Әллә ул шулай йырлай, - тип әйтәләр йәки йырлайҙар. Бесәй уяна, мыяулап себештәрҙе баҫтыра башлай. Тәрбиәсе-тауыҡ себештәрен һаҡлап, ҡулдарын ян-яҡҡа ҡуйып, бесәйҙе ҡыуа: "Кит, бесәй, себештәргә теймә".

Яңынан бесәй һайлана һәм уйын тағы ҡабатлана.

## Минең күңелле тубым

**Маҡсат:** балаларҙы бер урында ике аяҡлап һикерергә өйрәтеү. Шиғырҙың һүҙҙәрен иғтибар менән тыңлап, һуңғы һүҙ әйтелгәс кенә,

ҡасырға өйрәтеү. Етеҙлек, сослоҡ, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү. Сигнал буйынса хәрәкәт итә белеү күнекмәләрен нығытыу.

**Йыһаз:** туп.

**Уйын барышы:** балалар ултырғыста, йә эскәмйәлә бүлмәнең бер яғында ултыралар. Тәрбиәсе улар алдында, ҡулында туп. Ул тупты иҙәнгә һуғып, унын нисек һикергәнен күрһәтә һәм:

"Топ – топ – топ,
Бына һиңә
Дуҫым туп!
Топ – топ – топ,
Ысҡындырма, тиҙ тот – тот!" - тип һамаҡлай.

Шунан ул 2 – 3 баланы эргәһенә саҡырып, туп һикергән ыңғайға уларға ла туп кеүек һикерергә тәҡдим итә. Уйын һүҙҙәрен әйтә лә: "Хәҙер тотам!"- ти.

Балалар ҡасалар, ә тәрбиәсе уларҙы баҫтыра. Уйынды ҡабатлап уйнағанда, башҡа балалар бөтәһе лә уйынға йәлеп ителәләр. Улар – туптар.

## Самолеттар

**Маҡсат:** балаларҙың бер-береһенә бәрелешмәй югерә белеү күнекмәләрен нығытыу. Етеҙлек, сослоҡ, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү. Сигнал буйынса хәрәкәт итә белеү күнекмәләрен нығытыу.

**Уйын барышы:** балалар ултырғыста, йә эскәмйәлә бүлмәнең, йәки майҙансыҡтың бер яғында ултыралар. Тәрбиәсе улар алдында тороп, нисек уйнаясаҡтарын, йәғни уйындың эстәлеген аңлата: - "Мотор", - тип әйтелгәс, балалар мотор эшләү хәрәкәтен күрһәтеп, самолет булып осорға әҙерләнәләр. "Остоҡ", - тигәс, майҙансыҡ буйлап югерәләр, йөрөйҙәр. "Самолеттар ергә ултырҙы", - тигәс, барыһы ла урындарына ултыралар.

Тәрбиәсе: "Остоҡ", - тип сигнал биргәс, балалар ҡулдарын ике яҡҡа һуҙып (самолеттың ҡанаттары) бүлмә, майҙансыҡ буйлап осоп йөрөйҙәр.

Уйын шул рәүешле яңынан ҡабатлана.

Тәрбиәсе хәрәкәттәрҙе тәүҙә үҙе күрһәтә, унан һуң ғына балалар менән бергәләп эшләйҙәр.

## Аҡ ҡалас

**Маҡсат:** балаларҙы ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк яһап әйләнеп йөрөргә өйрәтеү. Уйындың һүҙҙәренә ярашлы рәүештә төрлө хәрәкәттәрҙе башҡара белеүҙе нығытыу. Дуҫлыҡ, иптәшлек, бер-береһенә ҡарата ихтирамлылыҡ тойғолары тәрбиәләү.

**Уйын барышы:** балалар ҡулға – ҡул тотоношоп, түңәрәк яһайҙар. Һанашмаҡ әйтеп, бер баланы түңәрәк уртаһына сығаралар (йәки кемдең тыуған көнөн байрам итәләр - уны) һәм шул баланың исемен әйтеп, башҡа балалар түңәрәк буйлап, түбәндәге һүҙҙәрҙе берәй көйгә һалып, йырлайҙар:

Зифаның тыуған көнөнә,
Беҙ бешерҙек аҡ ҡалас,
Бына шулай ул бейек,
Бына шулай тәпәшәк,
Бына шулай киңлектә,
Бына шулай тарлыҡта, -

һәм йырҙың һүҙҙәренә ярашлы кәрәкле хәрәкәттәрҙе башҡаралар. Йырлап бөткәс:

Аҡ ҡалас, аҡ ҡалас,

Беребеҙҙе һайлап, ҡас! - тип әйтәләр. Уртала торған бала, түңәрәктәге берәй баланың эргәһенә бара ла, уның менән бергәләп түңәрәк уртаһында бейейҙәр, башҡалар сәпәкәй итәләр.

Һуңынан уртаға икенсе бала сығып тора, уйын артабан шулай дауам итә.

## Дидактик уйындар

## Сәскәләр һәм күбәләктәр

**Маҡсат:** балаларҙы төҫтәрҙе таный һәм айыра белергә өйрәтеү, уларҙың хәтерен, телмәрен үҫтереү. Төҫтәрҙе тирә-йүндәге предметтарҙа күрә белеү һәләтен нығытыу һәм үҫтереү.

**Йыһаз:** төҫлө картондарҙан (йәшел, һары, ҡыҙыл, аҡ) сәскәләр һәм шул уҡ төҫтәге күбәләктәр.

**Уйын барышы:** тәрбиәсе өҫтәлгә төрлө төҫтәге сәскәләрҙе һала. Балалар менән сәскәләрҙең төҫтәрен әйтеп сығалар һәм тәрбиәсе: "Бына матур-матур күбәләктәр осоп йөрөйҙәр. Улар үҙҙәренең сәскәләрен эҙләйҙәр", - ти һәм күбәләктәрҙе өҫтәлдең уртаһына һала. Балалар һәр күбәләкте төҫөнә ҡарап, шул уҡ төҫлө сәскә өҫтөнә ҡуйырға тейеш: ҡыҙыл сәскәгә – ҡыҙыл күбәләк, аҡ сәскәгә – аҡ күбәләк .

## Нимә юҡ булды?

**Маҡсат:** балаларҙың иғтибарын, хәтерен, зиһенен, телмәрен үҫтереү. Һорауҙарҙы тыңлай һәм яуап бирә белеүҙе өйрәтеүҙе дауам итеү.

**Йыһаз:** уйынсыҡ бесәй, айыу, туп, ҡурсаҡ (3-4 уйынсыҡ алына), йәки ошо уйынсыҡтарҙың һүрәте төшөрөлгән карточкалар алына.

**Уйын барышы:** тәрбиәсе өҫтәлгә уйынсыҡ бесәй, айыу, туп ҡуя. Балалар ултырғыстарҙа ярымтүңәрәк яһап ултыралар. Улар өҫтәлдәге уйынсыҡтың нисек аталғанын әйтәләр. Тәрбиәсе: "Балалар, хәҙер күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ!"- тип әйтә лә, улар күҙҙәрен йомғас, өҫтәлдән берәй уйынсыҡты ала. Балалар күҙҙәрен асалар һәм ниндәй уйынсыҡ юҡлығын әйтәләр. Балалар дөрөҫ әйтһәләр, уйынсыҡ кире өҫтәлгә ҡуйыла. Шул рәүешле һәр бер уйынсыҡ юҡ булғансы, уйын дауам ителә.

## Нимәнең тауышы?

**Маҡсат:** предметтар сығарған тауыштарҙы танып, уларҙың атамаларын әйтә белергә өйрәтеү; балаларҙың иғтибарын, хәтерен, зиһенен, телмәрен үҫтереү; һорауҙарҙы тыңлай һәм яуап бирә белеү һәләтлелеген үҫтереү.

**Йыһаз:** сыңғырҙаҡ (колокольчик), дөңгөр (погремушка), һыбыҙғы (дудочка), барабан, шаршау.

**Һүҙлек эше:** сыңғырҙаҡ, дөңгөр, һыбыҙғы.

**Уйын барышы:** Балалар ултырғыстарҙа ярымтүңәрәк яһап ултыралар. Улар ҡаршыһында өҫтәлдә барабан, сыңғырҙаҡ, дөңгөр,

һыбыҙғы. Һәр бер уйынсыҡтың исемен балалар тәрбиәсе ярҙамында әйтеп сығалар:

- Был нимә, балалар?

- Был барабан.

- Әйе, дөрөҫ, был барабан. Бына барабандың таяҡтары. Ул таяҡтар менән барабанға һуҡһаң, бына ниндәй тауыш сыға.(Тәрбиәсе барабанға таяҡтар менән һуға. 1-2 баланы эргәһенә саҡырып, уларҙан да барабанда уйнаттыртып ҡарата).

Шул рәүешле һыбыҙғыны һыҙғыртып, сыңғырҙаҡты зыңғырҙатып, дөңгөрҙө шылтыратып уйнап ҡарағандан һуң, тәрбиәсе шаршау ҡуя, уйынсыҡтар шаршау артында. Тәрбиәсе шаршау артында ошо музыкаль ҡоралдарҙа уйнай һәм балаларҙан уларҙың тауышын билдәләргә һорай.

## Ҡурсаҡ сәй эсә

**Маҡсат:** һауыт-һабаларҙың атамаларын бала дөрөҫ итеп әйтә, уларҙы таный һәм ниндәй осраҡта ҡулланырға кәрәк икәнлеген аңлай һәм үҙе лә аңлата белеүенә өлгәшеү. Тирә-йүндәге предметтарға һаҡсыл ҡараш, бөхтәлек, иплелек тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ, сәй эсеү өсөн уйынсыҡ һауыт-һабалар: сәйнүк, сынаяҡ, ҡалаҡ, тәрилкә, шулай уҡ ашамлыҡтар - кәнфит, печенье алына.

**Уйын барышы:** Балалар ултырғыстарҙа ярымтүңәрәк яһап ултыралар. Тәрбиәсе төркөмгә яңы ҡурсаҡ алып инә. Ул балалар менән һаулыҡ һораша. Тәрбиәсе: " Бына беҙгә ҡунаҡҡа ҡурсаҡ килде. Уның исеме Айһылыу. Әйҙәгеҙ Айһылыуға сәй эсерәйек. Уны ҡайҙа ултыртайыҡ икән?" Балалар ҡурсаҡты бәләкәй өҫтәл эргәһендәге ултырғысҡа ултырталар. Сәй эсергә кәрәкле һауыт-һабаларҙы, ашамлыҡтарҙы тәрилкәгә һалып өҫтәлгә ҡуялар. Өҫтәлгә ҡуйыла барған һәр нәмәнең атамаһын балалар әйтә баралар. "Бына өҫтәлгә кәрәкле нәмәләрҙе ултыртып бөттөк, хәҙер ҡурсаҡҡа сәй ҡояйыҡ", - ти тәрбиәсе. Тәрбиәсе йәки берәй бала сәй ҡоя, ҡурсаҡ сәй эсеп, рәхмәт әйтеп, балалар менән уйнарға ҡала.

## Төҫлө ҡапҡастар

**Маҡсат:** балаларҙы төрлө төҫтәрҙе таный һәм айыра белеү күнекмәләренә өйрәтеү, уларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен үҫтереү. Төҫтәрҙе тирә-йүндәге предметтарҙа күрә белеү һәләтен нығытыу һәм үҫтереү.

**Йыһаз:** төрлө төҫтәге бәләкәй пластмасс ҡапҡастар (йәшел, һары, ҡыҙыл, аҡ). Шундай уҡ төҫтә картондан эшләнгән бәләкәй ҡумталар.

**Уйын барышы:** балалар (дурт бала) өҫтәл тирәләй ултыралар, өҫтәлдең уртаһында ҙур һауытта төрлө төҫтәге йогурт һауытының ҡапҡастары. Һәр баланың алдында берәр ҡумта. Тәрбиәсе һәр баланан унын ҡумтаһы ниндәй төҫтә икәнлеген һорай һәм шундай уҡ төҫтәге ҡапҡасты табып, үҙенең ҡумтаһына ябыуын һорай. Ҡумтаны ҡапҡас менән япҡан һәр баланан тәрбиәсе унын ҡапҡасы ниндәй төҫтә икәнлеген һорап әйттерә.

## Кем нисек ҡысҡыра?

**Маҡсат:** балаларҙың йорт хайуандары һәм йорт ҡоштары тураһындағы белемдәрен асыҡлау һәм тулыландырыу. Уларҙы һүрәттәрҙән танып әйтә, күрһәтә белергә һәм тауыштарын айыра белергә өйрәтеү. Балаларҙың хәтерен, зиһенен, телмәрен үҫтереү.

**Йыһаз:** уйынсыҡ йорт хайуандары һәм ҡоштары, йәки уларҙың һүрәттәре.

**Уйын барышы:** балалар ярымтүңәрәк яһап ултырғыстарҙа, йә өҫтәл артында ултыралар. Тәрбиәсе берәмләп уйынсыҡ хайуандар һәм ҡоштарҙы күрһәтә:

- Балалар, был нимә?
- Был тауыҡ.
- Ул нисек ҡысҡыра?
- Ҡыт – ҡытаҡ, ҡыт – ҡытаҡ!
- Балалар, ул шулай кемде саҡыра икән? (әтәсте)
- Азат, йә, әйт әле, тауыҡ нисек ҡысҡыра? Хәҙер күмәкләп әйтәйек!

Шул рәүешле һәр бер йорт хайуанын (эт, бесәй) һәм ҡоштарын (тауыҡ, әтәс) һәм уларҙың тауыштарын әйтеп сығалар.

## Кемдә нимә?

**Маҡсат:** балаларҙы уларҙы уратып алған предметтарҙың дәүмәле менән таныштырыуҙы дауам итеү һәм предметтарҙы танып, дөрөҫ итеп исемдәрен әйтергә, ҙурлыҡтары буйынса сағыштыра белергә өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, һөйләшеү телмәрен үҫтереү.

**Йыһаз:** төрлө предметтар (тәрилкә, ҡалаҡ, туп, өҫтәл, ултырғыс, күлдәк, яулыҡ) төшөрөлгән ҙур һәм бәләкәй карточкалар.

**Уйын барышы:** балалар өҫтәл тирәләй ултыралар. Тәрбиәсе һәр балаға предмет төшөрөлгән карточка бирә. Һәр береһенән унда нимә төшөрөлгән икәнлеген һорай. Шунан тәрбиәсе: "Кемдә тәрилкә төшөрөлгән һүрәт?" - тип һорай. Тәрилкә булған бала: "Миндә", - тип һүрәтте башҡа балаларға күрһәтә. Тәрбиәсе үҙендәге ҙур тәрилкә төшөрөлгән ҙур карточканы күрһәтә. Аҙаҡ тәрилкәнең ҡайһыныһы ҙур, ҡайһыныһы бәләкәй икәнлеген, тәрилкәләрҙең ни өсөн кәрәклеген асыҡлайҙар.

Шул рәүешле карточкалар бөткәнсе уйын дауам итә.

## Ҡурсаҡ тышҡа уйнарға сыға

**Маҡсат:** балаларҙы өҫ, баш, аяҡ кейемдәрен танып, дөрөҫ итеп уларҙың атамаларын әйтергә, ниндәй кейемде ҡасан һәм ҡайһы тән өлөшөнә кейергә кәрәк икәнлеген айыра һәм әйтә белергә өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, һөйләү телмәрен үҫтереү. Кейемдәргә ҡарата һаҡсыл ҡараш, бөхтәлек тәрбиәләү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ, уның кейемдәре: бүрек, тун, быйма, күлдәк, салбар, ойоҡ.

**Уйын барышы:** Тәрбиәсе: "Балалар ҡурсаҡ Айһылыу һеҙҙең менән бергә тышҡа уйнарға сығам ти, әйҙәгеҙ, уны кейендерәйек. Ул бит бәләкәй, үҙе кейенә белмәй", - тип ҡурсаҡтың кейемдәрен шкафтан (алдан ҡурсаҡтың кәрәкле бөтә кейемдәре әҙерләнеп ҡуйыла) алып килә лә, ҡурсаҡты кейендерә башлайҙар.  Тәрбиәсе: "Иң алда Айгөлгә нимәһен кейҙерәбеҙ? Шунан? - тип балаларға һорауҙар биреп тора. Шул рәүешле ҡурсаҡты кейендереп бөткәнсе, балалар тәрбиәсегә ярҙамлашалар һәм

уның һорауына яуап бирәләр. Аҙаҡ ҡурсаҡты үҙҙәре менән тышҡа уйнарға алып сығып китәләр.

## Ниндәй фигураға оҡшаған?

**Маҡсат:** балаларҙың геометрик фигураларҙы (түңәрәк, өсмөйөш, квадрат) таный һәм уларға оҡшаған предметтарҙы таба, әйтә белергә өйрәтеү; балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен үҫтереү.

**Йыһаз:** төрлө геометрик фигураға оҡшаған һүрәттәр (туп, алма, өй ҡыйыҡы, китап, тәрилкә, һ.б.); өсмөйөш, түңәрәк, квадрат һыҙылған карточкалар.

**Уйын барышы:** балалар өҫтәл тирәләп ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе һүрәттәр һәм карточкалар ятҡан ҡумтаны алып, һүрәттәрҙе балаларға бирә, ә үҙенә карточкаларҙы алып ҡала. Шунан өҫтәлгә түңәрәк төшөрөлгән карточканы һала ла:

- Был ниндәй фигура? - тип һорай.

Балалар яуап биргәс, кемдә түңәрәккә оҡшаған һүрәт бар, шул бала карточка өҫтөнә һүрәтен һала. Уйын һүрәттәр бөткәнсе дауам ителә.

## Кемгә нимә кәрәк?

**Маҡсат:** балаларҙы һорауҙарҙы тыңлай һәм уларға яуап бирә белергә өйрәтеү; балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен, фекерләү һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** фланелеграф, һүрәттәр (ҡулсатыр, кәрзин, ваза, яулыҡ)

**Уйын барышы:** балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе фланелеграфҡа һүрәттәрҙе ҡуя, балалар унда төшөрөлгән предметтарҙың атамаларын әйтеп сығалар. Унан тәрбиәсе: "Балалар, Ләйсән тышҡа уйнарға сыҡты. Ҡапыл ямғыр яуа башланы. Ләйсәнгә нимә кәрәк булды?" - тип һорай.

Балалар фланелеграфта торған һүрәттәр араһынан ҡулсатырҙы табып, күрһәтеп "ҡулсатыр" тип әйтергә тейештәр. Тәрбиәсе дауам итә: "Ямғыр бөткәс, Ләйсәнгә Зифа апай осраны һәм уға сәскә бүләк итте. Өйгә ҡайтҡас, Ләйсән сәскәне нимәгә ҡуйыр икән?"

- Вазаға.

- Дөрөç. Ә бына, балалар, Дилә менән Зилә баҡсала күп итеп eләк йыйҙылар. Улар еләктәрен нимәгә һалдылар икән?
- Кәрзингә. Дөрөç, балалар.
- Тышта эçе, ҡояш ҡыҙҙыра. Ләйсән башына нимә ябынып алды?
- Яулыҡ, - тип яуап бирәләр балалар.

## Кем нимә эшләй?

**Маҡсат:** балаларҙың һүҙ байлыҡтарын яңы һүҙҙәр менән байытыу. Һорауҙарҙы тыңлап, уларҙың мәғәнәһен аңлап, яуап бирә белергә, һүрәттәрҙә күргәндәрен әйтә, аңлата белергә өйрәтеү. Һөйләү телмәрен, фекерләү һәләтен, хәтерҙе үçтереү.

**Йыһаз:** сюжетлы һүрәттәр, уларҙа төрлө эш хәрәкәттәре һүрәтләнгән (Атай китап ҡарай. Өләсәй ойоҡ бәйләй. Ҡурсаҡ йоҡлай. Әсәй сәй ҡоя), фланелеграф.

**Уйын барышы:** балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе фланелеграфҡа һүрәттәрҙе берәмләп ҡуя бара һәм балалар менән әңгәмәләшә:

- Был кем, балалар?
- Был өләсәй.
- Өләсәй нимә эшләй?
- Өләсәй ойоҡ бәйләй, һ.б.

Шул рәүешле һәр бер һүрәтте ҡарап, кемдең нимә эшләгәнен балалар әйтеп бирергә тейештәр.

# Сюжетлы - ролле уйындар

## Ҡурсаҡтарҙы һыйлайыҡ

**Маҡсат:** балаларҙы һауыт-һаба менән уйнарға, ҡунаҡтарға өҫтәл йәйергә, аҙыҡ-түлек (бутҡа, сәй, һөт, ҡоймаҡ һ.б.) менән таныштырыу. Тылсымлы һүҙҙәр ҡуллана белергә өйрәтеү.

Балаларҙа бөхтәлек, матурлыҡ, иплелек һыҙаттары тәрбиәләү.

**Һүҙлек эше:** балаларҙың һүҙ байлыҡтарын байытыу: ашъяулыҡ, сынаяҡ, тәрилкә, ҡоймаҡ, сәк-сәк, «ҡоймаҡ ҡоям, сәй ҡайнатам, өҫтәл әҙерләйем, бутҡа бешерәм» һүҙбәйләнештәрен ҡулланырға өйрәтеү.

Һөйләү телмәрен, фекерләү һәләтен, хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:**. ҡурсаҡтар, уйынсыҡ өҫтәл, ултырғыс, уйынсыҡ һауыт-һаба һәм ашамлыҡтар муляжы.

**Уйын барышы:** уйын алдынан тәрбиәсе балалар менән кемдең ҡунаҡҡа барғаны, унда нимә ашағандары, эскәндәре тураһында әңгәмә үткәрә, һүрәттәр күрһәтә. Өйгә ҡунаҡ килгәндә әсәй йәки өләсәй нисек өҫтәл әҙерләй, нимәләр бешерә, өҫтәлгә нимәләр ҡуя, шулар тураһында һүрәттәр ярҙамында һөйләшәләр.

Шунан тәрбиәсе балаларҙы уйын мөйөшөнә ҡунаҡҡа саҡыра. Ҡунаҡ һыйларға бутҡа бешереп, ҡоймаҡ ҡойоп, өҫтәл йәйеп күрһәтә. Балаларҙы ҡурсаҡ Айгөл ҡаршы ала, уның ярҙамында тәрбиәсе нисек һаулыҡ һорашырға, ҡунаҡтарҙы нисек һыйларға, өҫтәл артында үҙ-үҙеңде нисек тоторға кәрәклеген уйнап күрһәтә.

## Машина йөрөтәм

**Маҡсат:** балаларҙы машина менән уйнарға, уны йөрөтөр өсөн руль артына ултырырға, асҡыс менән машинаның моторын тоҡандырырға, ишеген ябырға һәм машинаны туҡтатырға сигнал бирә белергә өйрәтеү. Сәйәхәткә уйынсыҡтарҙы, ғаилә ағзаларын, дуҫтарҙы, уйынсыҡтарҙы ултыртып йөрөтөргә, улар менән аралашҡанда тылсымлы һүҙҙәр ҡуллана белергә өйрәтеү.

Балаларҙа бер-береһенә ҡарата ихтирамлыҡ, иплелек һыҙаттары тәрбиәләү.

**Һүҙлек эше:** балаларҙың һүҙ байлыҡтарын байытыу: «рулде борам, машинаның арбаһына уйынсыҡтар тейәйем, моторҙы ҡабыҙам, ишекте ябам» һүҙбәйләнештәрен ҡулланырға өйрәтеү.

Һөйләү телмәрен, фекерләү һәләтен, хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:**. ҡурсаҡтар, уйынсыҡтар, машина төҙөү өсөн ҙур күләмле йомшаҡ модуль уйынсыҡтар, руль.

**Уйын барышы:** уйын алдынан тәрбиәсе балалар менән кемдең еңел машинаға ултырып йөрөгәне бар, уны кем йөрөткәне тураһында әңгәмәләшә, уйынсыҡ машинаның өлөштәрен ҡарап, уларҙың атамаһын әйтеп сығалар. Бергәләп модуль ҡорамалдар ярҙамында машина төҙөйҙәр, уның рулен, кабинаһын, кузовын ҡарап, нимә өсөн кәрәклеген билдәләйҙәр.

Тәрбиәсе тәүҙә үҙе шофер ролен башҡара, бер нисә баланы машинаға ултырырға саҡыра. Моторҙы тоҡандырып, рулде бора-бора машинала йөрөүҙе һүрәтләгән хәрәкәттәр башҡара. Ишекте асып, пассажирҙы сығара, йә индерә. «Һаумыһығыҙ, ҡайҙа бараһығыҙ? Ултырығыҙ!». «Машинаны туҡтатығыҙ әле. Мин килеп еттем. Рәхмәт!» Ҡурсаҡтарҙы ултыртып, уйынсыҡ машиналар менән уйнап күрһәтә.

## Беренсе кескәйҙәр төркөмөндә уйнау күнекмәләренең формалашыуын яҡынса билдәләү күрһәткестәре

Ыҙғышмайса, үпкәләшмәйсә тиҫтерҙәре эргәһендә, аҙаҡ – улар менән бергә уйнай ала.

Бер предмет менән бер нисә уйын хәрәкәтен башҡара ала.

Үҙ-аллы уйын кәрәк-яраҡтарын һайлай башлай.

Уйындағы ролдең мәғәнәһенә төшөнә, сюжет буйынса хәрәкәттәрҙе бер-береһенә ҡушып башҡара башлай.

Башҡаларға ҡамасауламайынса сигнал буйынса хәрәкәтләнә белә.

Дидактик уйындарҙа 5-8 ҡулсанан торған төрлө ҙурлыҡтағы пирамидаларҙы үҙ-аллы ҡора ала.

Дүрт өлөштән торған сюжетлы киҫмә һүрәтте, йәки йыйылма кубикты бер бөтөн итеп йыя ала.

Бер төрлө предметтарҙы төҫө, формаһы, ҙурлығы буйынса сағыштыра, дөйөмләштерә, айыра белә.

## Икенсе кескәйҙәр төркөмө

Уйын кескәй йәштәге балаларҙың иң яратҡан һәм тәбиғи эшмәкәрлеге. Тәрбиәсенең бурысы булып балаларға уйындарҙың йөкмәткеһен һәм ҡағиҙәләрен асып биреү тора. Уйын балаларҙың балалар баҡсаһындағы бөтә төр эшмәкәрлегендә лә үткәрелә. Төрлө күңелле һәм күмәк уйындар иртәнге сәғәттәрҙә балаларҙың күңелен күтәрә, уларҙы бер-береһе менән яҡынлаштыра, ата-әсәләре менән айырылышыу минуттарын еңеләйтә.

Йыуыныу, туҡланыу, тышҡа сығырға йыйынған ваҡыттарҙа уйындар ҡулланыу балаларҙа көн тәртибенә яраҡлы үткәрелгән тәрбиәүи эш төрҙәрен үтәүгә ҡыҙыҡһыныу уята, әүҙемлекте, үҙаллыҡты үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Уйын дәрестәр үткәреүҙә лә төп сара булып тора.

Саф һауала ҡом, ҡар, һыу, төрлө предметтар һәм уйынсыҡтар ҡулланып, балаларға уларҙың үҙенсәлектәре һәм сифаттары, уларҙың тәғәйенләнеше тураһында төшөнсә биреү, тәжрибәләргә ҡыҙыҡһыныу уятыу ҙа уйын аша үткәрелә.

Тәрбиәсе менән бергә сюжетлы-ролле уйындар уйнау - балаларға көндәлек тормошта осраған ябай ғына күренештәрҙе аңларға, үҙҙәрен

уратып алған мөхиттә йәшәй белергә өйрәтә: "ҡурсаҡты йыуындырабыҙ", "ҡунаҡтар ҡаршылайбыҙ", "айыуға ашарға әҙерләйбеҙ" һ.б.

Уйындар балаларҙың ижади һәләтлелектәрен үҫтереүгә лә ҙур ярҙам итә.

# Хәрәкәтле уйындар

## Сысҡандар һәм бесәй

**Маҡсат:** балаларҙы сигнал буйынса хәрәкәт итеп уйнай белергә, уйын барышында бер-береһенә бәрелешмәй генә югерә белеү күнекмәләрен нығытыу. Етеҙлек, сослоҡ, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү. Сигнал буйынса хәрәкәт итә белеү күнекмәләрен нығытыу.

**Йыһаз:** эскәмйәләр, бесәй битлеге.

**Уйын ҡағиҙәһе:** сысҡандар бесәй йоҡлағас ҡына тороп, бүлмә буйлап йөрөй башлайҙар.

**Уйын барышы:** балалар-сысҡандар – үҙҙәренең өңдәрендә (ултырғыста, йә эскәмйәлә) ултыралар. Бүлмәнең, йәки майҙансыҡтың бер яғында мөйөштә бесәй (тәрбиәсе) ултыра.

Бесәй йоҡлаһа, сысҡандар сығалар. Бесәй уянып китә лә, мыяулап, сысҡандарҙы баҫтыра башлай. Улар өңдәренә югерәләр һәм урындарына ултыралар. Сысҡандар ҡасып бөткәс, бесәй үҙенең урынына ҡайта, тағы йоҡларға ята. Уйын ҡабатлана.

## Поезд

**Маҡсат:** балаларҙы бер-бер артлы хәрәкәт итергә, тәрбиәсенең сигналы буйынса туҡтай һәм ҡуҙғала белергә өйрәтеү; балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Уйын барышы:** балалар бер-бер артлы теҙеләләр. Иң беренсе бала – поезд, ҡалғандары – вагондар.

Тәрбиәсенең сигналы буйынса балалар алға табан хәрәкәт итә башлайҙар: башта яй ғына, унан – шәберәк, аҙаҡ – югереүгә күсәләр. Тәрбиәсе: "Поезд станцияға етеп килә", - ти. Балалар тиҙлекте яйлаталар

һәм туҡтайҙар. Тәрбиәсе һыҙғыртып сигнал бирә һәм поезд яңынан ҡуҙғала.

## Турғайҙар һәм бесәй

**Маҡсат:** балаларҙы бөтә майҙансыҡ буйлап тигеҙ хәрәкәт итергә, бейеклектән ике аяҡҡа һикереп төшөргә, кәүҙә торошоноң тигеҙлеген (равновесие) һаҡларға өйрәтеү. Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** бейеклеге 15 – 20 см булған эскәмйә, балаларҙа турғай башлыҡтары йәки түштәренә муйын аша кейелгән турғай һүрәттәре, бесәй битлеге.

**Уйын барышы;** балалар эскәмйәләрҙә торалар. Улар – ҡыйыҡтағы турғайҙар. Ситтәрәк бесәй ултыра. Тәрбиәсе: "Турғайҙар остолар", - тигәс, балалар эскәмйәнән һикереп төшөп, ҡулдарын ҡанат кеүек йәйеп, бөтә майҙан буйынса иркле югереп йөрөйҙәр. Бесәй уянып мыяулағас, турғайҙар ҡыйыҡҡа ҡасалар. Бесәй уларҙы баҫтыра. Тотолған бесәйҙәрҙе бесәй үҙенең өйөнә алып ҡайта. Уйын турғайҙар тотолоп бөткәнсе дауам итә.

## Йылға аша

**Маҡсат:** балаларҙы түңәрәктән – түңәрәккә һикерергә, һикергәндә кәүҙә торошоноң тигеҙлеген һаҡларға өйрәтеү. Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** бер-береһенән 1,5 – 2 м алыҫлығында һыҙылған ике һыҙыҡ йәки бау, ошо аралыҡта түңәрәктәр һыҙылған.

**Уйын барышы:** балалар һыҙыҡ янында торалар. Был – йылға яры. Улар йылғаны таштан ташҡа һикереп, аяҡтарын һыуламай үтергә тейештәр. Кем йылға аша сыҡҡанда ситкә баҫа – шулар ҡояшта аяҡтарын киптерә – эскәмйәлә ултыралар. Аҙаҡ улар уйынға яңынан ҡушылалар.

## Тупты тәгәрәт

**Маҡсат:** туптарҙы ҡапҡаларға тиклем тәгәрәтергә өйрәтеү. Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** төҫлө туптар, йә ҙур булмаған шарҙар (диаметры – 6 –8 см).

**Уйын барышы:** балаларға тәрбиәсе туптар бирә һәм ҡапҡаларға тиклем тәгәрәтергә тәҡдим итә. Балалар торған урындан ҡапҡаларға тиклем (арҡыры һалынған бау, аралыҡ 2 –3 м артмаҫҡа тейеш) тупты тәгәрәтәләр. Беренсе тапҡыр туп тәгәрәтеү килеп сыҡмаһа, бер нисә тапҡыр тәгәрәтеп ҡарарға мөмкинлек бирелә.

## Үҙеңдең өйөңдө тап

**Маҡсат:** арауыҡта юнәлеште таба белергә өйрәтеү. Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Уйын барышы:** балалар эскәмйәләрҙә, йә ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсенең сигналы буйынса улар майҙансыҡ, йә булмә буйлап ирекле йөрөйҙәр. Тәрбиәсе: "Өйгә ҡайттыҡ", - тигәс, балалар бөтәһе лә үҙҙәренең өйөнә – ултырғыстарына югерәләр. Уйын бер нисә тапҡыр ҡабатлана.

**Иҫкәрмә:** башта балалар арауыҡта юнәлеште насар тапһалар, ҡайһы ултырғысҡа булһа ла ултырырға рөхсәт ителә, аҙаҡ – тик үҙ урындарына ғына ултырырға тейештәр.

## Аттар

**Маҡсат:** балаларҙы  сигнал буйынса бөтә майҙансыҡ буйлап тигеҙ хәрәкәт итергә, аттар кеүек сабып хәрәкәтләнергә өйрәтеү. Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** башлыҡтар.

**Ҡағиҙәһе:** тәрбиәсе шиғырҙы уҡып бөтмәйенсә хәрәкәт итә башламаҫҡа.

**Уйын барышы:** балалар башлыҡтар кейеп, аттар булып торалар. Тәрбиәсе шиғыр уҡый:

Их! Атҡайым елдерә,
Бар ергә лә өлгөрә.
Елберләй ялы елгә,
Саң борҡоп ҡала ерҙә.

Шиғырҙы уҡып бөткәс, балалар аттар кеүек майҙансыҡ, йә бүлмә буйлап, һикереп китәләр. Тәрбиәсе: "Ҡайтығыҙ!" - тигәс, балалар унының янына йыйылалар. Уйын яңынан ҡабатлана.

## Ҡар бөртөгөн тот

**Маҡсат:** урында торған килеш ике аяҡлап өҫкә һикерергә, ергә дөрөҫ итеп төшөргә өйрәтеү. Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** оҙонлоғо 1 метр тирәһе булған таяҡ, осона 0,5 м оҙонлоғонда бау бәйләнгән, ә бауҙың осонда картондан ҡар бөртөгө.

**Уйын барышы:** балалар түңәрәккә бер-берешенә һуҙылған ҡулдар алыҫлығында теҙеләләр, уртаға йөҙҙәре менән торалар. Тәрбиәсе түңәрәктең уртаһында тора. Ул таяҡты түңәрәк буйлап балаларҙың башынан бер аҙ бейегерәк йөрөтә. Ҡар бөртөгө баштары өҫтөнән үткәндә, балалар һикереп, уны тоторға тырышалар. Кем тота, шул: "Мин тоттом", - тип әйтә. Уйын ҡабатлана.

## Ҡар бөртөктәре һәм ел

**Маҡсат:** балаларҙы сигнал буйынса хәрәкәт итергә, хәрәкәттәрҙең темпын үҙгәртергә, майҙансыҡ буйлап тигеҙ хәрәкәт итергә өйрәтеү. Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Уйын барышы:** балалар ҡар бөртөктәре булалар, тәрбиәсе: "Ел иҫә",- тиһә, улар майҙансыҡ буйлап өйөрөлөп-өйөрөлөп югереп йөрөйҙәр. "Ел тынды, ҡар бөртөктәре ергә төштөләр", - тигәндә, балалар сүкәйеп ултыралар.

## Кәрзингә ташла

**Маҡсат:** балаларҙы туптарҙы дөрөҫ ташларға өйрәтеү, күҙ ҡарашы ярҙамында арауыҡты һиҙемләүҙе, балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** туптар, кәрзиндәр.

**Уйын барышы:** балалар түңәрәк яһап торалар йәки һыҙыҡ буйлап теҙеләләр. Балаларҙан 1,5 – 2 м алыҫлыҡта кәрзин тора.Тәрбиәсенең сигналы буйынса балалар туптарҙы кәрзингә ташлайҙар. Шунан уларҙы алып, кире урындарына торалар. Уйын яңынан ҡабатлана.

## Ҡош һәм ҡошсоҡтар

**Маҡсат:** балаларҙы тәрбиәсенең сигналы буйынса бер-береһенә бәрелешмәй бөтә майҙансыҡ буйлап тигеҙ хәрәкәт итергә өйрәтеү. Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Уйын барышы:** тәрбиәсе балаларҙы уйнарға саҡыра һәм аңлата: "Мин ҡош булам, ә һеҙ – минең ҡошсоҡтарым". Ул ҙур түңәрәк һыҙа һәм: "Бына ниндәй ҙур беҙҙең оябыҙ, әйҙә инегеҙ", - ти. Балалар түңәрәккә инеп, сүкәйеп ултыралар. Тәрбиәсе: "Остоҡ, остоҡ, ем сүпләргә", - тигәс, ҡошсоҡтар бөтә майҙансыҡ буйлап югереп китәләр, әсәләре лә улар менән бергә оса. Шунан ул: "Өйгә остоҡ", - тигәс, ҡоштар түңәрәккә осалар.

## Сыйырсыҡ

**Маҡсат:** балаларҙы түңәрәк буйлап йөрөргә, йырҙың һүҙҙәрен башҡарып, хәрәкәт итергә һәм бейеү хәрәкәттәрен өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен, фекерләү һәләтен үҫтереү.

**Уйын барышы:** балалар араһынан "сыйырсыҡ" һайлана. Ҡалған балалар ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк буйлап, йырлап йөрөйҙәр, ә "сыйырсыҡ" уртала йоҡлап ултыра. Балалар йырлап бөткәс: "Сыйырсыҡ, ояңдан осоп сыҡ",- тип әйтәләр, ә "сыйырсыҡ" ҡулдары менән осҡан һымаҡ хәрәкәттәр эшләп, түңәрәк эсендә йөрөй. Йыр бөткәс, балалар туҡтайҙар һәм көй әйтеп (йә музыка менән) ҡул сабалар, ә "сыйырсыҡ" төрлө хәрәкәттәр менән бейей һәм кемгә баҫа – шул уның урынына "сыйырсыҡ" була. Уйын ҡабатлана. Йыр:

Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ,
Ояңдан осоп сыҡ.
Оҡшаһа был өйөң,
Түгелһен моң – көйөң!

## Келәттәге сысҡандар

**Маҡсат:** балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген үҫтереү, бау аҫтынан эйелеп үтергә өйрәтеү.

**Уйын барышы;** балалар-сысҡандар өңдәрендә ултыралар (ултырғыстарҙа, йәки эскәмйәлә). Ҡаршы яҡта 40 – 50 см бейеклегендә

бау һуҙылған, был – келәт. Ситтәрәк – бесәй ултыра (тәүҙә – тәрбиәсе, аҙаҡ – балалар).

Бесәй йоҡлағас та, сысҡандар келәткә югерәләр. Улар, бауға теймәҫ өсөн, унын аҫтынан эйелеп үтәләр. Келәттә улар ултырып, ашамлыҡты кимергән хәрәкәт эшләйҙәр. Бесәй уянып, сысҡандарҙы баҫтыра, ә улар өңдәренә ҡасалар. Бесәй йоҡоға китә, уйын яңынан башлана.

## Урманда

**Маҡсат:** балаларҙы түңәрәк буйлап, йыр йырлап, йырҙың һүҙҙәренә ярашлы төрлө хәрәкәттәр башҡарып уйнарға, хәрәкәттәр ярҙамында хайуандарҙы һүрәтләргә өйрәтеү.

**Уйын барышы:** балалар, ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк буйлап йырлап йөрөйҙәр:

Беҙ йыйылдыҡ уйынға,
Матур йәшел болонға,
Айыуҙар ҙа бар бында (айыу булып атлау),
Бүреләр ҙә бар бында(бүре булып атлау),
Төлкөләр ҙә бар бында (төлкө булып атлау),
Ҡуяндар ҙа бар бында (ҡуян булып һикереү),
Бигерәк күңелле беҙгә!

Йыр бөткәс, балалар бөтәһе бергә "сәпәкәй" итеп, урындарында тыпырлап бейеп ҡуялар. Уйнаған һайын хайуандарҙың төрөн үҙгәртергә була.

## Уйынсығыңды һаҡла

**Маҡсат:** балаларҙың иғтибарлылығын, етеҙлеген, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** һәр уйнаусыға кубиктар, йә башҡа уйынсыҡтар.

**Ҡағиҙәһе:** үҙенең уйынсығын һаҡлай алмаған бала уйындан сыға.

**Уйын барышы:** балалар түңәрәккә торалар, уларҙың аяҡтары еңелсә бер-береһенән айырылған, ҡулдары артта. Һәр баланың аяғы янында уйынсыҡ. Һанашмаҡ ярҙамында "көтөүсе" һайлана. Ул түңәрәк уртаһына сыға. "Уйын башлана", - тигән командаға көтөүсе балаларҙың

уйынсыҡтарын алырға тырыша. Көтөүсе кемгә юнәлә, шул бала сукәйеп, үҙенең уйынсығын ҡулдары менән ҡаплай. Көтөүсе янынан киткәс, бала тора. Уйынсығын һаҡлай алмаған бала уйындан сыға.

Көтөүсе 2 – 3 баланың уйынсығын алғас, яңы көтөүсе һайлана. Яңы көтөүсе һайланғас, уйындан сыҡҡан балалар яңынан түңәрәккә торалар.

## Дидактик уйындар

### Шарҙарҙы эл

**Маҡсат:** төҫтәр тураһында төшөнсә биреү. Төрлө предметтарҙы төҫтәре буйынса сағыштырып, берләштерергә өйрәтеү.

**Йыһаз:** картон (30 х 12 см), унда төҫлө ептәр төшөрөлгән. Ептәрҙең төҫө менән тура килгән картон түңәрәктәр – шарҙар .

**Уйын барышы:** тәрбиәсе балаларға ептәр төшөрөлгән картонды һәм шарҙарҙы күрһәтә: "Бөгөн беҙ һеҙҙең менән төҫлө шарҙар менән уйнайбыҙ. Һәр бер шарға үҙенең ебен табырға кәрәк. Ҡыҙыл епкә ҡыҙыл шар "бәйләйбеҙ", күккә – күк шар һәм шулай итеп бөтә шарҙарҙы ла бәйләйбеҙ". Тәрбиәсе үҙе картондағы ептәргә шарҙарҙы дөрөҫ һалырға өйрәтә. Төҫтәре тура килмәһә, уларҙы "бәйләргә ярамай" икәнлеген аңлата.

### Ҡайҙа һинең өйөң?

**Маҡсат:** геометрик фигуралар менән таныштырыу, улар тураһында төшөнсә биреү, ике предметтың фигураһын күҙ ҡарашы менән сағыштырып, танып белергә өйрәтеү, иғтибарлылыҡты, ҡарап хәтерҙә ҡалдырыу һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** балалар һанына етерлек бәләкәй карточкалар (6 х 8 см), уларға геометрик фигуралар төшөрөлгән: түңәрәк, өсмөйөш, квадрат һәм тура мөйөш. Ошо уҡ фигуралар төшөрөлгән дүрт ҙур карталар.

**Уйын барышы:** 4 балаға ҙур карталар бирелә, улар "өйҙәр" булып, иҙәндәге түңәрәктәргә торалар. Ҡалған балаларға бәләкәй карточкалар таратыла – был яңы өйҙәргә күсергә саҡырыу ҡағыҙы.

Үҙенең өйөн бутамаҫ өсөн, балалар үҙҙәренең карточкаларын иғтибар менән ҡарарға тейештәр. Балалар бер аҙ бүлмә буйлап хәрәкәт итәләр (кем машинала, кем поезда, кем атта барған хәрәкәттәр яһай). Ҙур карталы балалар был ваҡытта әле үҙҙәренең карталарын күрһәтмәйҙәр.

Тәрбиәсенең: "Туҡтаныҡ!" - тигән сигналы буйынса ҙур карталар күрһәтелә. Балалар туҡтап, үҙҙәренең өйҙәрен табырға тейештәр. "Ҡайҙа өйөгөҙ?" - тип һорағас, балалар үҙҙәренең өйҙәренә – ҙур карталы балалар янына, геометрик фигураларҙың тап килеүенә ярашлы бер урынға йыйылырға тейештәр.

Карточкаларҙы алмаштырып уйын яңынан башлана.

## Пирамидалар

**Маҡсат:** дәүмәл төшөнсәһе менән таныштырыу, пирамиданың ҡулсаларын (кольца) дөрөҫ тәртиптә өҫтәлгә теҙеп һалырға һәм йыйырға өйрәтеү.

**Йыһаз:** уйында ҡатнашыусы һәр бер балаға һәм тәрбиәсегә тик бер генә төҫтәге пирамидалар, төҫлө картон түңәрәк.

**Уйын барышы:** уйын 5 – 6 бала менән үткәрелә. Балалар өҫтәл артына ике яҡлап ултыралар, уларға пирамидалар таратыла. Тәрбиәсе һөйләй: "Бына пирамидалар тора. Улар тороп арығандар, ятҡылары килеп киткән. Пирамидаларға ял итергә ярҙам итәйекме?" Тәрбиәсе, үҙе башҡарған хәрәкәтте балаларға ҡабатларға ҡушып, пирамидаларҙың башлыҡтарын сисергә һәм уларҙы үҙҙәренә яҡынраҡ ҡуйырға тәкдим итә.

Тәрбиәсе: "Пирамиданың өҫтөндә ниндәй балдаҡ (ҡулса), ҙурмы әллә бәләкәйме?" Балаларҙың һәр береһе балдаҡтарҙы сисеп, башлыҡ янына һала. Өҫтәл уртаһында төҫлө түңәрәк ята, ә сиселгән пирамида балдаҡтары өҫтәл ситенән уртаға табан һалына. Шулай итеп, бөтә балдаҡтар ҙа алынып бөтөп, улар өҫтәлгә үҫеп барыу тәртибендә һалынғас, картон түңәрәк эргәһендә матур нурҙар барлыҡҡа килә. Был биҙәкте ҡарағандан һуң, тәрбиәсе балдаҡтарҙы дөрөҫ итеп кире йыйырға

тәҡдим итә: "Ҡайһы балдаҡ иң аҫта була? Дөрөҫ, иң ҙуры, унан бәләкәйерәге һ.б." Ошо тәртиптә пирамидалар киренән йыйылалар.

## Яңы ҡурсаҡ

**Маҡсат:** балаларҙа ҡурсаҡ менән уйнауға ҡыҙыҡһыныу уятыу. Кеше кәүҙәһенең төҙөлөшө тураһындағы белемдәрен асыҡлау: ҡул, аяҡ, баш, бармаҡтар, ҡолаҡтар, күҙҙәр, танау, ауыҙ  һ. б. Ҡунаҡсылыҡ тураһында ябай төшөнсәләр биреү. Телмәр үҫтереү, һүҙ байлығын байытыу.

**Йыһаз:** яңы ҡурсаҡ, сәй эсеү өсөн уйынсыҡ һауыт – һаба.

**Уйын барышы:** тәрбиәсе балаларҙы яңы ҡурсаҡ менән таныштыра. Балалар ҡурсаҡ менән һаулыҡ һорашалар, үҙҙәре менән таныштыралар. Тәрбиәсе ҡурсаҡҡа уйынсыҡтарҙы, төркөм бүлмәһен күрһәтергә тәҡдим итә. Балалар ҡурсаҡты сәй эсергә саҡыралар.

## Ҡайҙа нимә үҫә?

**Маҡсат:** йәшелсәләр менән емештәрҙе айырырға, уларҙы дөрөҫ атарға, төркөмләй белергә өйрәтеү. Балаларҙың фекерләү һәләтен, зиһенен, хәтерҙә һаҡлау һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** ҙур ике карта. Береһенең уртаһында – йәшелсә түтәле, икенсеһендә – емеш ағастары һүрәте. Йәшелсә һәм емеш төшөрөлгән бәләкәй карточкалар.

**Уйын барышы;** тәрбиәсе балаларға берәй емеш һүрәтен күрһәтә. Мәҫәлән: алманы һәм һорай: "Балалар, был нимә ул? Дөрөҫ, ул – алма, ул ағаста үҫә. Шуның өсөн уны ошо картаға ҡуябыҙ. Ә был нимә? Әйе, ҡыяр, ҡыяр – йәшелсә. Йәшелсәләр ҡайҙа үҫә? Дөрөҫ, түтәлдә. Тимәк, ҡыярҙы ошо картаға ҡуябыҙ, сөнки бында түтәл һүрәте төшөрөлгән" (тәрбиәсе үҙеп ҡуйып күрһәтә).

Балалар бергәләп сығып, өҫтәлдән һүрәттәрҙе алып, йәшелсәме, әллә емешме икәнен, ҡайҙа үҫкәнен әйтәләр ҙә ҙур картаға ҡуялар. Бала ҡыйынһынһа, тәрбиәсе икенсе балаларҙың ярҙам итеүен һорай.

## Сысҡанға йәшенергә ярҙам ит

**Маҡсат:** балаларҙы төҫтәр менән таныштырыу, төҫтәрҙе сағыштырырға өйрәтеү, иғтибарҙы, фекерләү һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** төрлө төҫтәге тура мөйөшлө карталар. Уларҙың уртаһында түңәрәк ҡырҡылған һәм аҫ яғынан сысҡан һүрәте төшөрөлгән аҡ ҡағыҙ йәбештерелгән. Карталар төҫөндәге һымаҡ уҡ квадраттар (ишектәр), улар һаны карталар һанына тап килә һәм улар карталарҙағы түңәрәктәрҙе ҡаплай алалар.

**Уйын барышы:** тәрбиәсе балаларға уйынсыҡ бесәйҙе күрһәтә - ул һунарға сыҡҡан. Сысҡандарҙы йәшерер өсөн, тәҙрәләрҙе өй төҫөндәге ишектәр менән ҡапларға кәрәк, шул саҡта бесәй тәҙрәне күрмәйәсәк. Балаларға бесәй йоҡлаған саҡта, сысҡандарға йәшенергә ваҡыт бирергә кәрәк.

## Ошондай уҡ формалағы предметты тап

**Маҡсат:** балаларҙы тирә-яҡтағы предметтарҙың формаһы менән таныштырыу, предметтарҙың формаларын геометрик фигуралар менән сағыштырыу.

**Йыһаз:** геометрик фигуралар (түңәрәк, квадрат, овал, өсмөйөш, тура мөйөш), түңәрәк предметтар (туп, төймә), квадрат (куб, ҡулъяулыҡ), өсмөйөш (төҙөлөш материалы, косынка, өй ҡыйығы), овал (йомортҡа, ҡыяр, шар).

**Уйын барышы:** геометрик фигуралар беренсе өҫтәлдә ята, икенсеһендә – предметтар. Тәрбиәсе балаларға өҫтәлдәге предметтарҙы күрһәтә. Башта бер фигураны күрһәтә һәм икенсе өҫтәлдән ошондай уҡ формалағы предметты табырға тәҡдим итә.

Балалар хаталана икән, тәрбиәсе уларға фигураны һәм предметты бармаҡ менән йөрөтөп ҡарарға тәҡдим итә.

## Кубтарҙан манара

**Маҡсат:** балаларҙы бер нисә предметты ҙурлыҡтары буйынса сағыштырырға һәм уларҙы кәмей барыу тәртибендә урынлаштырырға өйрәтеү. Өс күрше предметты сағыштырып, һүҙ менән әйтергә өйрәтеү: "ҙур", "бәләкәйерәк", "иң бәләкәй".

**Йыһаз:** ҙурлыҡтары төрлө булған 5 куб (иң ҙурының бейеклеге – 10 см, иң бәләкәйенең – 2 см).

**Уйын барышы:** балалар кубтарҙы ҡарайҙар, бәләкәйен ҙурына һалалар. Улар әгәр ҡыйынһынһалар, тәрбиәсе манара төҙөй һәм һөйләй: "Иң ҙур кубҡа бәләкәйерәкте һалабыҙ, уның өҫтөнә тағы ла бәләкәйерәген. Шулай итеп, кубтар бөткәнсе һалып, манара төҙөйбөҙ. Әгәр манара дөрөҫ йыйылһа, ул ныҡ тора, ҡоламай". Тәүҙә манараны балалар тәрбиәсе ярҙамында төҙөйҙәр, аҙаҡ – үҙаллы эшләйҙәр. Кубтарҙан манара төҙөп өйрәнгәс, уны картон фигураларҙан өҫтәлдә һалырға мөмкин.

## Урманда нимә йәшәй?

**Маҡсат:** балаларға ҡыр хайуандары тураһында белем, уларҙың кәүҙә төҙөлөшө, йәшәү рәүеше тураһында төшөнсә биреү. Балаларҙың һүҙ байлығын үҫтереү, иғтибарлылыҡ, тапҡырлыҡ, ҡыҙыҡһыусанлыҡ һыҙаттары тәрбиәләү.

**Йыһаз:** уйынсыҡ айыу, фланелеграф, уның өсөн һүрәттәр - айыу, төлкө, ҡуян, ағастар.

**Уйын барышы:** тәрбиәсе: "Бөгөн беҙгә ҡунаҡҡа айыу килде. Ҡарағыҙ әле, ниндәй ул: һоро, ҙур, йомшаҡ, йылы. Айыуҙың нимәләре бар? (күҙҙәре, ҡолаҡтары, танауы, аяҡтары йәки тәпәйҙәре). Айыу беҙҙе урманға саҡыра."

Балалар поезда барған хәрәкәттәр эшләйҙәр һәм фланелеграф алдына барып ултыралар. Тәрбиәсе: "Бына беҙ урманға килдек. Бында ағастар күп (ағас һүрәттәрен ҡуя – шыршы, ҡайын, имән)". Балаларҙан ағастарҙың атамаларын әйттерә. Әйтә алмаһалар, үҙе ярҙамлаша. "Урманда нимә йәшәй? (һүрәт ҡуя). Дөрөҫ, айыу. Ул нисек ҡысҡыра? Нимә ашарға ярата? Эйе, еләк, бал ярата, балыҡ та тота. Йәй көнө урман

буйлап йөрөй, ә ҡыш, ҡар һәм һыуыҡ булғанда – ул йоҡлай. Тағы ла урманда нимә йәшәй? Эйе, ҡуян. Ҡуяндың ҡолаҡтары оҙон һ.б."

Ошо рәүешле уйында хайуандарҙы алыштырырға мөмкин.

Уйын аҙағында балалар поезд менән балалар баҡсаһына ҡайталар.

## Ҡурсаҡтың бүлмәһе

**Маҡсат:** балаларҙы бүлмә йыһаздарын айырырға һәм дөрөҫ әйтергә өйрәтеү. Һәр предметтың тәғәйенләнеше тураһында аңлатыу һәм был төшөнсәләрҙе нығытыу. Балаларҙың һүҙ байлығын, бәйләнешле телмәрен үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ, уйынсыҡ бүлмә йыһаздары - өҫтәл, карауат, ултырғыс.

**Уйын барышы:** балалар өҫтәл янына ултыралар. Тәрбиәсе буш өҫтәлде күрһәтә: «Был беҙҙең ҡурсаҡ Айгөлдөң бүлмәһе була. Ул ошонда йәшәйәсәк. Әйҙә, унан һорайыҡ әле, бүлмәһе оҡшаймы, юҡмы? Юҡ, оҡшамай уға бүлмә. Балалар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн оҡшамай икән? Эйе, сөнки бында бүлмә йыһаздары юҡ. Өҫтәл юҡ. Ултырғыс юҡ. Карауат юҡ. Балалар, ә карауат ҡурсаҡҡа ни өсөн кәрәк? Дөрөҫ, ул карауатта йоҡлаясаҡ. (Тәрбиәсе өҫтәлгә карауат ҡуя). Ят, Айгөл, ошо карауатҡа, йоҡла. Ҡурсаҡ йоҡлаған саҡта, беҙ уның бүлмәһенә бүлмә йыһаздары ҡуяйыҡ. Балалар, нимәләр ҡуяйырға кәрәк, ярҙам итегеҙ әле.

Балалар бүлмә йыһаздарын һанап сығалар һәм ни өсөн кәрәк икәнлектәрен аңлаталар. Бүлмә йыһаздарын ҡуйып бөткәс, ҡурсаҡ уяна. Ул бүлмәһенә ҡыуана, балаларға бүлмә йыһаздарының ни өсөн кәрәклеге тураһында һорау бирә, ә балалар уның һорауҙарына яуап бирәләр. Аҙаҡ балалар ҡурсаҡ менән уйнайҙар.

## Айыуҙы кейендер

**Маҡсат:** төп төҫтәр менән таныштырыу, төҫтәрҙе ҡабатлау, нығытыу. Балаларҙың һүҙ байлығын, бәйләнешле телмәрен үҫтереү.

**Йыһаз:** һәр балаға 4-әр карта. Уларҙа айыуҙар төшөрөлгән. Айыуҙарҙың башлыҡтары төрлө төҫтә (ҡыҙыл, күк, йәшел, һары). Ошо уҡ төҫтәрҙә кейем силуэттары (футболка, салбар).

**Уйын барышы:** тәрбиәсе балаларға карталарҙы таратып бирә һәм айыуҙарға кейемдәрен табырға ярҙам итергә тәҡдим итә.

Айыуҙарҙың бөтә кейемдәре лә башлыҡтар төҫөнә тура килергә тейеш.

## Балаҫты яма

**Маҡсат:** геометрик фигуралар менән таныштырыу, фигураларҙы сағыштырырға, табырға һәм дөрөҫ әйтергә өйрәтеү. Балаларҙың һүҙ байлығын, бәйләнешле телмәрен үҫтереү.

**Йыһаз:** балалар һаны буйынса карталар, уларҙа геометрик фигуралар киҫелгән (квадрат, түңәрәк, өсмөйөш). Ошо киҫелгән тишектәр ҙурлығында геометрик фигуралар.

**Уйын барышы:** тәрбиәсе балаларға карталарҙы таратып бирә - был балаҫтар. Балаҫтарҙы сысҡан тишеп бөткән, уларҙы ямарға кәрәк. Тәрбиәсе: "Һәр бер тишекте ямар өсөн кәрәкле ямау бар. Яҡшы итеп уларҙы ҡарап, балаҫтағы тишек өҫтөнә һалып сағыштырып, дөрөҫ итеп ямарға кәрәк", - тип аңлата. Шунан бергәләп фигураларҙың исемен әйтәләр һәм балаҫтарҙы "ямайҙар".

## Ҙурыраҡ – бәләкәйерәк

**Маҡсат:** балаларҙы предметтарҙың ҙурлыҡтарын сағыштырырға, уларҙы үҫә барыу, йә кәмей барыу тәртибендә һәм сиратлаштырып теҙә белергә өйрәтеү. Балаларҙың һүҙ байлығын, бәйләнешле телмәрен үҫтереү.

**Йыһаз:** төрлө ҙурлыҡтағы предметтар, уйынсыҡтар, туптар.

**Уйын барышы:** тәүҙә тәрбиәсе балаға иң ҙур тупты биреүен һорай. Әгәр бала тупты яңылыш бирһә, тәрбиәсе аңлата, ҙур һәм бәләкәй туптарҙы бер-береһе менән сағыштырырға өйрәтә. Өҫтәлдә балалар иң ҙур предметтан башлап, кәмей барыу тәртибендә, йә киреһенсә, бәләкәй

туптан башлап теҙәләр. Шулай уҡ тәрбиәсе ҙур һәм бәләкәй туптарҙы бер-бер артлы сиратлап теҙергә тәҡдим итә.

## Дүртенсе артыҡ

**Маҡсат:** балаларҙы предметтарҙың төп үҙенсәлектәре менән таныштырыу, уларҙы төркөмләргә өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, фекерләү ҡеүәтен, һүҙ байлығын, бәйләнешле телмәрен үҫтереү.

**Йыһаз:** фланелеграф, бер дөйөм төшөнсәне аңлатҡан өсәр һүрәт - 3 йәшелсә, 3 йорт хайуаны, 3 һауыт – һаба һ.б.

**Уйын барышы:** тәрбиәсе фланелеграфҡа бер рәткә дүрт һүрәт ҡуя, уларҙың өсәүһе бер төркөмдән, ә дүртенсеһе – икенсенән. Мәҫәлән: өҫтәл, ултырғыс, карауат һәм сынаяҡ. Балаларға артыҡ предметты табырға тәҡдим ителә. Балалар ҡыйынһынһа, тәрбиәсе был һүрәттәрҙе төркөмләп, бер һүҙ менән әйтергә тәҡдим итә: өҫтәл, ултырғыс, карауат – йорт йыһаздары, ә сынаяҡ – һауыт-һаба. Тимәк, артыҡ һүрәт – сынаяҡ.

Шулай уҡ, кәзә, һыйыр, ат – йорт хайуандары, ә бүре – ҡыр хайуаны, тимәк, бүре – артыҡ.

Уйын ошолай дауам итә.

## Һүрәт төҙөйбөҙ

**Маҡсат:** балаларҙы өлөштәрҙән бөтөн предмет төҙөргә өйрәтеү, ныҡышмалылыҡ, маҡсатҡа ынтылыш тәрбиәләү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, фекерләү ҡеүәтен, һүҙ байлығын, бәйләнешле телмәрен үҫтереү.

**Йыһаз:** фланелеграф, йәшелсә һүрәттәре (алма, помидор, груша, ҡыяр һ.б.) һәм ҡумтала был һүрәттәрҙең төрлөсә бүленгән киҫәктәре – өлөштәре.

**Ҡағиҙәһе:** өлөштәрҙе һайлап алғанда - яңылышмаҫҡа. Кем иң беренсе үҙенең һүрәтен йыя һәм әйтә – шул еңеүсе була.

**Уйын барышы:** ҡумтала төрлө предметтар төшөрөлгән һүрәттәр ята. Тәрбиәсе алаларҙы һүрәттәр менән таныштыра. Унда нимә төшөрөлгәнен бергәләп билдәләйҙәр.

Шунан тәрбиәсе бер һүрәттең өлөшөн күрһәтә һәм һорай:

- Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, был ниндәй һүрәттең өлөшө?
- Алманың өлөшө, - тип яуап бирә балалар.

Тәрбиәсе был өлөштө алма һүрәтенең өҫтөнә һала һәм алманың башҡа өлөштәрен табырға тәҡдим итә. Балалар тәрбиәсе менән берлектә эҙләп, алма һүрәтенең бөтә өлөштәрен дә табып, алма һүрәтен тулыһынса ҡаплайҙар. Тәрбиәсе:

- Ҡарағыҙ әле, балалар, бөтөн алма килеп сыҡты. Хәҙер мин һеҙгә бөтәгеҙгә лә һүрәттәр бирәм: Ләйсәнгә – помидор, Айгөлгә – груша һ.б. Һеҙ өлөштәрен табып, шундай уҡ һүрәт төҙөгөҙ.

Балалар өлөштәрҙе эҙләп табып, һүрәттәрҙе төҙөйҙәр. Балалар төҙөп өйрәнгәс, тәрбиәсе бөтөн һүрәт түгел, ә уның бер өлөшөн генә бирә, ә балалар ниндәй һүрәт төҙөргә кәрәк икәнлеген белергә тейеш.

- Минеке алма һүрәте була, - тип әйтә бер бала.
- Һин төҙө, ә беҙ ҡарарбыҙ, - ти тәрбиәсе.

Тәрбиәсегә уйынға ярыш элементы индерергә мөмкин: кем тәүҙә эшләй, шул – еңә һәм фишка ала. Һүрәтте алты өлөшкә бүлергә мөмкин, йә һүрәттә бер предмет түгел, ә сюжет булырға мөмкин: ҡуян кишер ашай, йоморо икмәк менән төлкө һөйләшеп торалар һ.б.

## Сюжетлы - ролле уйындар

### Дауахана

**Маҡсат:** табиптың эше тураһында төшөнсә биреү. Уның эш ҡоралдары һәм эш хәрәкәттәре тураһындағы белемде нығытыу: ауырыған кешегә табип саҡырырға кәрәклеген, ауырыуға ҡарата иғтибарлы булырға, уны дауаларға кәрәк икәнлеген аңлатыу.

Балаларға ғаилә ағзалары (әсәй, атай, һеңле, ҡусты) ролдәренә инеп һәм уларҙың ауырып китеүен сағылдырған уйындар уйнарға өйрәтеү.

**Һүҙлек эше:** табип, дауахана, дауалай, дарыу, ауырыу.

**Йыһаз:** карауат, түшәк кәрәк-яраҡтары, телефон, дауахана өсөн картондан йәки пластмассанан эшләнгән уйын кәрәк-яраҡтары: градусник, йөрәк тибешен тыңлау өсөн фонендоскоп, тамаҡ төбөн

ҡарарға шпатель (ҡалаҡ) һ.б. йә иһә уларҙы алыштырған предметтар, аҡ халат һәм башлыҡ.

## Уйынсыҡтар магазины

**Маҡсат:** балаларҙа һатыусының эшенә ҡыҙыҡһыныу уятыу, уның эшенә ихтирам тәрбиәләү. Йәмәғәт урындарында үҙ-үҙеңде дөрөҫ тотоу ҡағиҙәләре менән таныштырыу: магазинға ингәс, һаулыҡ һорашырға, үҙенә кәрәкле уйынсыҡты һатыусынан һорап ала белергә өйрәтеү. Һорауҙарҙы тыңлай һәм уларға яуап бирә белергә  өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен, фекерләү һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** уйын мөйөшөндә йыһазландырылған "Магазин", унда төрлө-төрлө уйынсыҡтар.

**Уйын барышы:** Иң тәүҙә тәрбиәсе үҙенә һатыусы ролен ала, аҙаҡ балаларҙың береһен һатыусы итеп ҡуя. Тәрбиәсе балаларға уйынсыҡ магазинына килеп, үҙҙәренә оҡшаған уйынсыҡтарҙы һатып алырға тәҡдим итә. Магазинға ингәндә балалар һаулыҡ һорашалар.Үҙҙәренә оҡшаған уйынсыҡтың нисек аталғанын әйтеп, "һатып" алғас, рәхмәт әйтеп, һаубуллашып, магазиндан сығып китәләр.

## Тыуған көн

**Маҡсат:** балаларҙы ябай сюжеттар башҡарып уйнарға, бер нисә уйын хәрәкәттәрен бер сюжетҡа берләштерә белергә, тиҫтерҙәре менән үҙ-ара татыу уйнарға өйрәтеү. Һауыт-һаба, аҙыҡ-түлек, йорт йыһаздары тураһындағы белемдәрен нығытыу. Һүҙлекте байытыу: ҡотлау, һыйлау, ҡунаҡ һыйлау, ҡыуандырыу. Балаларҙы теләк теләй белергә, бүләктәр бирергә, һорауҙарҙы тыңлай һәм уларға яуап бирә белергә өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен, фекерләү һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** балсыҡтан, пластилиндан, тоҙло ҡамырҙан яһалған ("бешерелгән") ҡамыр аштары, һауыт-һаба, ҡурсаҡтар һәм уйынсыҡтар.

### Ғаилә

**Маҡсат:** балаларҙы ябай сюжет буйынса уйнай, уйын барышында үҙ-ара бәйле булған бер нисә эш хәрәкәтен башҡара белергә өйрәтергә (аш

бешерә, өҫтәл әҙерләргә, һауыт-һаба йыуырға). Атай мал ҡарай: бесән бирә, һыу эсерә, һарайҙы таҙарта.

Сюжет буйынса төрлө роль башҡарған 2-3 баланы кәңәшләшеп уйнарға өйрәтеү (әсәй – ҡыҙы, атай – улы, ҡартатаһы). Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атарға (әсәй, атай, апай, ағай, ҡартатай, өләсәй, һеңле, ҡусты) һәм улар башҡарған эш-хәрәкәттәрҙе башҡарып уйнарға өйрәтеү. Өлкәндәрҙең эшенә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен, фекерләү һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** уйынсыҡ бүлмә йыһаздары, һауыт-һаба, кейем-һалым, ҡурсаҡтар, түшәк-юрған, йәки уларҙы алмаштырыусы предметтар.

## Сәс алыусы

**Маҡсат:** балаларҙы сәс алыусының эше менән таныштырыу, уның эшенең кәрәклеген, әһәмиәтен аңлатыу. Уға кәрәкле эш ҡоралдары: алъяпҡыс, япма, тараҡ, ҡайсы менән дөрөҫ эш итергә өйрәтеү. Үҙ-үҙҙәрен йәмғиәт урындарында дөрөҫ тота белеү күнекмәләрен тәрбиәләү. Балаларҙа бөхтәлек, матурлыҡ, иплелек һыҙаттары тәрбиәләү.

**Һүҙлек эше:** балаларҙың һүҙ байлыҡтарын яңы һүҙҙәр менән байытыу: көҙгө, ҡайсы, тараҡ, япма. Һөйләү телмәрен, фекерләү һәләтен, хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** алъяпҡыс, япма, картондан йәки пласмассанан эшләнгән тараҡ, ҡайсы, трюмо.

**Уйын барышы:** уйын алдынан тәрбиәсе балалар менән сәс алыусы эше тураһында әңгәмә үткәрә, һүрәттәр күрһәтә. Кемдең парикмахерскаяға барғаны, нисек сәсен киҫтергәне тураһында һөйләшәләр. Шунан тәрбиәсе балаларҙы парикмахерскаяға сәс алдырырға саҡыра. Балалар ингәндә һаулыҡ һорашырға, кешеләр күп булһа, ултырғыстарҙа ултырып, көтөп торорға икәнлеген аңлата. Тәрбиәсе алъяпҡыс кейеп, килгән балаларҙы көҙгө алдына ултыртып, уларға япма бәйләп, матур итеп сәстәрен ала (киҫә): нисек итеп тараҡ, ҡайсы менән эш итергә кәрәклеген күрһәтә.

### Шофер ҡурсаҡты машинала йөрөтә

**Маҡсат:** балаларҙы машина йөрөтөүсе һөнәре менән таныштырыу, уның эшенең кәрәклеген, әһәмиәтен аңлатыу. Уға кәрәкле эш ҡоралдары: машина һәм уның идара итә торған өлөштәре менән (руль, кабина ишеге, ишек тотҡаһы) дөрөҫ эш итергә өйрәтеү. Кешеләрҙе (ҡурсаҡтарҙы) машинала йөрөткәндә юл ҡағиҙәләрен үтәү, ишекте асып ултыртырға, ишек тотҡаһынан тотоп матур итеп ябыу, машинаның фараларын яндырыу, ҡуҙғалып китер алдынан сигнал биреү тураһында аңлатыу һәм үтәргә өйрәтеү. Ҡурсаҡтарҙан ҡайҙа барыуҙары тураһында белешергә өйрәтеү. Балаларҙы бер-береһенә иғтибарлы, ихтирамлы булырға өйрәтеү

**Һүҙлек эше:** балаларҙың һүҙ байлыҡтарын яңы һүҙҙәр менән байытыу: руль, кабина, ишек тотҡаһы, сигнал, светофор. Һөйләү телмәрен, фекерләү һәләтен, хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** пластмассанан эшләнгән рулдәр, уйынсыҡ машиналар, ҡурсаҡтар, йомшаҡ модуль ҡорамалдар.

**Уйын барышы:** уйын алдынан тәрбиәсе балалар менән шофер эше тураһында әңгәмә үткәрә, һүрәттәр күрһәтә. Шунан тәрбиәсе балалар менән бергә машинала ҡурсаҡтарҙы йөрөтә. Светофор ҡуя, юл эшләй, ябай ғына юлда йөрөү ҡағиҙәләре менән таныштыра.

Юлда йөрөгәндә светофорҙың сигналына ҡарап йөрөү кәрәклеген аңлата. Машинала ултырып барғанда ла үҙ-үҙеңде тота белеү кәрәклегенә төшөндөрә.

## Икенсе кескәйҙәр төркөмөндә уйнау күнекмәләренең формалашыуын яҡынса билдәләү күрһәткестәре

Бер-береһен яҡын күргән 2-3 баланан торған төркөмсәләргә инеп, үҙе ятраҡан уйындарҙы бергәләп уйнай ала.

Уйын барышында ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәй белә (этешмәй, төртөшмәй, уйынсыҡтарҙы тартып алмай, ҡоролмаларҙы боҙмай уйнай).

Ролде үҙе һайлап ала һәм роль буйынса уйында үҙ-ара бәйле булған бер нисә хәрәкәтте башҡара ала.

Уйында үҙе һәм икенсе персонаж булып тейешле эш-хәрәкәтте башҡара белә.

Уйын кәрәк-яраҡтарын үҙ-аллы һайлай һәм төрлө предметтар менән тултыра ала.

Театрлаштырылған уйында сюжет үҫешен һиҙемләй башлай: персонаждың таныш хәрәкәттәрен отоп алып, ҡабатлап күрһәтеп уйнай.

Өҫтәл ҡурсаҡтарының хәрәкәттәрен ҡабатлап башҡара, уларҙы йырлап һәм бейеү хәрәкәттәрен ҡушып башҡара белә.

Ябай ғына сюжетлы әҫәрҙәрҙе уйнап күрһәтә ала башлай.

Уйын ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәп, хәрәкәттәрҙе тап килтереп уйнай.

Төҫө, ҙурлығы, күләме буйынса предметтарҙы дөрөҫ һайлай.

4-6 өлөштән торған сюжетлы киҫмә һүрәттәрҙе бер бөтөн итеп йыя ала.

## Уртансы төркөм

### Хәрәкәтле уйындар

Уйын эшмәкәрлеге урта төркөм балаларының тормошонда ҙур урын биләп тора. Уртансы төркөмдә уйындар яңыра, ҡатмарлаша. Уйындарҙа балаларҙың сәләмәтлеген нығытыу дауам ителә, кәүҙәне дөрөҫ тотоуға, әҙәп-гигиена ҡағиҙәләренә өйрәтеүгә, организмды нығытыуға төрлө күнекмәләр үткәрелә. Балалар мәргәнлеккә, сослоҡҡа өйрәнә, ҡул хәрәкәттәренең етеҙлеге үҫтерелә.

Хәрәкәтле һәм халыҡ уйындары балаларҙа дуҫлыҡ тойғоһо, үҙ көсөнә ышаныу, иғтибарлылыҡ, сослоҡ, түҙемлелек тәрбиәләй.

### Самолеттар

**Уйын маҡсаты:** бөтә майҙан буйлап бәрелешмәй хәрәкәт итергә, югерергә күнекмәләр, иғтибарҙы, етеҙлекте үҫтереү. Сигнал буйынса хәрәкәт итергә өйрәтеү.

**Барышы:** балалар 3-4 рәткә теҙеләләр. Улар – осоусылар. Тәрбиәсенең "Осоуға әҙерләнергә!" - тигән сигналы буйынса улар ҡулдары менән мотор әйләнгән хәрәкәттәр эшләйҙәр. "Осоғоҙ!"- тигәс, балалар ҡулдарын йәйеп,

ирекле "осоп" йөрөйҙәр. "Ултырырға!" - тигән сигнал буйынса балалар колонналарға теҙеләләр һәм бер тубыҡтарына сүгеп ултыралар.

Тәрбиәсе ҡайһы колонна алдан теҙелә, шуны билдәләй. Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана.

**Айыу – бүре юҡ икән**

**Уйын маҡсаты:** бөтә майҙан буйлап бәрелешмәй хәрәкәт итергә, югерергә күнекмәләр, иғтибарҙы, етеҙлекте үҫтереү. Телмәр үҫтереү. Сигнал буйынса хәрәкәт итергә өйрәтеү.

**Барышы:** балалар араһынан айыу һайлана. Бер яҡ ситтә балаларҙың өйө була. Балалар өйҙән сығып, бергәләшеп, айыу торған яҡҡа еләк йыйырға китәләр. Күмәкләп йырлайҙар:

Еләк йыям, ҡаҡ ҡоям,
Әсәйемә бүләккә.
Бында еләк күп икән,
Айыу – бүре күп икән.

Шул ваҡытта айыу югереп сығып, балаларҙы баҫтыра башлай. Балалар унан ҡасып, үҙ өйҙәре яғына югерә. Тотолған бала айыу була. Уйын яңынан башлана.

**Йылға аша һикереп сыҡ**

**Уйын маҡсаты:** урындан алға табан һикереүгә күнекмәләр. Һикергәндә ергә дөрөҫ төшөргә, кәүҙә торошоноң тигеҙлеген һаҡларға өйрәтеү.

**Барышы:** майҙансыҡта бер осо нәҙек, ә артабан киңәйә барған йылға һыҙыла (10 см – ҙан 40 см – ға тиклем). Балаларға йылға аша һикерергә тәҡдим ителә, башта – нәҙек осонан, шунан – киңерәк урындан, аҙаҡ – иң киң еренән. Тәрбиәсе иң киң ерҙән һикерә алған балаларҙы билдәләй.

**Балдаҡты (ҡулсаны) ташла**

**Уйын маҡсаты:** 1,5 – 2 м алыҫлыҡтан балдаҡтарҙы (ҡулсаларҙы) төҙләп, сәпкә ташларға өйрәтеү, күҙ ҡарашы ярҙамында аралыҡты билдәләй белеүҙе, мәргәнлекте үҫтереү.

**Йыһаз:** балдаҡтар (ҡулсалар), ҡулсаларҙы ташлау өсөн фигуралар (фил, ҡаҙ, тәпәйен күтәреп ултырған ҡуян йәки таяҡсалар).

**Барышы:** фигуранан 1,5 – 2 м алыҫлығында һыҙыҡ һыҙыла, балалар ошо һыҙыҡтан балдаҡтарҙы ташлайҙар. Тәрбиәсе дөрөҫ торорға, балдаҡты дөрөҫ ташларға өйрәтә.

**Йәшерәм яулыҡ**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген үҫтереү, башҡорт халыҡ уйыны менән таныштырыу.

**Барышы:** балалар түңәрәк яһап ултыралар, араларынан көтөүсе һайлана. Ул ҡулына яулыҡ ала. Балалар йырлайҙар:

Йәшерәм – йәшерәм яулығымды,

Йәшел ҡайын аҫтына.

Һиҙҙермәйсә һалып китәм

Бер иптәшем артына.

Көтөүсе булған бала түңәрәкте уратып йөрөй һәм бер уңайлы ваҡытта һиҙҙермәй генә яулыҡты бер иптәшенең артына һалып китә. Ә үҙе һаман яулыҡты йәшереп тотҡан һымаҡ йөрөй.

Артында яулыҡ ятҡан бала, көтөүсе түңәрәкте әйләнеп килгәнсе, үҙенең артында яулыҡ ятҡанын һиҙмәй ултырһа, көтөүсе уның янына килеп еткәс, яулыҡты ала ла уға яулыҡ менән һуға. Был бала көтөүсе булып ҡала.

Әгәр ҙә түңәрәктәге бала артына яулыҡ һалынғанын һиҙеп ҡалһа, ул тиҙ генә тороп, көтөүсе артынан югерә. Ә көтөүсе, яулыҡтан һуғылмаҫ өсөн, түңәрәк буйлап югереп, иптәшенең урынына ултырырға тырыша. Әгәр ултырып өлгөрмәһә, ул тағы көтөүсе була һәм уйын яңынан башлана.

**Турғайҙар һәм автомобиль**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген үҫтереү; уйын ваҡытында югереүгә, һикереүгә күнекмәләр үткәреү; һикергәндә ике аяҡка дөрөҫ төшөргә, сигнал менән хәрәкәт итергә өйрәтеү.

**Йыһаз:** машина рулдәре, эскәмйә (10 – 15 см бейеклектә).

**Барышы:** балалар араһынан автомобиль һайлана. Турғай булған балалар эскәмйәләрҙә торалар. Тәрбиәсенең сигналы буйынса улар һикереп төшөп, майҙансыҡ буйлап ирекле югереп, ҡулдарын йәйеп, һикереп йөрөйҙәр. Автомобиль килеп сыҡҡас, турғайҙар ояларына ҡасалар. Уйын ҡабатлана.

**Үҙеңә пар тап**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** 2 төҫтәге бәләкәй байраҡтар.

**Барышы:** балаларға берешәр кескәй байраҡ таратып бирелә: ярты төркөмгә бер төҫлө, икенсе яртыһына – икенсе төҫлө.

Сигнал буйынса балалар таралып югерәләр. "Парҙарығыҙҙы табығыҙ!" - тигән сигнал буйынса бер төҫлө байраҡтары булған балалар бер урынға, икенсе төҫтәге байраҡтар тотҡан балалар икенсе урынға йыйылалар. Ҡайһы төркөм алдан йыйыла, ул – еңеүсе. Сигнал буйынса уйын бер нисә тапҡыр ҡабатлана.

**Тупты бау аша ташла**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙың иғтибарын, мәргәнлеген, ҡул хәрәкәтенең етеҙлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** ҙур туп, балаларҙың күкрәк тәңгәлендә һуҙылған бау, бауҙан 1 м алыҫлыҡта ике яҡтан да һыҙыҡ һыҙылған.

**Барышы:** балалар ике яҡтан һыҙыҡ буйлап ҡапма-ҡаршы теҙеләләр. Ситтә торған баланың береһенә туп бирелә. Тәрбиәсенең сигналы буйынса, ул ҡаршыһында торған балаға туп ташлай (бау аша).

Тупты тотҡан бала ҡаршы яҡтан икенсе торған балаға тупты ташлай, уйын шулай дауам итә. Тәрбиәсе хаталарын әйтеп, өйрәтеп тора.

**Сәп**

**Уйын маҡсаты:** мәргәнлекте, ҡул хәрәкәттәренең етеҙлеген, ҡараш ярҙамында аралыҡты билдәләй белеү һәләтен, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** диаметры 1 м булған фанерҙан эшләнгән сәп, йомарланған ҡарҙар.

**Барышы:** балалар сәптән 4 - 5 метр алыҫлыҡта теҙелеп торалар. Улар уйын башланғас, сиратлап, ҡарҙарҙы сәпкә төҙәп бәрә башлайҙар. Кемдең ҡар тубы үҙәктәге түңәрәккә тейә, шул – күберәк мәрәй ала.

**Кем көслөрәк?**

**Уйын маҡсаты:** сослоҡто, иғтибарлылыҡты, етеҙлекте, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү; дуҫлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

**Барышы:** балалар ике тигеҙ төркөмгә бүленә. Һыҙыҡ һыҙыла. Ике төркөм һыҙыҡтың ике яғында тора. Һыҙыҡ өҫтөндә ҡапма-ҡаршы һәр төркөмдөң башлығы бер-береһенә ҡаршы тора. Улар бер – береһенең ҡулын нык итеп тоталар, ә иптәштәре улар артынан теҙелешә.

Сигнал буйынса һәр төркөмдөң уйнаусылары бер-береһенең биленән тотошоп, һыҙыҡ аша тартыша башлай.

Ҡайһы яҡ балалары ҡаршы төркөмдө үҙ яғына һөйрәп сығара, шул яҡ – еңеүсе.

**Трамвай**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү; сигнал буйынса хәрәкәт итергә өйрәтеү; светофорҙың төҫө һәм тәғәйенләнеше менән таныштырыу.

**Йыһаз:** ике бер тигеҙ оҙонлоҡтағы оҙон бау; йәшел, һары, ҡыҙыл төҫтәге байраҡтар.

**Барышы:** балалар парлашып колоннаға теҙелеп, етәкләшеп торалар. Улар остары бергә бәйләнгән бауҙың эсендә, буш ҡулдары менән бауҙы тотоп торалар. Йәшел төҫтәге байраҡ күтәрелһә – балалар югерәләр – трамвай ҡуҙғалды. Әгәр һары йәки ҡыҙыл төҫтәге байраҡтар күтәрелһә, балалар туҡтап, йәшел ут янғанды көтөп торалар.

Трамвайҙы икенсе транспорт төрө менән алыштырырға була.

**Алырмын ҡош, бирмәм ҡош**

**Уйын маҡсаты:** иғтибарлылыҡты, сослоҡто, етеҙлекте, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү; ойошҡанлыҡ тәрбиәләү.

**Барышы:** уйында "ҡаҙ", уның бәпкәләре һәм "төйлөгән" ҡатнаша. Төйлөгән булған бала ерҙе соҡоп ултыра. Ҡаҙ бәпкәләрен эйәртеп, уның эргәһенә килә һәм:

Төйлөгән, төйлөгән, ни эшләйһең? - тип һорай.

Төйлөгән:

- Бына һинең балаларыңды атып тоторға ултырам, - ти.

Ҡаҙ:

- Мин һиңә балаларымды бирмәйем! - ти.

Төйлөгән урынынан тора ла :

- Алам, алам, атар ҡош! - тип ҡаҙ бәпкәләренә ташлана.

Ҡаҙ:

- Бирмәм, бирмәм, битәр ҡош! - тип бәпкәләрен ҡурсылай башлай. Ә бәпкәләр ҡаҙ артынан бер-бер артлы тотоношоп, "Сип – сип - сип", - тип йөрөйҙәр. Төйлөгәндең ҡулы тейгән бала уйындан сыға бара. Уйын ҡаҙ бәпкәләре тотолоп бөткәнсе дауам итә.

**Төлкө кетәктә**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы эскәмйәнән һикереп төшөргә, һикергәндә ике аяҡҡа дөрөҫ төшөргә, кәүҙә торошо тигеҙлеген һаҡларға өйрәтеү; иғтибарлыҡты, етеҙлекте, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** эскәмйәләр (10 – 15 см бейеклектә).

**Барышы:** балалар араһынан төлкө һайлана. Тауыҡ булған балалар кетәктә – эскәмйәлә торалар. Төлкө ситтә ултыра. Тәрбиәсенең сигналы буйынса тауыҡтар һикереп төшәләр ҙә, ихата буйлап, югереп йөрөйҙәр, ҡанат ҡағыналар, ем сүпләйҙәр.

"Төлкө килә!" - тигән сигнал буйынса улар кетәккә ҡасалар. Ҡасып өлгөрмәгәнен төлкө өңөнә алып ҡайта. 2 – 3 тауыҡ тотолғас, төлкөнө алмаштырырға була.

**Бесәй балалары һәм көсөктәр**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы эскәмйә аҫтынан имгәкләп шыуышырға, гимнастика стенкаһына үрмәләргә өйрәтеү; иғтибарлылыҡты, етеҙлекте, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** гимнастика стенкаһы, 50 см бейеклегендәге эскәмйә йәки һуҙылған бау, башлыҡтар.

**Барышы:** уйын гимнастика стенкаһы булған бүлмәлә үткәрелә. Балалар ике төркөмгә бүленәләр. Тәүге төркөм – бесәйҙәр, улар эскәмйә алдында. Икенсе төркөм – көсөктәр, улар эскәмйә артында.

Тәрбиәсе бесәйҙәргә әкрен генә югерергә тәҡдим итә. "Көсөктәр" сигналы буйынса көсөк булған балалар эскәмйә, йәки һуҙылған бау аҫтынан шыуышып сығып, имгәкләп, бесәйҙәрҙе баҫтыралар. Бесәйҙәр гимнастика стенкаһына үрмәләп менәләр.

Көсөктәр ояларына ҡайталар. 2–3 тапҡыр уйнағас, балалар ролдәр менән алмашыналар.

### Атлылар эстафетаһы

**Уйын маҡсаты:** балаларҙа ойошҡанлыҡ, бер-береһе менән эш итә белеү һәләтлеге тәрбиәләү; етеҙлекте, сослоҡто, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Йыһаз:** 2 м оҙонлоғондағы ептәр.

**Барышы:** балалар сафҡа теҙелеп, бер нисә төркөмгә бүленеп, һыҙыҡ артына баҫалар. Берәүҙәре "ат", икенселәр - "һыбайлылар". Улар еп менән аттарҙы егеп алалар һәм сигнал буйынса "на – на!" - тип аттарҙы ҡыуа-ҡыуа, билдәләнгән маршрут менән сабалар. Былар әйләнеп килгәс, икенсе атлылар маршрутҡа сыға. Ҡайһы төркөм тиҙерәк һәм яңылышмай уйнай – шул еңеүсе була.

## Дидактик уйындар

### Нимәгә кәрәк?

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы тирә-йүндәге предметтарҙың сифаттары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ул предметтарҙың нимә өсөн ҡулланылғанын күрә, аңлата белергә өйрәтеү. Иғтибарлылыҡ, бәйләнешле телмәр үҫтереү.

**Йыһаз:** сынаяҡ, күҙлек, ҡармаҡ, саңғы, сүкеш төшөрөлгән һүрәттәр, йәки предметтар.

**Барышы:** балалар ярымтүңәрәк яһап ултыралар. Тәрбиәсе фланелеграфҡа төрлө предметтар төшөрөлгән һүрәттәрҙе берәмләп ҡуя:

- Балалар, был нимә?
- Сынаяҡ.
- Ул нимә өсөн кәрәк, Айгөл?
- Сәй эсергә.
- Кем өҫтәп әйтер, тағы ла нимәне сынаяҡҡа ҡойоп эсеп була?
- Кофе, һөт, ҡатыҡ, кисель, компот һ.б.

Шул рәүешле тәрбиәсе башҡа предметтарҙы күрһәтә һәм уларҙың ҡулланышы тураһында балаларҙан һорай.

**Мин тәҙрә аша нимә күрәм?**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы төрлө предметтарҙың төҫөн күрә, айыра, бер-береһе менән сағыштыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Фекерләү һәләтен, телмәр, зиһен һәм хәтер үҫтереү.

**Йыһаз:** 10 x 7 см ҙурлыҡтағы төрлө төҫтәге тура дүртмөйөш, картондан тәҙрә рамы силуэты, фланелеграф.

**Барышы:** балалар ярымтүңәрәк яһап, ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе фланелеграфҡа тәҙрә рамын ҡуя һәм:

- Балалар, был нимә ул? - тип һорай. Балалар: - Тәҙрә.
- Әйе, дөрөҫ, ул ниндәй геометрик фигураға оҡшаған?
- Тура дүртмөйөшкә.
- Был тура дүртмөйөш ниндәй төҫтә? - Йәшел.
- Тимәк, балалар, беҙ хәҙер тәҙрә аша тик йәшел төҫтәге предметтарҙы күрәбеҙ. Тирә-яҡҡа ҡарағыҙ әле, йәшел төҫтәге нимәләрҙе күрәһегеҙ?
- Туп, кубиктар, салфетка, алъяпҡыс (һ.б. предметтарҙы балалар һанап сығалар).

Шул рәүешле балалар ҡыҙыл, күк, һары, аҡ төҫтәге предметтарҙы әйтеп сығалар.

## Йәшелсәләр, емештәр

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы йәшелсә-емештәрҙе айыра, дөйөмләштерә белергә өйрәтеү. Телмәр, хәтер, зирәклекте үҫтереү.

**Йыһаз:** туп.

**Барышы:** балалар эскәмйәлә йә ултырғыста бер рәткә теҙелеп ултыралар. Беренсе ултырған балаға тәрбиәсе туп бирә һәм "йәшелсә" тип әйтә. Бала "помидор" тип, тупты күршеһенә бирә. Теҙелешеп ултырған балалар йәшелсәләрҙе әйтеп, тупты бер-береһенә тапшыралар.

Рәттә иң һуңғы булып ултырған бала тупты ала ла, емештәрҙе һанар өсөн уйынды башлап, бер емештең атамаһын әйтә һәм тупты кире рәт буйлап ебәрә.

## Беҙ ни эшләгәнде әйтмәйбеҙ, ә күрһәтәбеҙ

**Уйын маҡсаты:** балаларҙың фекерләү һәләтен, зиһенен, хәтер ҡеүәтен, зирәклек үҫтереү. Һүҙ байлыҡтарын үҫтереү, белемдәрен тулыландырыу.

**Барышы:** балалар ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе уйындың шартын аңлата. Бер бала бүлмәнән ишек артына сыға. Башҡалар үҙ-ара шым ғына һөйләшеп – кәңәшләшеп берәй эште белдергән хәрәкәтте (имитация) эшләп ҡарайҙар. Мәҫәлән: пианино уйнаған, сәс тараған, ҡурсаҡ йоҡлатҡан, иҙән һепергән һ.б. Тәрбиәсе ишек артындағы баланы саҡырып индерә һәм, бала ингәс, ултырғыстағы балаларҙан:

- Һеҙ нимә эшләнегеҙ? - тип һорай.

Ә башҡалар: "Беҙ ни эшләгәнде әйтмәйбеҙ, ә күрһәтәбеҙ!" - тип, алдан уйланылған хәрәкәтте күрһәтәләр. Әгәр бала дөрөҫ яуап бирһә, ул ултырғысҡа ултыра, яңылышһа – яңынан ишек артына сыға. Уйын яңынан дауам итә.

## Был ҡасан була?

**Уйын маҡсаты:** балаларҙың йыл миҙгелдәре тураһындағы белемдәрен тулыландырыу, төрлө йыл миҙгелендә йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттәге үҙгәрештәр менән таныштырыуҙы дауам итеү.

**Йыһаз:** төрлө йыл миҙгелен сағылдырған төҫлө һүрәттәр, йәшел, ҡыҙыл, һары, аҡ төҫтәге түңәрәктәр.

**Барышы:** тәрбиәсе берәй йыл миҙгелен сағылдырған һүрәтте күрһәтә. Мәҫәлән: "Көҙгө урман. Һары япраҡтар ерҙә яталар". Балалар ошо һүрәткә ярашлы рәүештә һары түңәрәкте күрһәтергә тейештәр.

Әгәр ҡыш миҙгеле булһа – аҡ, йәй – ҡыҙыл, яҙ – йәшел төҫтәрҙе күрһәтергә тейештәр. Уйын алдынан тәрбиәсе иң алда һәр төҫтөң ниндәй йыл миҙгелен аңлатҡанлығын балалар менән бергәләп асыҡларға тейеш.

**Һәр йәшелсәгә – япрағы, һабағы**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы йәшелсәләрҙе уларҙың япраҡтары, төҫтәре, формалары буйынса айыра һәм таный белергә өйрәтеү. Телмәр ҡеүәтен, зиһенде һәм хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** 2 ҡумта, уның береһендә – йәшелсәләр төшөрөлгән һүрәттәр, икенсеһендә – уларҙың һабаҡтары менән япраҡтары.

**Барышы:** балалар өҫтәл артында. Тәрбиәсе өҫтәлгә ике ҡумталағы һүрәттәрҙе лә һала ла, йәшелсәләрҙең һабаҡтары менән япраҡтарын табып, уларҙы ҡуйырға тәкдим итә. Аҙаҡ – ниндәй йәшелсә икәнен, япрағы ниндәй төҫтә, формала һ.б. тураһында һөйләй.

**Серле һүрәттәр**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙың йорт һәм ҡырағай хайуандар тураһындағы белемдәрен тулыландырыу, дөрөҫ итеп һанарға өйрәтеүҙе дауам итеү. Телмәр ҡеүәтен, зиһенде һәм хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡумтала төрлө йорт һәм ҡыр хайуандары төшөрөлгән карточкалар (һәр карточкала 1 – 5 – кә тиклем генә һүрәттәр).

**Барышы:** балалар өҫтәл тирәләп ултыралар. Тәрбиәсе ҡумтанан алып карточкаларҙы өҫтәлгә һүрәттәрен әйләндереп һала. Балаларҙың һәр береһе карточканы ала, әйләндереп ҡарай һәм унда ниндәй хайуан төшөрөлөүен, йорт йәки ҡыр хайуанымы, нисә хайуан икәнлеген, уның ниндәй икәнлеген әйтеп бирәләр.

**Кем иң күп белә?**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы предметтарҙы дөйөмләштерә белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Телмәр ҡеүәтен, зиһенде һәм хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** бәләкәй туп.

**Барышы:** балалар ярымтүңәрәк яһап ултырғыстарҙа ултыралар. Тәрбиәсе улар ҡаршыһында, уның ҡулында бәләкәй туп.

Тәрбиәсе уйындың шартын аңлата: ул тупты балаларға биргәндә берәр ниндәйҙер бер дөйөмләштерелгән һүҙҙе әйтә һәм был дөйөмләштереүсе һүҙҙәр төркөмөнә ингән нәмәне атай. Мәҫәлән: Тәрбиәсе: "Уйынсыҡтар", тип әйтә. Шунан: "Ҡурсаҡ", - тип тупты ултырғыста беренсе булып ултырған балаға ташлай. Бала уйынсыҡтар төркөмөнә ингән икенсе һүҙҙе әйтеп, тупты кире тәрбиәсегә бирә. Тәрбиәсе тағы ла берәр уйынсыҡты атап, тупты икенсе булып ултырған балаға бирә. Уйын шул рәүешле дауам итә. Бер үк һүҙҙе әйтергә ярамай. Икенсе дөйөмләштереүсе һүҙҙәр теҙмәһен алырға мөмкин (һауыт-һаба, өҫ, баш, аяҡ кейемдәре, бүлмә йыһаздары, йәшелсәләр һ.б.)

**Уйла һәм әйт**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы тирә-йүндәге, йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе аңлы рәүештә күрә, аңлай белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Төрлө предметтарҙың төҫтәре, формалары, сифаттары менән таныштырыу. Шул уҡ билдәләр буйынса уларҙы айыра һәм таный белергә өйрәтеү. Телмәр ҡеүәтен, зиһенде һәм хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** предметлы һәм сюжетлы һүрәттәр һәм төрлө предметтар.

**Барышы:** балалар өҫтәл артында ултыралар. Тәрбиәсе улар алдында. Ул балаларға төрлө һорауҙар бирә:

- Төҫтәре буйынса ҡар һәм тупраҡ нисек айырылалар? (һүрәттәр күрһәтә)
- Мамыҡ менән ағас? (күрһәтә)
- Ҡайһы ваҡытта ағастар япраҡ яра? Ҡайһы ваҡытта ҡойола? (сюжетлы һүрәттәр аша айыралар), һ.б.

**Уйынсыҡтарҙы сағыштыр**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы төрлө предметтарҙы уларҙың бейеклектәре буйынса сағыштыра белергә өйрәтеү. Уларҙы төҫтәре, формалары буйынса айыра һәм таный белергә өйрәтеүҙе дауам итеү. Тирә-йүндәге предметтарға, уйынсыҡтарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Телмәр ҡеүәтен, зиһенде һәм хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ, пирамидка, уйынсыҡ бәшмәк, өҫтәл, ултырғыс – бөтәһе лә икешәр һәм төрлө бейеклектәге уйынсыҡтар.

**Барышы:** балалар өҫтәл артында ултыралар. Тәрбиәсе уйынсыҡтарҙы балаларға парлап күрһәтә. Мәҫәлән: ике пирамидка. Уның береһе бейек, ә икенсеһе – тәпәш. Балалар уларҙы сағыштырып, ҡайһыныһы бейек, ҡайһыныһы тәпәш икәнлеген билдәләйҙәр.

Шундай тәртиптә ҡурсаҡтар сағыштырыла. Ҙур ҡурсаҡты бейек ултырғысҡа, бейек өҫтәл артына ултырталар. Бәләкәй ҡурсаҡты – тәпәш өҫтәл һәм ултырғысҡа ултырталар. Ни өсөн улай кәрәклеген балалар үҙҙәре аңлатып, һөйләйҙәр.

**Кемдең балаһы?**

**Уйын маҡсаты:** балаларҙың йорт хайуандары һәм йорт ҡоштары тураһындағы белемдәрен асыҡлау, киңәйтеү. Хайуандарға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Телмәр ҡеүәтен, зиһенде һәм хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз:** фланелеграф, йорт хауандары һәм ҡоштары һәм уларҙың балалары булған айырым төҫлө һүрәттәр.

**Барышы:** балалар өҫтәл артында, улар алдында фланелеграф. Иң тәүҙә тәрбиәсе менән бергәләп йорт ҡоштарын, йорт хайуандарын һанап, әйтеп сығалар. Шунан тәрбиәсе: "Быҙау", - тип әйтеүгә, балалар "Һыйыр", - тип яуап ҡайтаралар һәм өҫтәлдән һыйыр менән быҙау төшөрөлгән һүрәттәрҙе алып, уларҙы фланелеграфҡа урынлаштыралар.

## Сюжетлы – ролле уйындар

Балаларҙа төрлө уйындарға ҡыҙыҡһыныу уятыу, бер-береһе менән кәңәшләшеп, дуҫ һәм татыу уйнарға өйрәтеү. Сюжетлы – ролле уйындарҙың йөкмәткеһе яңынан – яңы күренештәр (сюжеттар) менән

тулыландырып торолорға тейеш. Уйнар өсөн төркөмдә эре төҙөлөш материалдары һәм шулай уҡ башҡа кәрәкле материалдар булдырырға кәрәк. Уларҙы балалар теләгән ваҡытта алып, уйнағандан һуң урынына ҡуйырлыҡ булһын.

Тәрбиәсе уйынды күҙәтеп кенә торорға тейеш түгел, уны тейешле йүнәлешкә бороп, төҙәтмә индерергә тейеш. Уртансы төркөм өсөн тәҡдим ителгән сюжетлы – ролле уйындар.

**Магазин**

**Уйын маҡсаты:** иҫәпте нығытыу (таяҡсалар, түңәрәктәр). Һатыусы һөнәренә ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт тәрбиәләү. Йәмәғәт урындарында үҙ-үҙеңде тота белергә өйрәтеү, телмәр үҫтереү.

**Йыһаз:** уйынсыҡтар, витриналар, касса, аҡ халат, "аҡсалар", дәрестә әҙерләнгән "печенье һәм йәшелсәләр".

**Ҡағиҙәһе:** ролдәрҙе бүлеү: һатыусы, кассир, машина йөрөтөүсе, эшселәр, һатып алыусылар. Тулы һөйләмдәр менән һөйләшеү. Иҫәпте дөрөҫ алып барыу. Бер – береңә итәғәтле булыу.

**Дауахана**

**Уйын маҡсаты:** Табип һөнәренә ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт тәрбиәләү. Йәмәғәт урындарында үҙ-үҙеңде тота белергә өйрәтеү, телмәр үҫтереү.

**Йыһаз:** аҡ халат, аҡ ҡалпаҡ, фонендоскоп, шпатель, градусник, эсендә «дарыу» ятҡан төрлө бәләкәй картон ҡумталар, кушетка, рецепт яҙыу өсөн ҡағыҙҙар, ручка, энәһеҙ шприцтар, мамыҡ йомарсыҡтар, бинт.

**Ҡағиҙәһе:** ролдәрҙе бүлеү: табип, «ауырыу». Тулы һөйләмдәр менән һөйләшеү. Бер – береңә иғтибарлы булыу.

**Дарыухана**

**Уйын маҡсаты:** Дарыу һатыусы (провизор) һөнәренә ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт тәрбиәләү. Йәмәғәт урындарында үҙ-үҙеңде тота белергә өйрәтеү, телмәр үҫтереү.

**Йыһаз:** витриналар, касса, аҡ халат, "аҡсалар", дәрестә әҙерләнгән "рецепттар, дарыуҙар, дарыу үләндәре төрөлгән ҡаптар һ.б.".

**Ҡағиҙәһе:** ролдәрҙе бүлеү: дарыу һатыусы, кассир, машина йөрөтөүсе, һатып алыусылар. Тулы һөйләмдәр менән һөйләшеү. Иғтибарлы, итәғәтле булыу.

### Зоопарк

**Уйын маҡсаты:** иҫәпте нығытыу, балаларҙы зоопарк хеҙмәткәрҙәренең эше менән таныштырыу; хайуандарҙы тәрбиәләү тәртибе менән таныштырыу; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

**Йыһаз:** 12 – 15 бер төрлө ҙурлыҡтағы хайуандар - уйынсыҡтар, төҙөлөш материалдары һәм башҡа кәрәк-яраҡтар: биҙрәләр, һепертке, сепрәк, тастар, йәки ялғаштар.

**Ҡағиҙәһе:** ролдәрҙе бүлеү: зоопарк хеҙмәткәрҙәре, төҙөүселәр, зоопарк етәксеһе, табиптар, кухня эшселәре, хайуандарҙы оҙатыусылар. Оҙатыусы нисә хайуан алып килгәнен иҫләргә тейеш. Етәксе хеҙмәткәрҙәрҙән нисә хайуанды ашатҡанын, йыуындырғанын белешеп тора. Үҙҙәре башҡарған эште һөйләй белеү.

### Ғаилә

**Уйын маҡсаты:** ғаилә ағзаларына иғтибар, һөйөү тәрбиәләү, бер-беренә ҡарата иғтибарлы булыу; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

**Йыһаз:** ҡурсаҡ мөйөшөндә уйнарға мөмкин; ролдәр үҙаллы, балалар теләгәнсә бүленә (атай, әсәй, өләсәй, олатай, һ.б.)

**Ҡағиҙәһе:** һәр кем үҙ ролен еренә еткереп, тулыландырып башҡарырға тейеш.

### Сәс алыусы

**Маҡсат:** сәс алыусы һөнәре менән таныштырыу. Уйын өсөн кәрәк булған атрибуттарҙы һайлай белергә, уйынсыҡтар менән айырым (индивидуаль) уйында үҙе һәм уйынсыҡ өсөн роль башҡара белергә өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен, фекерләү һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** уйынсыҡ ҡайсылар, тараҡтар. Сәс алыусыға алъяпҡыс, уйын өсөн кәрәкле нәмәләрҙе алыштырған предметтар.

## Уртансылар төркөмөндә уйнау күнекмәләренең формалашыуын яҡынса билдәләү күрһәткестәре

Уйында үҙ-аллылыҡ, ныҡышмалылыҡ, ихтыяр көсө күрһәтә.

Уйын сюжетына үҙ-аллы өҫтәмә индерә.

Тәрбиәсе менән берлектә уйналған сюжетлы-ролле уйындарҙа ҡатнашып уйнай ала, сюжет буйынса диалогтар ҡора белә.

Ниндәй уйын уйнау һәм ҡоролмалар төҙөү кәрәклеге тураһында алдан бергәләп һөйләшә, кәңәшләшә белә.

Тиҫтерҙәренең теләгенә һәм кәңәшенә ҡолаҡ һала.

Театрлаштырылған уйындарҙа образлы уйынсыҡтар һәм бармаҡ ҡурсаҡтарын ҡуллана белә, телмәрҙә тасуири саралар ҡуллана (интонация, мимика, ишара).

Туп, һикергес, ҡоршау менән уйнай белә.

Һамаҡ ярҙамында уйын алып барыусыны һайлай белә.

Дидактик уйындарҙа предметтың сифатын билдәләй, тышҡы билдәләр буйынса уларҙы сағыштыра белә.

Өлөштәрҙән бөтөндө йыя (кубиктар, мозаика, пазлдар ярҙамында).

Предметты һәрмәп, тәмләп, тыңлап тауышы аша билдәләй.

## Өлкән һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәре

Биштән - ете йәштәге балаларҙың үҫешендә уйын ҙур урын биләй. Был йәштәге балалар уйыны йөкмәткеһе яғынан бай һәм төрлө булыуы менән айырыла.Бала үҫкән һайын уның фантазияһы ла байый, киңәйә.

Уйын ойошторғанда балаға физик көс артыҡ төшмәҫкә, ул уйындан арырға тейеш түгел, ә киреһенсә, үҙендә илһам, яңы көс һәм дәрт артҡанын тойһон.

Был йәштәге балалар уйыны эшмәкәрлегенең төп маҡсаттары булып - хәрәкәтләнеүҙең төрлө төрҙәрен камиллаштырыу; уйын аша баланың һаулығын нығытыу һәм үҫтереү; күнекмәләр башҡарыуға

ижади ҡараш тәрбиәләү, балала үҙаллылыҡ, әүҙемлек һәм ҡыҙыҡһыусанлыҡ һәләтлелеге тәрбиәләү тора.

## Хәрәкәтле уйындар

### Энә менән еп

**Маҡсат:** балаларҙы тәрбиәсенең сигналы буйынса бер-береһенә бәрелешмәй бөтә майҙансыҡ буйлап тигеҙ хәрәкәт итергә өйрәтеү. Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү. Уйын етеҙлек, ҡырҡыу хәрәкәттәр яһарға, иғтибарлы булырға өйрәтә, тәүәкәллек тәрбиәләй.

**Ҡағиҙәһе:** "еп" "энә" артынан ғына йөрөргә тейеш. Әгәр ул яңылышһа, икенсе бала "еп" була, шунда уҡ "энәне" ҡыуа башлай. "Энә" менән "еп" бер-береһе менән тотошһалар, икенсе балалар "еп", "энә" булалар һәм уйын яңынан башлана.

**Уйын барышы:** балалар ҡулға-ҡул тотоношоп, ҙур түңәрәк яһайҙар. Бер бала "энә", икенсеһе - "еп" була. Тәрбиәсе сигнал биреү менән "энә" түңәрәк яһап торған балалар араһына ҡаса, ә "еп" уның артынан төшә. "Энә" нисек булһа ла "ептән" эҙ яҙлыҡтырырға тырыша. Әгәр "еп" "энәне" яңылышмай килеп тотһа, "еп" булған бала "энә" булып ҡаса.

### Бесәй һәм сысҡан

Был уйын "Энә менән еп" уйынына оҡшаш, тик бында бесәй сысҡан йөрөгән юлдан ғына йөрөмәй, уға ҡаршы ла, юлына тура ла төшөп тота ала.

Бесәй сысҡанды тотҡас, сысҡан булған бала түңәрәккә баҫа, ә бесәй сысҡанға әйләнә. Түңәрәктән икенсе уйнаусы – бесәй сыға (һанашмаҡ ярҙамында) һәм ҡыуышыу яңынан башлана.

### Йылым (невод)

Уйнаусылар, һанашмаҡ әйтеп, ике баланы йылым итәләр. Ҡалғандар – балыҡ ролен башҡалар. Ике бала етәкләшеп, балыҡтарҙы баҫтыра башлай. Тотолған һәр бер балыҡ уларға ҡушыла бара. Тәүҙә ике кешенән торған йылым тора – бара киңәйеп китә, ҡалған балыҡтарҙы тотоуы еңелләшә.

**Ҡағиҙәһе:** йылымды кәүҙәләндергән балалар һәр ваҡыт етәкләшеп йөрөйҙәр. Әгәр бала – балыҡ йылым булған балаларҙың ҡулдарын өҙөп ҡаса икән, ул тотолғанға иҫәпләнмәй. Иң аҙаҡ тотолған бала иң йылғыр, шыма балыҡ булып таныла.

## Себештәр һәм ҡарауылсы

**Маҡсат:** Балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү. Уйын етеҙлек, иғтибарлы булырға өйрәтә, тәүәкәллек тәрбиәләй. Балаларҙың телмәр ҡеүәтен үҫтерә.

**Уйын барышы:** уйнаусы балалар һанашмаҡ әйтеп, ҡарауылсы һайлайҙар. Ергә һыҙыҡ һыҙалар йәки оҙон еп һалалар. Ҡарауылсы бер яғында, ә себештәр һыҙыҡтың икенсе яғында торалар. Себеш булған балалар, йырлай – йырлай ҡарауылсы торған яҡҡа инә башлай:

Беҙ мамыҡтай себештәр,

Баҡсаға югерәйек.

Йәшел үлән – сәскәләргә

Тиҙерәк күмеләйек.

Себештәрҙең барыһы ла икенсе яҡҡа сығып бөткәс, ҡарауылсы уларҙы ҡыуырға тотона:

Көш – көш, китегеҙ тиҙерәк,

Өҙмәгеҙ гөлдәрҙе.

Көш – көш, сығығыҙ баҡсанан,

Сүпләмәгеҙ емдәрҙе.

Себештәр ҡарауылсынан ҡасалар. Кем тотола, шул ҡарауылсы булып ҡала. Уйын яңынан башлана.

**Ҡағиҙәһе:** себештәр икенсе яҡҡа сыҡҡанда, ҡарауылсы ситтә тора һәм үҙенең һүҙҙәрен әйтеп бөткәс кенә, иптәштәрен баҫтыра. Себештәр үҙ яҡтарына ҡасып ҡотола.

## Беҙ күңелле балалар

**Уйын барышы:** балалар, һанашмаҡ әйтеп, көтөүсе һайлайҙар. Майҙансыҡтың бер яғында уйнаусылар, майҙансыҡтың уртаһында ситтәрәк – көтөүсе. Балалар күмәкләп йыр башлай:

Беҙ - күңелле балалар,

Уйнарға яратабыҙ,

Кем беҙҙе ҡыуып тота –

Иң етеҙ бала була.

Һуңғы һүҙҙе әйтеү менән балалар майҙансыҡтың икенсе яғына югерә, ә уртала торған көтөүсе уларҙы баҫтырып тоторға тырыша. Тотолған балалар көтөүсе ярҙамсыһына әйләнәләр. Икенсе тапҡыр йырлап югергәндә, улар көтөүсегә башҡа балаларҙы тотошорға ярҙамлашалар. Бөтә балалар ҙа тотолоп бөткәс, уйын яңынан башлана.

## Ҡатырғыс

**Уйын барышы:** 4–8 бала йыйылып, һанашмаҡ әйтеп, көтөүсе һайлайҙар. Уйын башланыу менән үк, балалар көтөүсенән ҡасалар. Көтөүсе кемде ҡыуып тота, шул урынында ҡатып ҡала. Иптәштәре килеп уға ҡулы менән тейһә, ҡатҡан бала ҡасып китә. Көтөүсе башҡаларҙы ҡатҡан балалар янына ебәрмәҫкә тырыша, шул ук ваҡытта бүтәндәрҙе лә тотоуын дауам итә.

**Ҡағиҙәһе:** ҡатып торған балалар бер-береһен ҡотҡара алмай. Көтөүсе балаларҙың барыһын да тота алмаһа, уны икенсе бала алмаштыра.

**Әһәмиәте:** Уйын иғтибарлы булырға өйрәтә, етеҙлек, уяулыҡ, тәүәкәллек тәрбиәләй.

## Өйһөҙ ҡуян

**Уйын барышы:** балалар бергә йыйылып, һанашмаҡ әйтеп, араларынан "һунарсы" һәм "ҡуян" билдәләйҙәр. Ҡалғандары өсәрләп, түбәндәгесә түңәрәк яһап баҫалар: ике бала бер-береһе менән ҡулға-ҡул тотоношоп, ҡара-ҡаршы тороп өй эшләйҙәр, уларҙың уртаһында өсөнсө бала.

**Ҡағиҙәһе:** Ҡуян төркөм-төркөм торған балалар араһына ҡаса һәм ҡулы менән өй эсендәге балаға тейергә тырыша. Кемгә ҡул тейгән, ул - түңәрәктән сығып ҡаса, ә уның өйөн "ҡуян" ала. Һунарсы баҫтыра. Ул ҡуянды тотҡас, уйын яңынан башлана.

## Хәйләкәр төлкө

**Уйын барышы:** балалар ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәккә баҫалар. Күҙҙәре йомоҡ. Тәрбиәсе түңәрәк буйлап йөрөй һәм бер ҡулы менән берәр балаға тейә. Балалар тәрбиәсе сигналы менән күҙҙәрен асалар һәм ипләп кенә һорайҙар: "Хәйләкәр төлкө, һин ҡайҙа?"

Кемгә тәрбиәсе тейгән, ул бер хәрәкәте менән дә үҙе хәйләкәр төлкө икәнен күрһәтмәй. Балалар тағы ла ҡысҡырып һорайҙар. Өсөнсө тапҡыр ҡысҡырғанда, хәйләкәр төлкө ырғып уртаға сыға һәм: "Мин бында!" - тип ҡысҡыра. Балалар төрлө яҡҡа ҡасалар.

**Ҡағиҙәһе:** Кемдәр тотола, уйындан сыға баралар.

**Әһәмиәте:** Уйын иғтибарлы булырға өйрәтә, етеҙлек, уяулыҡ, үҙ үҙеңде тота белеүҙе, ихтыяр көсө тәрбиәләй.

## Буяу һатыу

**Уйын барышы:** һанашмаҡ әйтеп, һатыусы һәм көтөүсе һайлайҙар. Көтөүсе балалар янына килә лә:

Буяуҙары бар микән,

Зәңгәр микән, ал микән?

Төҫөм матур, мине ал, -

Тиеүсеһе бар микән?

Шунан тауыш бирә: "Туҡ, туҡ, туҡ!"

Һатыусы:

- Кем унда?

Көтөүсе:

- Хужалар өйҙәме?

Һатыусы:

- Ин, ин!

Көтөүсе:

- Буяу һатаһығыҙмы?

Һатыусы:

- Һатам, ниндәй кәрәк?

Көтөүсе:

- Ҡыҙыл!

Кемгә алдан ҡыҙыл төҫ ҡушылған, урынынан тороп югерә. Көтөүсе уны баҫтыра. Ҡасҡан бала тотолһа, көтөүсе янында ҡала, тотолмай үҙ урынына килһә – уға икенсе буяу төҫө ҡушыла. Уйын буяуҙар һатылып бөткәнсе дауам итә.

**Ҡағиҙәһе:** Буяу төҫтәре алдан ҡушыла, уны көтөүсе ишетмәҫкә тейеш.

**Әһәмиәте:** Уйын иғтибарлы булырға өйрәтә, етеҙлек, уяулыҡ, йылдамлыҡ тәрбиәләй.

## Табип һәм йылан

**Уйын барышы:** бер бала табип, икенсеһе – йылан була. Ҡалған балалар йылан артынан бер-береһенең билдәре тапҡырынан кейемгә ике ҡуллап тотоналар. Табип йыланға килә:

- Йылан ағыуыңды бир!

- Әгәр ала алһаң, ал, - тип әйтә йылан һәм төрлөсә хәрәкәтләнеп, табипты артта торған балаларға ебәрмәҫкә тырыша. Балалар йылан артынан йөрөй. Табип иң аҙаҡта торған баланы тоторға тейеш, әгәр тотһа, еңә.

**Ҡағиҙәһе:** ҡулдар ысҡынырға тейеш түгел. Кемде табип тотһа, ул йыланға әйләнә.

**Әһәмиәте:** Уйын берҙәмлек, иғтибарлыҡ, дуҫлыҡ сифаттары тәрбиәләй.

## Еҙ бүкән

**Уйын барышы:** балалар парлашып бер-бер артлы торалар, берәү ишһеҙ булырға тейеш. Алда торған балалар сүгеп, еҙ бүкән булып ултыралар. Арттағылар баҫып торалар. Ишһеҙ бала бер парлы балалар янына килә һәм артта торған баланан һорай:

- Еҙ бүкәнде һатыуҙанмы?

- Еҙ бүкәнде һатыуҙан.

- Хаҡын күпме биреүҙән?

- Хаҡ ярым хаҡ, бот ярым бот.

- Әйҙә югерешәйек, кем килеп алыр икән? - тип әйтешәләр ҙә түңәрәк тышынан ҡара-ҡаршы югерешәләр. Кем беренсе – шуға еҙ бүкән эләгә. Ишһеҙ бала шул уҡ һүҙҙәр менән үҙенә еҙ бүкән эҙләй.

**Ҡағиҙәһе:** түңәрәк эсенән үтергә, түңәрәктән ситкә китергә ярамай. Еҙ бүкән булған балалар урындары менән алышып торалар.

**Әһәмиәте:** Уйын етеҙлекте һәм йылдамлыҡты үҫтерә.

## Аҡ тирәк, күк тирәк

**Уйын барышы:** балалар ике төркөмгә бүленә, 10 метр самаһында аралыҡ ҡалдырып, ҡара-ҡаршы теҙелеп баҫалар. Тәүҙә бер төркөм һамаҡлай: Ҡабырғалы ҡамсылыҡ,

Тама торған тамсылыҡ.

Аҡ тирәк, күк тирәк,

Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

Икенсе төркөмдәгеләр һамаҡлаған балаларҙың берәйһенең исемен әйтә. Мәҫәлән: "Марат батыр кәрәк!" Марат тигән бала ҡаршы яҡҡа югереп барып, берәй араны өҙөргә тейеш. Әгәр өҙә алһа, бер баланы үҙ яғына алып сыға, ә өҙә алмаһа – шул яҡта ҡала. Ҡайһы төркөмдә балалар күп – шулар еңеүсе.

**Әһәмиәте:** Уйын балаларҙың тән мускулдарын төрлө хәрәкәтсел эшкә йәлеп итә, иғтибарлылыҡ, дуҫлыҡ сифаттары тәрбиәләй.

## Борсаҡ

**Уйын барышы:** балалар түңәрәккә баҫа. Түңәрәк шәп тиҙлектә әйләнә. Уйнаусылар берәм-берәм ситкә йығыла, берәү генә тороп ҡала. Йығылған балалар "борсаҡтар" булып, яйлап ҡына үҫәләр (торалар).

Хужа "борсаҡтарҙы" өйөнә йыя, бер ергә теҙеп ултырта. Ут яҡҡан булып ҡылана. "Бер" тип шырпы һыҙған була, "ике" - тип һыҙа. "Өс", - тиһә, борсаҡтар урындарынан тороп ҡаса.

Хужа уларҙы берәмләп тотоп, өйгә бикләй. Барыһын да тотҡас, уйын яңынан башлана.

**Ҡағиҙәһе:** тотолған балалар кире ҡасмай, бүтәндәрҙең тотолғанын көтәләр.

**Әһәмиәте:** Уйын етеҙлек, йылдамлыҡ, югереклек тәрбиәләй.

### Баҫтырыш

**Уйын барышы:** ҡыҙҙар менән малайҙар ишләп түңәрәккә баҫа: ҡыҙҙар алда, малайҙар артта тора. Уйын башында балаларҙың береһе түңәрәк уртаһына сығып, һанашмаҡтың һәр бер һүҙен парлашып торған балалар һанына тура килтереп, һанашмаҡ әйтә. Кемгә аҙаҡҡы һүҙ эләгә, шулар уйынды башлап ебәрә: иштең береһе түңәрәк буйлап, тышҡы яҡтан ҡаса, икенсеһе - баҫтыра. Баҫтырыусы ҡасыусыны ҡыуып етеп, уға һуға ла, үҙе кире яҡҡа ҡаса. Баҫтырыусы инде ҡыуып еттем тигәндә, ҡасыусы түңәрәктә торған бер парҙың алдына барып баҫа. Парҙың артында торған бала, шунда уҡ баҫтырыусынан ҡасып, түңәрәк буйлап югереп китә. Әгәр ул тотолмаһа, икенсе парҙың алдына барып баҫа. Тотолһа, үҙен тотҡан баланы баҫтыра. Уйын шул тәртиптә дауам итә.

**Ҡағиҙәһе:** бер үк балаларға ғына баҫырға ярамай. Түңәрәк тышынан югергәндә, алыҫ китергә ярамай.

**Әһәмиәте:** Уйын балаларҙың физик яҡтан үҫешенә ыңғай тәьҫир итә. Иғтибарлыҡ, етеҙлек, сослоҡ һыҙаттары тәрбиәләй.

## Дидактик уйындар

### "Аҡ, ҡара" һүҙҙәрен әйтмәҫкә

**Уйын барышы:** уйнарға теләгән балаларға төрлө емеш – еләк, йәнлектәр, һ.б. исемдәре ҡушыла. Уйынды ойоштороусы һәр бала алдына килеп, тиҙ-тиҙ төрлө һорауҙар бирә:

- Ҡар ни төҫлө?
- Сәсең ниндәй? һ.б. шуға оҡшаш һорауҙар.

Ҡыҫҡаһы, уйнаусы *аҡ, ҡара* һүҙҙәрен әйтмәҫкә тейеш. Яңылыш әйтһә, фантик алына. Аҙаҡ фанттар күбәйгәс, уларҙың хужаларына төрлө язалар бирелә: йырлау, бейеү, шиғыр һөйләү, әтәс булып ҡысҡырыу, һ.б. язаларҙы балалар үҙҙәре билдәләй.

**Ҡағиҙәһе:** фантиктың хужаһы язаны үтәмәйенсә әйберен ала алмай.

**Әһәмиәте:** Уйын иғтибарлыҡ, зирәклек, һөйләү телмәре ҡеүәтен, хәтерҙе үҫтерә.

## Туп тот һәм һан әйт

**Уйын барышы:** балалар теҙелеп ултыра. Тәрбиәсенең ҡулында туп. Ул берәй бала алдына килә һәм ниндәй ҙә булһа бер һанды әйтеп, уға тупты ташлай. Бала тупты алғас, тәрбиәсе әйткән һандың күршеһен әйтергә тейеш. Тәрбиәсе тағы ла бер һан әйтеп, тупты икенсе балаға бирә.

Һандар тәүҙә 10 – ға тиклем, аҙаҡ 10 -дан кире тәртиптә 1 -гә тиклем әйтелә. Кем яңылыша, шул бала уйындан сыға бара. Кем аҙаҡҡа ҡала – шул еңеүсе.

**Ҡағиҙәһе:** тәрбиәсе тупты балалар теҙелеп ултырған тәртиптә бирмәй. Тупты көтмәгәндә ташлай. Тик балаларҙы һанды үҫә барған тәртиптә йәки кәмей барған тәртиптә әйтәсәген алдан иҫкәртеп ҡуя.

**Әһәмиәте:** уйын иғтибарлыҡ, зирәклек, уйлай һәм һанай белеү һәләтттәрен үҫтерә.

## Осто - осто

**Уйын барышы:** балалар түңәрәккә баҫа. Һанашмаҡ менән бер бала һайлана, йәки тәрбиәсе үҙе алып барыусы була. Алып барыусы уртаға баҫа һәм оса торған һәм осмай торған нәмәләрҙең атамаһын буташтырып әйтеп, ҡулын өҫкә күтәрә. Балалар оса торған нәмә әйтелгәндә генә ҡулдарын күтәрергә тейештәр, ә осмай торған нәмә әйтелһә – сүкәйеп ултыралар.

**Ҡағиҙәһе:** уйын тәртибен боҙған балалар – түңәрәктән сыға бара. Алып барыусылар һанашмаҡ менән йәки балалар теләге менән һайлана.

**Әһәмиәте:** уйын тиҙ уйлау һәләтлеген һәм етеҙлекте, хәтерҙе үҫтерә.

## Ниндәй хайуан?

**Уйын барышы:** балалар теҙелеп ултыра. Бер бала алдан бер хайуанды эстән күҙ алдына килтерә һәм уны сифаттары буйынса танып әйтер өсөн, башҡаларға һорау бирә. Мәҫәлән: "Дүрт тояҡлы, мөгөҙлө, ҡыҫҡа ҡойроҡ, һөт бирә" (кәзә).

Балалар һүрәтләү буйынса ниндәй хайуан икәнлеген билдәләргә тейеш. Һәр бер бала берәр генә хайуан тураһында һөйләй. Йорт

хайуандарын әйтеп бөткәс, ҡырағай хайуандар тураһында һорау бирергә мөмкин.

**Ҡағиҙәһе:** бала һәр хайуанды тулыраҡ һүрәтләргә тейеш.

**Әһәмиәте:** уйын бәйләнешле телмәрҙе, иғтибарлыҡты, уйлау, фекерләү һәләтен үҫтерә. Йорт һәм ҡырағай хайуандар тураһында белемде киңәйтә.

## Киреһен әйт

**Уйын барышы:** уйнаусы балалар теҙелеп ултыралар. Алып барыусы - тәрбиәсе була. Уйын башланғас, тәрбиәсе төрлө һүҙҙәр әйтә. Мәҫәлән: *"киң",* - ти. Балалар: *"тар",* - тип яуап бирә. *Аҡ – ҡара, бейек – тәпәш, йыуан – нәҙек* һәм ошондай ҡапма – ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәрҙе алырға кәрәк. Кем күберәк яуап бирә, шул – еңеүсе була.

**Ҡағиҙәһе:** әгәр гел генә бер үк балалар яуап бирһә, һорауҙарҙы балаларға сиратлап бирергә кәрәк.

**Әһәмиәте:** уйын телмәр ҡеүәтен үҫтерә, һүҙ байлығын арттыра.

## Күршеһен әйт

**Уйын барышы:** тәрбиәсе уйнаусы балаларға төрлө һандар әйтә, ә балалар ул һандарҙың ике йәнәш күршеһен әйтергә тейеш.

Мәҫәлән: "Биш", ә уның күршеләре - дүрт һәм алты. Тәүге осорҙа уйнағанда, берҙән унға тиклем ҙур итеп цифрҙар яҙылған карточкаларҙы күрһәтергә була.

**Ҡағиҙәһе:** уйынға 3 –4 баланан артыҡ алыу тәҡдим ителмәй. Яҙылған һандар эре булырға тейеш.

**Әһәмиәте:** уйын логик фекерләүҙе, иҫәпте нығытыу.

## Боҙоҡ телефон

**Уйын барышы:** уйнаусы балалар ултырғыста, йәки эскәмйәлә теҙелеп ултыралар. Алып барыусы, йәки тәрбиәсе үҙенең эргәһендә ултырған балаға берәй һүҙ әйтә. Мәҫәлән, "алма", ә бала күршеһенең ҡолағына бышылдап ҡына ошо һүҙҙе әйтә. Һәр бала һүҙҙе нисек итеп ишеткән, шул килеш күршеһенә еткерә. Бөтә балалар ҙа әйтеп бөткәс, уйынды алып барыусы иң аҙаҡтағы баланан нимә ишеткәнен һорай.

Шул рәүешле бөтә балаларҙан да һорап сығыла. Кем һүҙҙе яңылыш әйтә, ул бала рәттең аҙағына күсеп ултыра.

**Ҡағиҙәһе:** һүҙҙе ҡысҡырып әйтергә ярамай.

**Әһәмиәте:** уйын ишетеү һәләтен, иғтибарлылыҡты үҫтерә.

**Ҡабатла**

**Уйын барышы:** бер нисә бала уйнай. Алып барыусы, йәки тәрбиәсе ниндәй ҙә булһа бер һүҙ әйтә. Мәҫәлән, "баҡса". Эргәлә торған бала был һүҙҙе ҡабатларға һәм үҙе тағы ла берәй һүҙ өҫтәргә тейеш: "баҡса", "әтәс". Өсөнсө бала алдағы икәүҙең һүҙен ҡабатлай һәм үҙенең һүҙен өҫтәп әйтә. Уйын берәйһе яңылышҡансы дауам итә.

**Ҡағиҙәһе:** бер үк һүҙҙе әйтергә ярамай. Һүҙҙәр бер-береһенә мәғәнә яғынан бәйләнешле булмаҫҡа мөмкин.

**Әһәмиәте:** уйын хәтерҙе, иғтибарлылыҡты үҫтерә.

**Ниндәй материалдан**

**Уйын барышы:** был уйын әкиәт сюжетына төҙөлгән. Төп герой - Ҡыш бабай. Был ролгә телмәре бай бала һайлана йәки тәрбиәсе була.

Ҡыш бабайға байрам өсөн бик күп уйынсыҡтар кәрәк. Унын өс ярҙамсыһы бар: "ағас һалдат", "тимер арба", "ҡағыҙ кеше".

Ҡыш бабай һәм унын өс ярҙамсыһы һанашмаҡ ярҙамында билдәләнә.Ҡыш бабай үҙенә кәрәкле уйынсыҡтарҙы алып килергә һорай, ә унын ярҙамсылары төркөмдәге уйынсыҡтар араһынан үҙе ниндәй материалдан эшләнгән, шундай предметты алып килергә тейешле. Мәҫәлән: Ҡыш бабай: "Миңә ултырғыс кәрәк, кем алып килә?"- ти. Ағас һалдат: "Ултырғыс ағастан эшләнә, мин алып киләм", - ти.

Ҡыш бабай аҙаҡ һәр уйынсыҡты ҡарап, тикшереп сыға, тағы ла ниндәй материалдан икәнлеген әйтеп сыға.

**Ҡағиҙәһе:** алдан төрлө материалдан уйынсыҡтар әҙерләнә. Алып килгән уйынсыҡ тураһында тулы һөйләмдәр менән һөйләү мотлаҡ. Геройҙар алмашынып тора.

**Әһәмиәте:** уйын телмәр ҡеүәтен, төрлө материалдар тураһында аң – белемде үҫтерә, иғтибарлылыҡ һәм ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләй.

## Бер рәткә теҙ

**Уйын барышы:** тәрбиәсе балаларға төрлө оҙонлоҡтағы 10-ар таяҡса бирә. Иң оҙон таяҡсанан башлап, уларҙы кәмей барыу тәртибендә теҙергә кәрәк. 2 – 4 бала менән ярыш ойошторорға мөмкин.

**Йыһаз:** һәр балаға 2-нән 20 сантиметр оҙонлоғондағы 10-ар таяҡса.

**Ҡағиҙәһе:** бер-береһенән 2 см алыҫлыҡта ара ҡалдырып, таяҡсаларҙы кәмегән тәртиптә теҙергә кәрәк. Бала яңылышһа, уйындан сыға. Ҡараш менән сағыштырырға мөмкин. Уйнау ваҡыты – 8-10 минут.

**Әһәмиәте:** уйын предметтың оҙонлоғон сағыштыра белеүҙе нығыта, иғтибарлылыҡ, етеҙлек тәрбиәләй, хәтерҙе нығыта.

## Миндә ниндәй һүрәт

**Уйын барышы:** һәр балаға 4-әр һүрәт бирелә. Һанашмаҡ ярҙамында "көтөүсе" һайлана. Ул үҙ теләге менән бер һүрәтте ала ла, уны һүрәтләй.

Ә балалар ул һөйләгәнде үҙҙәренең һүрәттәре менән сағыштырып ултыралар. "Бер", "ике", "өс"! - тигәс, бөтә балалар ҙа "көтөүсе" һүрәтләгән һүрәтте үҙҙәренең һүрәттәре араһынан табып, күрһәтергә тейештәр. Кем дөрөҫ күрһәтмәгән, һүрәттәрен кире ала, кемдеке дөрөҫ – өҫтәлдә ҡалдыралар. Уйын аҙағында кемдең бер һүрәте лә ҡалмай, шул – еңеүсе була.

**Йыһаз:** уйынсыҡтар, йәнлектәр, сәскәләр һ.б. төшөрөлгән һүрәттәр - дүртәр дана. Бөтәһе - 20 һүрәт. "Лото" уйынындағы һүрәттәрҙе ҡулланырға мөмкин.

**Ҡағиҙәһе:** "Бер", "ике", "өс"! - тигәс, бер генә һүрәт күрһәтергә кәрәк. Уйын бөткәс, көтөүсе итеп, икенсе бала һайлана.

**Әһәмиәте:** уйын телмәр ҡеүәтен үҫтерә, иғтибарлылыҡ, етеҙлек тәрбиәләй.

## Баҡсасы

**Уйын барышы:** балалар өҫтәл янында ултыра. Бер бала – баҡсасы. Өҫтәлдә һүрәттәр ята: йәшелсәләр, емештәр, сәскәләр. Баҡсасы бер баланы саҡыра ла, әйтә: "Минең баҡсам бар, әйҙә, ятраҡаныңды өҙ!"

Бала өҫтәл янына килә һәм үҙе өҙөргә теләгән йәшелсәме, емешме, сәскәме төшкән һүрәткә ҡарай ҙа уны һүрәтләп һөйләй башлай. Өҫтәл янында ултырған балалар шул һүрәтте табырға тейеш. Кем алдан һүрәтте таба, ул – баҡсасы була. Уйын һүрәттәр бөткәнсе дауам итә.

**Йыһаз:** өҫтәлдәге һүрәттәр һаны 8-10 – дан артмаҫҡа тейеш.

**Ҡағиҙәһе:** бала тулы һөйләм менән әйтергә тейеш: "Мин еләк яратам. Мин еләк өҙәм". Кем дөрөҫ яуап бирмәй, уйындан сыға.

**Әһәмиәте:** уйын телмәр ҡеүәтен, уйлау һәләтлелеген үҫтерә, иғтибар тәрбиәләй.

## Миҙгелдең күршеләрен әйт

**Уйын барышы:** был уйын өсөн бер нисә бала алына. Ғәҙәттә, кескәйҙәр йыл миҙгелдәренең күршеләрен насар үҙләштерә. Шуға күрә, 4 йоҙроҡ ҙурлыҡ сепрәк туп, йәки ағас кубиктар алына. Улар 4 төҫтә: аҡ – ҡышты аңлата, йәшел – яҙҙы, ҡыҙыл – йәйҙе, һары – көҙҙө. Ошо предметтар ярҙамында балалар йыл миҙгелдәрен теҙеп уйнайҙар һәм уларҙың күршеләрен отоп алырға өйрәнәләр.

Мәҫәлән, йәйҙән һуң ниндәй миҙгел? Шул рәүештә бөтә миҙгелде лә теҙеп сыҡҡас, уларҙың күршеләрен билдәләү еңелгә төшә.

**Ҡағиҙәһе:** кем яңылыша, ул бала ҡарап ҡына ултыра. Алдан төҫтәрҙе нығытыу кәрәк.

**Әһәмиәте:** уйын төҫтәрҙе нығытырға, хәтерҙе, уйлап эш итеү һәләтен, телмәр ҡеүәтен үҫтереүгә ярҙам итә.

## Ниндәй әкиәттән?

**Уйын барышы:** балалар ике төркөмгә бүленә. Беренсе төркөм (3 - 4 бала) шаршау артына йәшенә һәм үҙҙәре теләгән әкиәттең өҙөгөн тасуири итеп, әкиәт геройҙары булып, һөйләйҙәр.

**Ҡағиҙәһе:** бер үк әкиәтте ҡабатларға ярамай. Әкиәт өҙөгө балалар аңларлыҡ булған бер генә күренештән торорға тейеш.

**Әһәмиәте:** уйын хис-тойғоно бирә белергә, тасуири итеп һөйләргә, бәйләнешле телмәр үҫтереүгә ярҙам итә.

## Һүҙ өҫтә!

**Уйын барышы:** һанашмаҡ менән бер бала һайлана. Ул уйынды башлай:

- Мин йыуам!

Икенсе бала, был һөйләмгә бер һүҙ өҫтәп, әйтергә тейеш:

- Мин иҙән йыуам.

Өсөнсө бала:

- Мин ҡоям.

- Мин һыу ҡоям, - тип өҫтәй дүртенсе бала.

Балалар ауырһынһа – тәрбиәсе ярҙамлаша.

**Ҡағиҙәһе:** бер үк баланан һорамайҙар. Тәүге осоро кем теләй – шул уйнай. Уйынды үҙләштергәс, балалар бер-бер артлы һүҙҙәр әйтә алалар.

**Әһәмиәте:** уйын бәйләнешле телмәрҙе, зиһенде, хәтерҙе үҫтерә.

### Зинһар өсөн

**Уйын барышы:** бер төркөм балалар ҡатнаша, улар түңәрәк яһап теҙеләләр. Уйын өсөн төрлө хәрәкәттәр алырға мөмкин (бейеү, аэробика, физкультура хәрәкәттәре).

Тәрбиәсе берәр ниндәй хәрәкәт күрһәтә һәм балаларға иғтибарлы булырға, ошо хәрәкәтте иҫтә ҡалдырырға тәҡдим итә. Аҙаҡ: "Зинһар өсөн!"- тип әйтә һәм балалар теге хәрәкәтте ҡабатлап күрһәтергә тейештәр. Кем яңылыша, ул уйындан сыға.

**Ҡағиҙәһе:** түңәрәккә бер-береһенән алыҫыраҡ ара ҡалдырып, теҙелергә кәрәк.

**Әһәмиәте:** уйын хәрәкәтләнә белергә, иғтибарлы булырға өйрәтә.

## Сюжетлы уйындар

Балаларға үҙ-аллы уйнау мөмкинселеге биреү өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу кәрәк. Кәрәкле уйын атрибуттарын балалар менән дәрестәрҙә әҙерләргә, шулай уҡ ата-әсәләр ярҙамында ла эшләргә була.

Сюжетлы уйын ваҡытында балаларҙа теге йәки был күренешкә дөйөм ҡараш барлыҡҡа килә, берҙәмлек тойғолары уяна, тирә-йүндәге тормош сағылышын аңлау дәрәжәһе арта. Унын фантазияһы байый,

ижади һәләте үҫә. Уйында бала йәшәй, сыныға, үҙаллылыҡҡа өйрәнә. Балалар өсөн уйын – ысынбарлыҡ һәм эшмәкәрлек.

## Элемтә бүлеге

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы элемтә үҙәгендә эшләгән кешеләрҙең хеҙмәте менән таныштырыуҙы дауам итеү; эш барышы менән ентекләп таныштырыу; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

Сюжетты байытып, үҙ-ара дуҫ, татыу уйнауҙы дауам итеү.

**Йыһаз:** ирекле сәғәттәрҙә балалар менән конверттар, бәләкәй китаптар, журналдар, гәзиттәр, открыткалар әҙерләү. 2-3 почта йәшниге, ата-әсәләр ярҙамында төрлө ҙурлыҡтағы ҡумталарҙан посылкалар, хат ташыусылар өсөн кейем-һалым, сумкалар тегеү, һәр адресатҡа тәғәйенләнгән кәштәләргә бүленгән шкаф эшләү, телефон, эш өҫтәле әҙерләү.

**Ҡағиҙәһе:** элемтә үҙәгенә экскурсия ойоштороп, унда эшләүселәр менән, эш төрҙәре менән танышыу; ролдәрҙе бүлеп биреү (тәүге осоро): элемтә бүлеге етәксеһе, хат-гәзит айырыусылар, ташыусылар, һ.б. "Ғаилә" уйыны менән берләштерергә мөмкин.

## Дауахана

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы һаулыҡ һағында торған кешеләрҙең хеҙмәте менән тулыраҡ таныштырыу; эш барышы менән ентекләп таныштырыу; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

**Йыһаз:** ирекле сәғәттәрҙә балалар менән рецепттар, анализдар һалыр өсөн төрлө бәләкәй ҡумталар әҙерләү. Ата-әсәләр ярҙамында табиптар өсөн кейем-һалым тегеү; телефон, эш өҫтәле, дауахана өсөн кәрәкле йыһаздар һәм эш ҡоралдары әҙерләү; ҡурсаҡтар.

**Ҡағиҙәһе:** ауырыуҙарҙы мөләйем йөҙ менән ҡаршылай, һораша белеү. Кәрәкле кәңәштәр биреп, рецепт яҙып бирә белеү. Ролдәрҙе бүлешә һәм уларға ярашлы эш башҡара белеү.

## Ҡошсолоҡ фермаһы

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы ҡош тәрбиәләүселәр хеҙмәте менән тулыраҡ таныштырыу; эш барышы менән ентекләп таныштырыу; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

**Йыһаз:** ирекле сәғәттәрҙә балалар менән папье-маше ярҙамында йомортҡалар, ҡоштар ашатырға ем, уларҙы һалыр өсөн төрлө бәләкәй ҡумталар әҙерләү. Ата-әсәләр ярҙамында ҡошсолар өсөн кейем-һалым тегеү; инкубатор аппараты, себештәрҙе үлсәү (весы), телефон, ҡоштар өсөн рацион төҙөү, дауалауға дарыуҙар, эш өҫтәле, себештәр һатыу өсөн кәрәкле йыһаздар һәм эш ҡоралдары әҙерләү; ҡурсаҡтар.

**Һүҙлек эше:**

**Ҡағиҙәһе:** ҡошсолоҡ фермаһының эшен ойоштора белеү: директор, баш инженер, технолог, ветврач, ҡош ҡараусы эшселәр башҡарған эш-хәрәкәттәрҙе теүәл, ролгә тап килтереп үтәү.

Инкубатор ярҙамында себеш сығарыу өсөн ниндәй шарттар кәрәклеген күҙ алдына килтерә белеү һәм уны уйында үтәргә өйрәнеү. Себештәрҙе ауырытмай, тиҙ үҫтереү өсөн нимәләр эшләргә кәрәклеген белеү һәм үтәү. Ролдәрҙе бүлешә һәм уларға ярашлы эш башҡара белеү.

## Ғаилә

**Маҡсат:** балаларҙы үҙаллы сюжеттар уйлап сығара белергә, уйын барышында бер-береһенә бәйле булған бер нисә сюжетты башҡарырға өйрәтеү (өҫтәл әҙерләргә, һауыт-һаба йыуырға, ҡунаҡ ҡаршыларға, ғаилә ағзаларының һөнәрҙәренә бәйле булған күренештәр).

Сюжет буйынса төрлө роль башҡарған балалар менән кәңәшләшеп уйнарға өйрәтеү (әсәй – ҡыҙы, атай – улы, ҡартатаһы). Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атарға (әсәй, атай, апай, ағай, ҡартатай, өләсәй, һеңле, ҡусты) һәм улар башҡарған эш-хәрәкәттәрҙе башҡарып уйнарға өйрәтеү: әсәй кер йыуа, ашарға бешерә; атай мал ҡарай, утын ташый, сөй ҡата; ағай атайға ярҙамлаша; апай һауыт-һаба йыуа. Өлкәндәрҙең эшенә

ҡыҙыҡһыныу уятыу. Балаларҙың иғтибарын, хәтерен, телмәрен, фекерләү һәләтен үҫтереү.

**Йыһаз:** уйынсыҡ бүлмә йыһаздары, һауыт-һаба, кейем-һалым, ҡурсаҡтар, түшәк-юрған, йәки уларҙы алмаштырыусы предметтар.

## Сәс алыусы

**Маҡсат:** балаларҙы сәс алыусының эше менән таныштырыуҙы дауам итеү, уның эшенең кәрәклеген, әһәмиәтен аңлатыу. Сәс алыусы һөнәренең күп тармаҡлы икәнлегенә төшөндөрөү: ир-ат залы, ҡатын-ҡыҙ залы, тырнаҡтар таҙартыу һәм буяу залы (маникюр). Сәс алыусыға кәрәкле эш ҡоралдары: алъяпҡыс, япма, тараҡ, ҡайсы менән дөрөҫ эш итергә өйрәтеү. Үҙ-үҙҙәрен төрлө йәмғиәт урындарында дөрөҫ тота белеү күнекмәләрен тәрбиәләүҙе дауам итеү. Балаларҙа бөхтәлек, матурлыҡ, иплелек һыҙаттары тәрбиәләү.

**Һүҙлек эше:** балаларҙың һүҙ байлыҡтарын яңы һүҙҙәр менән байытыу: көҙгө, ҡайсы, тараҡ, япма. Һөйләү телмәрен, фекерләү һәләтен, хәтерҙе үҫтереү.

**Йыһаз**: алъяпҡыс, япма, картондан йәки пласмассанан эшләнгән тараҡ, ҡайсы, трюмо, төрлө шампунь, буяу, лак һауыттары (эстәре буш һәм таҙа итеп йыуылған), сәс һәм тырнаҡ тәрбиәләү кәрәк-яраҡтары, фен, ҡалпаҡтар, сәс бөҙрәләүгә бигудилар, сәс биҙәү материалдары һ.б.

**Уйын барышы:** уйын алдынан тәрбиәсе балалар менән парикмахерскаяла эшләүселәр һөнәренең төрлө булыуы һәм уларҙың кешеләрҙе матурлауға, уларҙың сәс-тырнаҡтарын тәрбиәләүгә йүнәлтелгән эштәре тураһында әңгәмә үткәрә, һүрәттәр, журналдар күрһәтә. Был һөнәрҙең ҙур оҫталыҡ талап итеүе, һәр кешенең үҙенә генә хас булған матурлығын аса белеү һәләтенә эйә булыу кәрәклеге тураһында һөйләшәләр. Кешенең йәш кимәленә ҡарап, ниндәй осраҡҡа тәғәйенләп (байрамға, эшкә, ҡунаҡҡа) сәсен киҫтереүе һәм биҙәүе, йөҙөнә макияж һалыуы тураһында әңгәмәләшәләр.

Тәрбиәсе парикмахерскаяға ингәндә һаулыҡ һорашырға, кешеләр күп булһа, сират алып, көтөп ултырырға кәрәк икәнлеген, йәки алдан телефон аша хеҙмәтләндерелеү өсөн сиратҡа яҙылыу мөмкинлеген аңлата.

Тәрбиәсе алъяпҡыс кейеп, килгән балаларҙы көҙгө алдына ултыртып, уларға япма бәйләп, нисек итеп эш ҡоралдары ярҙамында сәстәрҙе киҫеү, буяу, бөҙрәләтеү, үреү, төрлөсә матур итеп биҙәү кеүек эш төрҙәрен башҡарып күрһәтә. Ҡул тырнаҡтарына (маникюр), аяҡ тырнаҡтарына (педикюр) эшләү, массаж яһау, лак менән буяу кеүек эш алымдарын күрһәтә. Кассаға аҡса түләү, эш ваҡытында парикмахерская хеҙмәткәрҙәре һәм клиенттар араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәргә инеү, аралашыу ҡағиҙәләренә өйрәтә.

## Китапхана

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы китапханасы һөнәре менән тулыраҡ таныштырыу; эш йөкмәткеһе һәм барышы менән ентекләп таныштырыу; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

Китапҡа һаҡсыл ҡараш, һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһаз:** эш өҫтәле, китапхана өсөн кәрәкле йыһаздар: китаптар, китап кәштәһе, һәр балаға карточкалар.

**Ҡағиҙәһе:** китапханасы һайланыла. Балалар китапхананан үҙҙәренә оҡшаған китапты һайлап ала, китапханасы баланың карточкаһына "яҙа". Китаптарҙы берәр төҫ йәки һан менән билдәләргә мөмкин.

## Мәктәп

**Уйын маҡсаты:** балаларҙы бер-береһен тыңлап, ишетә белергә өйрәтеү, уларҙы психологик яҡтан мәктәпкә әҙерләү; башҡарған эштәре тураһында эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле итеп һөйләргә өйрәтеү.

**Йыһаз:** китаптар, һәр балаға - дәфтәр һәм ручка, портфель, таҡта, аҡбур, сюжетлы һүрәттәр, уларҙы таҡтаға йәбештереп ҡуйыр өсөн магнит киҫәктәре.

**Ҡағиҙәһе:** бөтә балалар ҙа "уҡытыусы" ролендә алмашлап булалар. "Дәрестәр" оҙаҡ булмай. Тәрбиәсе үткәргән дәрестәрҙе ҡабатлау - бик тә отошло була.

## Мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә уйнау күнекмәләренең формалашыуын билдәләү күрһәткестәре

Уйын барышында үҙҙәренең белемен ҡуллана беләләр.

Ролдәрҙе сюжетҡа ярашлы һәм аңлы рәүештә уйнай алалар, телмәр саралары ярҙамында уйында башҡарған ролдең эстәлеген асырға тырышалар.

Уйын барышында үҙ-үҙен тыныс тоталар, башҡаларға ярҙамлашалар, тиҫтерҙәренең һәм ололарҙың кәңәшенә ҡолаҡ һалалар, бәхәсле осраҡтарҙы дәлилдәр килтереп сисергә тырышалар.

Театрлаштырылған уйындарҙа сәхнәләштереү өсөн әҫәрҙәрҙе үҙ-аллы һайлайҙар, кәрәкле атрибуттарҙы һәм декорацияларҙы әҙерләйҙәр, ролдәрҙе үҙ-ара килешеп бүлешә алалар.

Театрҙың төрлө төрҙәрен ҡуллана алалар.

Үҙаллы төрлө төр хәрәкәтле һәм уйындарҙы ойоштора беләләр һәм уйнай алалар.

Үҙаллы лото, мозаика, домино һ. б. дидактик уйындарҙы ойошторалар һәм уйнай алалар.

## Ҡулланылған әҙәбиәт:

1. Ахметов А.М. Бала-сағаның уйын фольклоры – Детский игровой фольклор. - Уфа, Китап, 2007. – 344 с.
2. Башаева Т. В. Развитие восприятия у детей. Ярославль, "Академия управления", 1997.
3. Богуславская З. М., Смирнова Е. О. Развивающие игры для детей младшего дошкольного возраста. М., "Просвещение", 1991.
4.Бондаренко А. К. Дидактические игры в детском саду. М., "Просвещение", 1991.
5. Выготский Л.С. Игра и ее роль в психическом развитии ребенка // Вопр. психологии. – 1966, №6, 75с.
6. Ғ. Ғ. Ғәлиева, З. Ғ. Нафиҡова. Башҡорт балалар баҡсалары өсөн уҡытыу – тәрбиә программаһы, Өфө, 1999.
7. И. Ғ. Ғәләүетдинов. Уйнайыҡ, дуҫтар, бергәләп. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1987
8. Карпова Е. В. Дидактические игры. Ярославль, Академия развития, 1997.
9. Косвин Г. А., Рогосовская Е. Р. Игры в детском саду. М., Просвещение, 1984.
10. Лайзане С. Я. Подвижные игры для малышей. М., Просвещение, 1987.
11. Леонтьев А.Н. Психологические основы дошкольной игры // Избр. псих. соч.: В 2-х томах, - М., 1983, т.1, - 306 с.
12. Максаков А. И., Тумакова Г. А. Учите, играя. М., Просвещение, 1983.
13. Маханева М.Д. Театрализованные занятия в детском саду. – М.,2001.
14.Маханева М.Д., Рещикова С.А. Игровые занятия с детьми от 1 до 3 лет: 15.
15. Методическое пособие для педагогов и родителей. – М.: ТЦ Сфера, 2006, 96 с. (Ранний возраст).
16. Недоспасова В.А. Растем играя: сред. и ст.дошк. возраст: Пособие для воспитателей и родителей, 2-ое изд., - М.: Просвещение, 2003, - 94 с.
17. Степанова О.А., Вайнер М.Э., Чутко Н.Я. Методика игры с коррекционно-развивающими технологиями: Учебное пособие для студ. Сред.пед.учеб. заведений. – М.: Издательский центр «Академия», 2003. – 272с.
18. Эльконин Д.Б. Психология игры. – М., 1978.
19. Аникеева Н.П. Воспитание игрой. – Новосибирск, 1994.
20. Михайленко Л.Я., Короткова Н.А. Игры с правилами в дошкольном возрасте. – М., 2000.
21. Коротков И.И Подвижные игры детей. – М., 1987.
22. Степанова О.А. Игровая школа мышления. – М., 2003.

# Йөкмәткеһе


| | |
|---|---|
| Аңлатма яҙыу | 1 |
| Балалар баҡсаһында уйын эшмәкәрлеге<br>Сюжетлы-ролле уйын: | 3<br>4 |
| а) беренсе һәм икенсе кескәйҙәр төркөмө | 8 |
| б) уртансылар төркөмө | 12 |
| в) өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәре | 15 |
| Дидактик уйын: | 17 |
| а) беренсе һәм икенсе кескәйҙәр төркөмө | 20 |
| б) уртансылар төркөмө | 21 |
| в) өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәре | 23 |
| Театрлаштырылған уйын: | 25 |
| а) беренсе кескәйҙәр төркөмө | 25 |
| б) икенсе кескәйҙәр төркөмө | 27 |
| в) уртансылар төркөмө | 28 |
| г) өлкәндәр төркөмө | 30 |
| д) мәктәпкә әҙерлек төркөмө | 32 |
| «Башҡорт балалар баҡсалары өсөн уҡытыу-тәрбиә программаһы» буйынса тәҡдим ителгән уйындар: | |
| а) беренсе кескәйҙәр төркөмө | 34 |
| Беренсе кескәйҙәр төркөмөндә уйнау күнекмәләренең формалашыуын яҡынса билдәләү күрһәткестәре | 48 |
| б) икенсе кескәйҙәр төркөмө | 48 |
| Икенсе кескәйҙәр төркөмөндә уйнау күнекмәләренең формалашыуын яҡынса билдәләү күрһәткестәре | 65 |
| в) уртансылар төркөмө | 66 |
| Уртансылар төркөмөндә уйнау күнекмәләренең формалашыуын яҡынса билдәләү күрһәткестәре | 80 |
| г) өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәре | 80 |
| Өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмдәрендә уйнау күнекмәләренең формалашыуын яҡынса билдәләү күрһәткестәре | 96 |
| Ҡулланылған әҙәбиәт | 97 |
| Йөкмәткеһе | 98 |

Нафикова Закия Галиахметовна

# Растем играя

Методическое пособие

(на башкирском языке)

Редактор